ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 октябрь (ҡарасай) 2017

№40 (770)

15 йыл

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Республикабыҙ ябай төбәк түгел -**
халыҡ шуны онотмаһын өсөн кәрәк был байрам



3

**Өфөбөҙҙөң яңы йөҙө...**
яңыса буласаҡ



5

**Милли үҙаң һәм рух...**
туған тел һәм моң менән инә балаға



8-9

**Донъя күреп, халыҡтарҙы белеп...**
(Журналистың ҡуйын дәфтәренән)



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 5 октябрҙән 15 октябргә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзанырыҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителде. Ошо мәлдә республикаsuccesының һәр ҡалаһында-ауылында В0665 индексклы "Киске Өфө"гә 508 һум 92 тин менән яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең 15 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ



# ЙӘШ БЫУЫНҒА ТАПШЫРАЙЫҠ...

## дуҫлыҡ, татыулыҡ мөхитен



**Үҙем башҡорт телен яҡшы кимәлдә белмәйем, әммә бер аҙ аңлайым. Ләкин бөгөн Башҡортостан мәғариф учреждениеларында башҡорт телен уҡытыу тураһында һүҙ барғанда, мин "Мотлаҡ уҡытырға тейешбеҙ!" тиеүсе кешеләр яҡлымын.**

Сөнки, беренсенән, беҙ йәшәгән республика нәҡ башҡорт халҡы үҙ мәҙәниәтен, телен, йолаларын тулы кимәлдә һаҡлай алһын өсөн төҙөлгән. Шуға күрә, Рәсәйҙәге бөтә милли республикалар территорияһында аҫаба халыҡтарҙың туған телен бөтәһе лә өйрәнергә, уҡырға тейеш. Шундай дуҫтарса, туғандарса мөнәсәбәт булмай тороп, күпселектә тәшкил иткән аҙ һанлы халыҡтар рус теле менән конкурентлыҡ шарттарында туған телдәрен һаҡлап ҡала алмаясаҡ. Бөгөнгө заман шарттарында тел архаик вариант ҡына булып һаҡлана алмай, ул үҫешергә, үҙгәрергә тейеш һәм быныҡ өсөн матди база булдырыу мотлаҡ. Тимәк, башҡорт теле йәшәһен өсөн ул заманса шарттарға ҡулайлашып, үҫешеп, рус теле менән тиң булырға тейеш. Шуға күрә, урыҫ телле кешеләр ярҙамынан тыш, башҡорт теле үҫешә алмай. Быны аңлап, башҡорт телен туған теле итеп белгәндәр ҙә, икенсе туған теле итеп күргәндәр ҙә, сит тел итеп ҡабул иткәндәр ҙә уны уҡырға, өйрәнергә үҙе теләк белдереп торорға тейеш, тип уйлайым.

Мин үҙем сығышым менән Әлшәй районынан, башҡорт телендә бик үк яҡшы һөйләшмәһәм дә, уны мәктәптә өйрәнмәһәм дә, башҡорт һәм татар таныштарым, дуҫтарымды икмәк-тоҙлоҡ аңларға өйрәндем. Күп милләтле республикала кешеләрҙең бер-береһенең мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен хөрмәт итеп йәшәүе һәм йәш быуынға ла ошо дуҫлыкты һәм татыулыҡты тапшырыуы мөһим. Бына шуның өсөн дә башҡорт теле уҡытылырға, башҡорт телендә уҡырға тейеш йәш быуын.

**Николай БЕССИЛИН,**
**БДУ-ның Тарих һәм дәүләт идараһы институты доценты.**

ТУҠТА, МӘЛ!



Ғафури районының Красноусол ҡасабаһында башҡорт полктарының 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуына 205 йыл тулыуға бағышланған "Тоньяҡ амурҙары" мемориаль комплексы асылды. Халыҡ аҡсаһына төҙөлгән мемориаль комплексты асыу сараһына урындағы халыҡ һәм хәрби-патриотик клубтарҙың вәкилдәре килде. "1812 йылғы Ватан һуғышында республиканан 28 башҡорт полкы ҡатнашҡан. Улар иҫтәлегенә Башҡортостанда беренсе мемориалды асыу өсөн йыйылғанбыҙ. Был ваҡиға менән ғафуризар хаҡлы рәүештә ғорурлана ала", - тине "Мәргән уҡсы" ойошмаһы етәксеһе Юлай Ғәлиуллин байрам тантаһында.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Һеҙҙең илһөйәрлек низә сағыла?*

***Нәсмән МУСИН, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:*** Илен, халҡын, ғөмүмән, бөтөн кешелекте һөймәгән яҙыусы булмайҙыр ул, тип уйлайым. Күпселек ижад кешеләренең һәләте тап ана шул тыуған еренә, иленә, халҡына булған һөйөү хисенән ярала ла. Тыуып-үҫкән ерende данлап, уның гүзәллегенән илһам алып йәшәү генә етмәй ижадсыға. Яҙыусы буларак, ғүмерем буйы үҙ бурысымды тыуған ер биҙәге һәм халҡыбыҙ байлығы - урманыбыҙҙы, туған тәбиғәтебеҙҙе һаҡлауҙа күрҙем; тәбиғәтебеҙ байлығын ишәйтергә тырыштым, уның именлеге, сафлығы өсөн көрәшеүсе ябай хеҙмәт кешеләрен данларға тырыштым. Ошо бурыс, ниндәй генә әҫәр яҙһам да, ижадымдың төп темаһы булып торҙо, сөнки урман - ул ағас ҡына түгел, ул беҙҙең йәшәү сығанағы ла. Ошоға тиклем урмандарыбыҙҙы аяуһыҙ талауға, уны ҡырағайҙарса ҡырып, әләф-тәләфләүҙәргә юл ҡуйылып килгән булһа, хәҙер бер аҙ аңлай төштөләр кеүек, сөнки урманды ҡырыу - үҙең ултырған ботаҡҡа балта сабыу менән бәрәбәр: ер-һыуҙарыбыҙ, кейек-йәнлек - бөтөн тереклек ҡоророаҡ һәм юҡҡа сығасаҡ. Элек, совет осоронда ла ҡырылды урман, уның ҡарауы, ул саҡ мөмкин тиклем уны һаҡлау саралары ла күрелде: ҡырҡылған диләнкеләр, исмаһам, таҙартылып, урынына йәш үҫентеләр ултыртыла торғайны. Урман ҡараулы булды, сөнки урман хужалыҡтарында байтаҡ кеше эшләне. Бер лесничествола тиҫтәләгән эшсе мәшғүл булһа, хәҙер ни бары 2 кеше эшләй. Өҫтәүенә, бер нисә район бер хужалыҡҡа берләштерелеп, объекттар эрелэтелде, ә унда эшләүселәр һаны кәметелде. Урмандарға контроль булмауы шуға ла тәбиғи хәлгә әүерелде. Йәй буйына илдә урмандарыбыҙ яна - ҡараусылары юҡ, шунлыҡтан яна, әлбиттә. Унан айырым әҙәмдәрҙең вайымһыҙлығынан, тәртипһеҙлегенән, яуапһыҙлығынан килеп сыға был йышылыҡ.

Ошонан сығып, яҙыусының бурысы йәнә лә үҙебеҙ йәшәгән мөхитте, уның тәбиғи байлыҡтарын күҙ ҡараһылай һаҡларға өйрәнгән, ер-һыу ҡәҙерен белгән аңлы быуын тәрбиәләүгә өлөш индереүҙә, тигән фекерҙәмен. Илһөйәрлегем - ул ата-бабаларым ерен ташламай, ошонда үҫеп, белем алып, үҙ еремдә көрәгем тейеүе; туған телемдә әҫәрҙәр яҙып, үҙ халҡыма хеҙмәт итеүем. Туған тел, тигәндән, республикабыҙҙа дәүләт теле статусы бирелеп, закон менән нығытылған булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт теленә ҡарата хаҡһыҙ рәүештә һаҡһыҙ һәм күрәләтә вайымһыҙ мөнәсәбәттәрҙең тыуып ҡына тороуы әлеге лә баяғы тәрбиәһеҙлек һәм аҡылһыҙлыҡ бәләһе ул. Был бөтәбеҙгә лә, шул иҫәптән, үҙ милләтебеҙ вәкилдәренә лә берҙәй ҡағыла, сөнки арабыҙҙа әсә телен һанламай, балалары менән ватаемерә икенсе телдә аңлашыусы, башҡортса китап, гәзит-журнал уҡымаусы башҡорт ғаиләләре булғанда, телебеҙ яҙмышы, ысынлап та, оло хәүеф алдында. Туған телебеҙ, тимәк, илебеҙ һәм халҡыбыҙ яҙмышы туранан-тура иң тәүҙә үҙебеҙҙең илһөйәрлек асылыбыҙға, граждандыҡ бурысыбыҙға һәм, ниһайәт, булдыҡлылығыбыҙға бәйле икәнен иҫтән сығармайыҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыңлөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТУҒАН ТЕЛДЕ БЕЛМӘҮ...

## оят булһын!

***Таңсулпан ҒАРИПОВА, яҙыусы:*** Беҙҙең быуын дәүерендә туған телебеҙ инде икенсе тапҡыр ауырлыҡтар кисерә. Совет заманында рус теленән башҡа милли телдәргә иғтибар булманы, улар мәғариф учреждениеларында йүнләп өйрәнелмәне. Милләтебеҙҙең ҡасаба, ҡала ерендә йәшәгәндәре балаларына бөтөнләй башҡортса өйрәтмәй, телебеҙ ауыл теле булып ҡала яҙҙы. Бөгөнгөләй хәтерҙә, һөнәр юлымды башлаған ғына саҡта балалар баҡсаһында эшләнем һәм ул мәлдә балалар менән тик русса ғына аралашыу талап ителде. Хеҙмәттәшем менән үҙ-ара мин башҡортса, ул татарса һөйләшкәндә ишетеп, етәкселек: "Балалар һеҙҙе ишетә, телдәре боҙола", - тип шелтә һаҡ торғайны. Бөгөн бит бындай ҡәтғи тыйыуҙар юҡ, күп нәмә халыҡтың үҙенән тора, милли ғорурлыҡ булыу-булмауға барып тәртәлә. Милли ғорурлыҡты интеллигенция тәрбиәләй, халыҡтың зыялы шәхестәре ошо тойғоно һәр кем күңеленә еткерергә тейеш. Милли ғорурлығы булмаған кеше үҙен бахыр итеп тоя, уны башҡа милләт вәкилдәре лә һанға һуҡмай. Элек даими рәүештә халыҡ менән осрашып, бәйләнештә булған зыялы шәхестәр - яҙыусылар, шағирҙар, журналистар, йәмәғәт ойошмалары етәкселәре һәм башҡа алдынғы ҡарашлы кешеләр бөгөн һайлауҙар алдынан, гәзит-журналға яҙыулы кампанияһы мәлендә генә халыҡ менән аралаша ла, шуның менән эштәре лә бөтә. Бының сәбәптәре финанс мәсьәләләре менән дә бәйле булһа ла, бөтә нәмә аҡса менән үлсәнмәй. Милләттең рухи ҡомартҡылары, туған телгә ҡағылышлы мәсьәлә һәр ваҡыт уяу булыуҙы талап иткән эш.

Әлбиттә, былар ваҡытлыса күренеш, башҡорт теле быуаттар аша ошо көнгә тиклем йәшәп килгән, донъяға билдәле мәшһүр эпостар, ауыҙ-тел ижады бүләк иткән тел һәм киләсәктә ул был ауырлыҡтарҙы ла үтеп сығыр. Илһөйәрлек туған тел аша тәрбиәләнеүен етәкселәр аңлай, шуға ла бөтә илдә рус телен яҡшы өйрәнеү, рус әҙәбиәтен, мәҙәниәтен өйрәтеү сәйәсәтен алып бара. Телдең мөһимлеген таныған кешеләр һәр милләт кешеһенә үҙ моно, үҙ туған теле, үҙ мәҙәниәте яҡын булыуына ла бер саҡ төшөнөр. Сөнки баланы туған тел, йыр-моң, ижад әҙәпле, әхлаҡлы шәхес итеп тәрбиәләй, аң кимәлен үҫтерә. Башҡорт теле - етәкселәр барлыҡҡа килтергән тел түгел, уны юҡҡа сығарырға выждандары ла етмәҫ. Ләкин ошондай һынауҙар үткән мәлдә милләттәштәр үҙ теләге менән балаһын ата-бабалар телендә аралашыуҙан мәхрүм итмәһен. Башҡорт телен яҡшы белеү - ул тәрбиәнең, шәхес булып үҫешеүҙең юғары бер кирһәткесе итеп ҡабул итергә, туған телде белеү менән ғорурланып өйрәнергә кәрәк беҙгә. Туған телде белмәү - оят, тигән фекер һәр башҡорт кешеһенең дә анында булырға тейеш.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙҙең илһөйәрлек ниҙә сағыла?



(Башы 1-се биттә).

***Тимерйән РӘЖӘПОВ, БР Хәрби хәрәкәттәр ветерандары берлеге рәйесе:*** Илһөйәрлек бурысымды илебеҙ именлеген һаҡлауҙа, башҡа төбәктәр менән дуҫлыҡ бәйләнештәре булдырыуҙа, буласаҡ һалдаттар - йәш быуын вәкилдәрендә ватансылыҡ тойғолары тәрбиәләүҙә күрәм. Заманында ҡулға ҡорал тотоп, ил ҡушыуы буйынса, Афғанстанда интернациональ бурысымды үтәнем, Чечнялағы ҡыҙыу нөктәләрҙә лә булырға тура килде. Ҡайҙа ғына йөрөргә тура килгәндә лә үҙемдең Башҡортостан улы икәнемде онотманым. Хеҙмәттәштәрем, хәрби дуҫтарым алдында һынатманым, илем намыҫын иң беренсе планға ҡуйҙым. "Хәрби хеҙмәттәре өсөн", "Хәрби хеҙмәттәшлек өсөн" миҙалдарын, СССР Юғары Советының Маҡтау грамотаһын һәм "Яугир-интернационалист" билдәләрен, шулай уҡ РФ Эске эштәр министрлығы наградаларын ҡәҙерләп һаҡлайым. Улар миңә илебеҙ тарихындағы киҫкен һәм хәл иткес ваҡиғаларҙа туранан-тура ҡатнашып, именлек һәм ил намыҫы хаҡына арналған йылдарымды хәтерләтеп тора. Балаларымда ғына түгел, һәр төрлө осрашыуҙарҙа йәш быуын вәкилдәрендә лә илһөйәрлек тойғоһо, бурысына тоғролоҡ, ил хаҡына фиҙакәрлек сифаттары тәрбиәләүҙә лә ярҙам итә улар. Пенсияға сыҡһам да, хәрби-патриотик бурысыма тоғро ҡалам, сөнки был эштә ял тигән төшөнсә юҡ. Ял итеп, йоҡлап ятһаң, илебеҙ именлеген кем һаҡлашыр ҙа, йәштәргә кем һабаҡ бирер?

Быйыл йәй Баймаҡ районында 6-сы тапҡыр "Утта көйрәгән юлдар" исемле халыҡ-ара хәрби-патриотик йырҙар фестивален үткәрҙек. Әйткәндәй, беҙҙең ойошма бүлексәләре Башҡортостаныбыҙҙың бик күп районларында уңышлы эшләп килә. Бергәләшеп, кәңәшләшеп эш итәбеҙ, әлбиттә. Һәр районда тип әйтерлек хәрби хәрәкәттәрҙең утлы бәрелештәрендә йәшләй генә баштарын һалған яугирҙар иҫтәлегенә һәйкәлдәр асыу кеүек изге бурысты бергәләшеп атҡарабыҙ. Әлеге ваҡытта Луганск халҡына гуманитар ярҙам ойоштораbыҙ. Был эштә республикабыҙ мәктәптәре лә әүҙемлек күрһәтә. Мәҫәлән, Өфөнөң Дим районы мәктәптәре 10 тоннаға яҡын гуманитар ярҙам йыйып тапшырҙы. Был балаларға рәхмәттән башҡа ни әйтәһең? Хәрби-патриотик тәрбиә - ул яугирлыҡ дарманы ғына түгел, шул уҡ ваҡытта үҙ тыуған илең менән ғорурлана белеү, ярҙамсыллыҡ һәм эскерһеҙлек кеүек гүзәл сифаттар һендерә алыуы менән ҡиммәт. Үҙ илең менән ғорурланыу тигәндән, тағы бер факт иҫкә төштө. Былтыр март айында гуманитар ярҙам алып барған саҡта беҙҙең башланғыс менән Луганск Халыҡ Республикаһы Петровское ҡалаһының 22-се мәктәбенә генерал Шайморатов исеме бирелеүен әйтеп китмәй булдыра алмайым. Быға тиклем унда беҙҙең данлы атлы яугирҙар хөрмәтенә асылған музей бар ине инде. Бына шулай итеп, Башҡортостан улдарының даны бөгөнгө көндә лә дуҫлыҡ, именлек хаҡына эшләй һәм төбәктәр, халыҡтар бәйләнешен нығытыуға тос өлөш индерә.

***Мөнәүәрә БОХАРБАЕВА, Башҡортостандың атҡазанған уҡытыусыһы:*** Хәйбулла районының 2-се һанлы Аҡъяр урта мәктәбендә 39 йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыттым. Тимәк, үҙемде илһөйәрҙәр рәтенә ҡуйырға хоҡуғым барҙыр, тием, сөнки илһөйәрлек тойғоһо туған телгә һөйөүҙән башлана. Ошо йылдар эсендә күпме балаға әсә телебеҙ тойғоһо һалынған - иҫәбенә лә сығырлыҡ түгел, уйлап ҡараһаң. Эш һанда ла түгел, әлбиттә, ләкин уҡыусыларымдың башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса белем сифатына шик белдереүсе булманы. Балалар үҙҙәре лә ошо дәрестәрҙе көтөп ала, ихлас ҡатнаша - бер һүҙ менән әйткәндә, үҙ асылдарына ҡайта ине. Мин быны уларҙың күҙҙәренән дә күреп тора инем. Уҡыусыларым араһынан байтағының тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы һөнәрен һайлауы шуға ла тәбиғи булды. Туған тел уҡытыусыһының бурысы - ул белем биреү генә түгел, ә телен, илен, халҡын, уның тарихын, йолаларын, рухи мираҫы хазиналарын яҡшы белгән, ихтирам иткән ысын илһөйәрҙәр тәрбиәләү ул. Мин бурысымды үтәгәнмендер, тип ышанам: уҡыусыларым өсөн бер ваҡытта ла ҡыҙарырға тура килмәне, шөкөр. Илһөйәрлек бурысы эш юҫығында ғына тамамланмай әле. Шәжәрәндә дауам итерлек балалар үҫтереү ҙә оло бурыстарҙың береһе. Бөтә ғүмерен һаулыҡ һаҡлау эшенә арнап, оҙаҡ йылдар хәҙер Аҡъяр дауаханаһында фиҙакәр хеҙмәт көсөн түгеүсе тормош юлдашым, табип Минлеғәлим Әхмәт улы менән өс ул тәрбиәлөп үҫтерҙек. Аллаға шөкөр, һәр береһе лә юғары белем алып, ғаиләле булып, үҙҙәре балалар үҫтерә - беҙҙе ейән-ейәнсәрҙәр менән ҡыуандыралар. Хаҡлы ялда булһам да районыбыҙҙың йәмәғәт тормошонан айырылғаным юҡ - район ағинәйҙәре йәмғиәтенең эшендә ҡатнашам. Ҡыҫҡа ғына итеп, бер һүҙ менән әйткәндә, һеҙҙең был һорауығыҙға, илһөйәрлегем тормош рәүешемдә сағыла, тип әйтергә йөрьәт итһәм, тимәктә, тамаҫтәр микән? Улай тип әйткәндәргә яуабым да әҙер хатта: һуң, маҡтанырға ла рәт кәрәк бит!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә башланғыс кластар уҡытыусыһына һәйкәл ҡуйырға тәҡдим иттеләр. Ошо тәҡдим менән Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың республиканың атҡаҙанған педагогтары менән осрашыуы барышында Өфөләге 42-се лицейҙың химия уҡытыусыһы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы Лиза Әғәҙуллина сығыш яһаны.

✓Республика көнө алдынан Өфө районында Фомичев-Булгаков-Федоровка автомобиль юлында Өршәк йылғаһы аша күпер асыла. Ул 2017 йылдың май аҙағында ремонтҡа ябылғайны. Эштәр графиктан алдараҡ барҙы, шуға күрә объект ваҡытынан алда файҙаланыуға тапшырыла.

✓Республика ҡаҙнаһы Рәсәй Президентының май указдарында билдәләнгән күрһәткестәргә өлгәшеү өсөн Өфөләге мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы өсөн 175,8 миллион һум аҡса бүлә. Дотация иҡтисади һәм социаль тотороҡлоҡто тәьмин итеүгә ҡаралған аҡса иҫәбенә бүленә. Аҡсаны 2017 йылдың аҙағына тиклем түләү ҡүҙаллана. Улар мәҙәниәт һәм балаларға өҫтәмә белем биреү муниципаль учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә тәғәйенләнә.

✓Баш ҡала хакимиәтендә "Өфө" футбол клубының генераль директоры Шамил Ғәзизов ҡаланың бөтә футбол мәктәптәре менән партнерлыҡ килешеүенә ҡул ҡуйҙы. Шулай итеп, 2,5 мендән ашыу йәш футболсы "Өфө" футбол клубының тәрбиәләнеүселәре буласаҡ.

✓Республиканың 100 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек алдынан "Башҡортостан" ғилми порталы масштаблы проекттарҙың береһе булып тора. Уны әҙерләү менән "Башҡортостан энциклопедияһы" хеҙмәткәрҙәре шөғөлләнә. Ресурс республиканы федераль һәм халыҡ-ара кимәлдәге мәғлүмәт киңлегендә таныштырасаҡ. Унда урыҫ, башҡорт һәм инглиз телдәрендә мәҡәләләр табырға мөмкин буласаҡ. Порталдың нигеҙенә Башҡортостан энциклопедияһының электрон версияһы ятасаҡ.

✓Өфө районының Шамонин ауылында йәшәүселәр "Йәшә, урман" акцияһына ҡушылды һәм ике мең ылыҫлы үҫенте ултыртты. Ағастарҙы "Сәләмәт планета" һәм "Тыуған урман" йәмәғәт ойошмалары килтергән. Эштәр урындағы мәктәп һәм ике балалар баҡсаһы биләмәһендә башҡарылды.

✓ **Был донъяла булмаған феномен, беҙҙең халыҡ азатлыҡ өсөн, Рәсәйҙән айырылыу ниәтендә түгел, ә ошо илдә үҙаллы булыу маҡсатында көрәшкә сыҡҡан һәм һәр ваҡыт шул юлда торасаҡ та.**



БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ

**Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителгән көндө беҙ йыл да Республика көнө тип байрам итәбеҙ. Республикабыҙға үҙаллылыҡ яулау йылдарында ошо ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнашҡан кешеләр өсөн был байрам ниндәй әһәмиәткә эйә, улар был көндө нисек билдәләй һәм хәтергә ала икән?**

# РЕСПУБЛИКАБЫҘ ЯБАЙ ТӨБӘК ТҮГЕЛ -

## халыҡ шуны онотмаһын өсөн кәрәк был байрам

***Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА, шағирә:*** Республика көнө хәтирәләрҙе яңыртып, ижадташ дуҫтар менән сәхнәләрҙә әҙәби кисәләр ойошторол үткәрелә торған байрам минең өсөн. Быйыл, мәҫәлән, был мөһим дата айҡанлы 7 октябрь көндө шиғыр кисәһе үтәсәк, шулай уҡ был юлы Республика көнөнә арналған "Алтын тирмә" телевизион тапшырыуында ҡатнаштым, уны 11 октябрь көнө ҡарарға буласаҡ. Иң мөһиме, Башҡортостандың үҙаллылығына арналған, халҡымдың рухын байытырлыҡ, күңелемдәге хистәрҙе сағылдырған шиғырҙар ижад итеп ҡаршылайым был көндө. Суверенлы республика булыу өсөн көрәш барған саҡта мин алғы сафтарҙа булдым, ул йылдарҙа "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә сәркәтип булып эшләнем. Рәсәйҙәге бөтә милли республикаларҙа хәрәкәт башланды, митингылар, осрашыуҙар, ултырыштар үткәрелә ине. Был йылдарҙан ҡалған иҫтәлектәрҙең береһе: күрше Татарстан Республикаһынан Фәүзиә Байрамова менән бер төркөм татар йәштәре Башҡортостанға үҙаллылыҡ биреүҙе яҡлап килде. Һуңынан беҙ ҙә, башҡорттар, рәссам һәм эшҡыуар Фәтих Фазылов яҙмаһында Ҡазанға барып, үҙ сиратыбыҙҙа уларҙың суверенитетына теләктәшлек белдереп ҡайттыҡ. Был сәфәрҙә Минтимер Шәймиев менән осраштыҡ, бик матур сығыштар тыңлау, фекер алышыу бәхете тейҙе.

Бөгөн бөтәбеҙ ҙә янып-көйгән мәсьәләне - башҡорт телен республиканың дәүләт теле итеп ҡабул итеү мәсьәләһен баштан уҡ күтәреп сыҡҡайныҡ. Әммә фекер алышыуҙар ваҡытында Фәүзиә Байрамова: "Башыбыҙ аждаһа ауыҙында саҡта был турала һөйләмәй торайыҡ", - тине. Ысынлап та, бер аҙ ваҡыт үтә биргәс кенә туған телебеҙҙе ошондай юғары статус алыу буйынса эштәр башланды. Дөрөҫөн генә әйткәндә, бөгөнгө башҡорт теленә бәйле хәлдәр үткән быуатта ла, унан алда ла актуаль булып ҡала килде. Был байрам көнөнә ҡағылышлы ваҡиғаларҙың әһәмиәтен республиканың социаль, иҡтисади, сәйәси хәле өсөн ниндәй мөһим булыуына бөгөнгө күҙлектән сығып баһа бирергә булыр ине. Суверенлыҡ яуланған ғына осорҙа, унан һуңғы йылдарҙа республикала бик күп ыңғай үҙгәрештәр булды булыуға, әммә тора-бара яуланған уңыштарҙы юғалтып бөтә яҙҙыҡ. Әлеге көндә бик күп закондарға үҙгәрештәр индерелде, федераль стандартҡа яраҡлы булһын өсөн рәсми эш ҡағыҙҙарын башҡортса яҙыу, эш йөрөтөү туҡтатылды. Үткән быуаттың 70-се йылдарынан һуң тыуған быуын балаларына туған телде уҡытмауҙың, улар хәҙер үҙҙәре ата-әсә булғас, ниндәй хаталы эш икәне беленде. Бөгөн Башҡортостан Республикаһы көнөн билдәләгәндә ошо турала онотмаһаҡ, киләсәк быуынға бар яуланған ҡаҙаныштарҙың әһәмиәтен аңлатып үҫтерһәк ине.




***Ҡадир МӘҒӘФҮРОВ, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор:*** Үткән быуаттың 90-сы йылдарында, әле халыҡ ҡуҙғалып, уяна ғына башлаған мәлдә "суверенитет" тигән һүҙ юҡ ине. Республикаға үҙаллылыҡ яулау "Аҡ тирмә" йәмғәт ойошмаһы эргәһендә Башҡортостанға "Союздаш" тигән статус биреүҙе талап иткән хәрәкәт булараҡ башланды. Ул ваҡытта республиканың киләсәге өсөн янып-көйгән энтузиастар һәм Зөфәр Йәнекәйев менән юридик документтар өҫтөндә эшләнек, сығыштар яһаныҡ. Республиканың төрлө райондары, ҡалаларында халыҡты йыйып, лекциялар һөйләп, ҡултамғалар йыйып йөрөнөк. Һөҙөмтәлә 140 мендән ашыу ҡултамға ҡуйылып, Мортаза Рәхимов өҫтәленә һалынды, артабан документтар әҙерләнеп, Башҡорт АССР-ы Юғары Советы аша үтеп, бойомға ашырылды халыҡ теләге. Беҙ СССР-ҙы һаҡлап, Грузия кеүек союздаш дәүләт булыуҙы күҙаллап эш башлағайныҡ ул саҡта, ләкин Борис Ельцин барыһына ла суверенитет өләшә башланы. Шулай ҙа быны да файҙаһы булды булыуға. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында республика үҙ байлығын, потенциалын үҙ файҙаһына ҡулланып, юлдар, газ үткәреп, яңы заводтар төҙөп ҡалды.

Башҡортостан суверенлы республика булып танылған йылдың йәй айҙарында Борис Ельцин Өфөгә килде. Ул заманда ла ҡыҙыу егеттәр бар ине, халыҡ үҙ һүҙен әйтеп, теләктәрен белдереп ҡалды. Уның был сәфәренең һөҙөмтәһе булды Башҡортостандың юл фондын булдырыу тураһындағы ҡарар. Быларҙы нимә өсөн һөйләйем: революцияны идеологтар һәм энтузиастар башлай, битһеҙҙәр ҡуллана. Эш үткәс кенә кеше күбәйеп китте, ә халыҡ мәнфәғәте өсөн янып йөрөгәндәрҙең береһе лә әллә ниндәй юғары вазифалар яуламаны, сөнки уның өсөн көрәшмәне бит улар. Ул замандағы әүҙем көрәшселәрҙең күбеһе юҡ инде хәҙер.

Бөгөн Республика көнөн байрам тип символик рәүештә генә үткәрәбеҙ. Башҡортостан Республикаһы ябай төбәк булмауын халыҡ онотмаһын өсөн билдәләргә кәрәк был датаны. Сөнки ул башҡорттарҙың быуаттар буйы көрәшеп килгән хыялын тормошҡа ашырыу юлындағы тағы бер аҙымы. Башҡорт халҡы борондан Рәсәй батшалығы алдында үҙенең үҙаллылығын көрәш, ҡан түгеү аша раҫлап килгән, һәм шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙе үҙ иле итеп күреп, сит ил баҫҡынсыларынан да һаҡлаған. Был донъяла булмаған феномен, беҙҙең халыҡ азатлыҡ өсөн, Рәсәйҙән айырылыу ниәтендә түгел, ә ошо илдә үҙаллы булыу маҡсатында көрәшкә сыҡҡан һәм һәр ваҡыт шул юлда торасаҡ та. Шуға, киләсәктә Башҡортостан Республикаһы көнө тип Рәсәйҙең бөтә төбәктәре суверенитет алған 11 октябрь көндө түгел, ә 1919 йылда Рәсәйҙә федератив дәүләт итеүгә нигеҙ һалынған көндө байрам итеп билдәләү маҡсатҡа ярашлы булыр ине, бәлки.

***Данир ҒӘЙНУЛЛИН, БР Күсемһеҙ мәҙәни милек объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми-производство үҙәге директоры:*** Башҡортостан Республикаһы көнөн билдәләгәндә һәр саҡ егерме биш йыл элек булған үҙгәрештәрҙе ҙур өмөт менән ҡабул итеүем иҫемә төшә. Сөнки ул ваҡытта мин, егерме йәшлек студент, Башҡорт йәштәре иттифағын ойоштороусыларҙың береһе инем. Йәштәр ойошмаһы булдырып, беҙ үҙаллылыҡ өсөн көрәштә әүҙем ҡатнаштыҡ. Меңәрләгән кешенән торған митингтар йыя инек. Ә суверенитет иғлан итер алдынан бер аҙна элек Ленин урамында Нефтселәр мәҙәниәт һарайы алдында тирмә ҡороп, бер төркөм йәштәр халыҡтан үҙаллылыҡ өсөн имзалар йыйыу ойошторҙоҡ, аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. Иттифаҡтың бөтә эшмәкәрлеге суверенитет алыу, үҙаллылыҡҡа ынтылыу ине. Беҙ, ул ваҡыттағы йәштәр, революцион ҡарашлы, радикаль хоҙлокло инек. Шуға күрә суверенитеттың республика халҡына иҡтисади үҙаллылыҡ килтеререн, милли мәҙәниәткә, белем биреүгә яңы киңлектәр асылырын аңланыҡ. Һөҙөмтәләр ысынлап та яҡшы булды: төҙәк юлдар, газ үткән матур ауылдар, йәмле ҡалалар, үҫешкән милли мәҙәниәт, мәғариф, милли матбуғат - былар бөтәһе лә бөгөн халҡыбыҙҙың ғорурланырлыҡ ҡаҙанышы. Ҡайһы берәүҙәр, суверенитет юлынан тайпылдыҡ, күп ҡаҙаныштарыбыҙҙан баш тарттыҡ, тип әйтер. Ләкин был йылдарҙа ҡан ҡойошһоҙ, тыныс юл менән иң ҙур уңыштарға ирешеүебеҙҙе барыбер тейешенсә баһаларға кәрәк. Үҙ илендең ҡәҙере, баһаһы сит өлкәләргә сығып йөрөһән, сағыштырһаң айырыуса асыҡ күренә. Беҙҙең республикабыҙ иҫ киткес матур, халыҡ сағыштырмаса, арыу йәшәй. Шуны күреп, мин һәр ваҡыт ҡыуанам һәм был байрамдың әһәмиәте тап ошондалыр, тип уйлайым.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Баш ҡалала 16 өйҙө һүтеү планлаштырыла. Был Салауат Юлаев проспектын төҙөүҙе дауам итеү өсөн кәрәк. Төҙөлөш 2019 йылда башланып, 2021 йылда тамамланырға тейеш. Программаға ярашлы, юл Жуков урамынан Сельская Богородская урамынаса һуҙыласаҡ. Һөҙөмтәлә Салауат Юлаев проспекты Өфөнән сығыуҙың төньяҡ өлөшөнә - Тимашево юлын аша сығыу районына тиклем дауам итәсәк. 2018 йылдың декабрендә иһә Тимашево юл сиселеше төҙөлөп бөтөргә тейеш.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә тәфтишселәр полицейскийҙар менән бергә 2015-2016 йылдарҙа республиканың баш ҡалаһында бәләкәй ҡыҙҙарға ҡарата боҙоҡ эштәр ҡылыуҙа ғәйепләнгән 46 йәшлек ирҙе тотҡан. Ул үҙенең йортонда ҡулға алынған. Ирҙең иҫәбендә туғыҙ балиғ булмаған ҡыҙға ҡаршы дүрт енәйәт эпизоды. Енәйәтсегә 2016 йылдың ноябрендә эҙләү иғлан ителгәйне. Уға Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 131-се статьяһына ярашлы енәйәт эше ҡуҙғатылған.

✓Башҡортостан агросәнәғәт комплексы объекттарын яңыртыу һәм төҙөү, шулай уҡ техника һәм ҡорамалдар һатып алыу өсөн 59 миллион һум аласаҡ. Документҡа ярашлы, ағымдағы йылда илдең 38 төбәгенә ошо маҡсатта федераль субсидиялар бирелә. Субсидияларҙың дөйөм күләме - 10,7 миллиард һум. Бынан тыш, ошо суммаға өҫтәп 2,25 миллиард һум бүленгән.

✓Өфөлә Рәсәйҙә 1917 йылғы революцияның 100 йыллығына арналған "1917 йылғы революция. Башҡортостан" темаһына Республика ғилми конференцияһы уҙасаҡ. Сара 23 октябрҙә Республика Хәрби Дан музейы базаһында үтә. Сарала ҡатнашырға 1917 йылғы революция проблемалары менән шөғөлләнеүсе музей белгестәре, ғалимдар һәм уҡытыусылар саҡырыла. Конференция эшендә ҡатнашыу өсөн доклад менән ҡатнашыусыларҙың ғаризаларын 2017 йылдың 10 октябренә тиклем электрон төрҙә museumforum@mail.ru адресына ебәрергә кәрәк.

✓Силәбелә "Уралым" телетапшырыуының юбилей кисәһе сиктәрендә "Бабич" башҡорт фильмының премьераһы үтте. Шул кис Пушкин исемендәге кинотеатрҙа Башҡортостандан сыҡҡан кешеләр һәм урындағы халыҡ йыйылды. Сентябрҙә "Бабич" фильмын Магнитогорскиҙа күрһәттеләр, октябрҙә картинаны Башҡортостан буйлап күрһәтеү дауам итә.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Республика халҡы "лингвистик акция"ға әүҙем ҡушылды. Күпселек тәкдимдәр башҡорт телен популярлаштырыуға ҡағыла, шул иҫәптән мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында.*



ҠЫҪҠАСА

# ҠАҘАҠТАР САҠЫРА...

✓**Астана ҡалаһы акимы Асет Исекешев Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялаловты 19-20 октябрҙә үтәсәк "Commercial Real Estate Central Asia - 2017" Үҙәк Азия форумына саҡырып**, унда урбанизация, хәҙерге мегаполистарҙың инвестицион ылыҡтырыуын күтәреү һәм үҫтереү мәсьәләләре буйынса почетлы спикер сифатында сығыш яһарға тәкдим иткән. "CRE Central Asia - 2017" - тәҙәләш һәм архитектура тармағы эксперттары араһында бәйләнештәр һәм хеҙмәттәшлек урынлаштырыу өсөн алдынғы диалог майҙансығы булып тора. Форумда Европаның 15 иленән, БДБ һәм Үҙәк Азия илдәренән эксперттар ҡатнашасаҡ.

✓**"Аэрофлот" авиакомпанияһының пассажирҙар ташыусы авиалайнерҙарының береһе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим исеме менән аталды.** Мостай Кәримдең исеме фюзеляждың алғы өлөшөнә яҙылды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылда республика автономияһының 100 йыллығы билдәләнә. Ошо уҡ йылда танылған Рәсәй һәм Башҡортостан классигы, яҙыусы, драматург һәм публицист Мостай Кәримдең быуат юбилейы билдәләнәсәк. Был ваҡиға буйынса тантаналар Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәй Федерацияһында ла киң билдәләнәсәк.

✓**Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы булышлығында Мәскәүҙәге өҙлөкһөҙ математик белем биреү үҙәге 2016-2017 уҡыу йылында юғары һөҙөмтәләр күрһәткән иң яҡшы 500 белем биреү ойошмаларының исемлеген әҙерләгән.** Башҡортостандағы 11 гимназия һәм лицей илдәге иң яҡшылар иҫәбенә ингән: Республика инженерлыҡ лицей-интернаты (Өфө); 1-се гимназия (Стәрлетамаҡ); 91-се гимназия (Өфө); 1-се лицей (Стәрлетамаҡ); 2-се гимназия (Октябрьский); 39-сы гимназия (Өфө); 64-се гимназия (Өфө); 2-се гимназия (Салауат); 3-сө гимназия (Октябрьский); М. Горький исемендәге 3-сө гимназия (Өфө); 1-се лицей (Нефтекама).

✓**Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Нуғай ҡасабаһындағы 147-се дөйөм белем биреү мәктәбенең яңы корпусының әҙерлек кимәлен тикшерҙе.** Бөгөн Нуғай ҡасабаһы баш ҡаланың әүҙем үҫешеүсе территорияһы булып тора һәм бында социаль инфраструктураны үҫтереү - муниципалитет алдында торған өҫтөнлөклө бурыстарҙың береһе. Яңы мәктәп 1250 уҡыусыға иҫәпләнгән. Әле төҙөлөштөң беренсе этабы тамамланыу алдында һәм быйыл мәктәп уҡыусыларҙы ҡабул итәсәк. Икенсе этапта футбол, волейбол, баскетбол майҙансыҡтары, гимнастика, башҡа спорт төрҙәре өсөн зоналар, йүгереү юлдары һәм теннис корты эшләнәсәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "ИМӘН ҠАЛА" ФОНДЫ...



**Сентябрь һуңында ҡала хакимиәтендә Мәҙәни мираҫты һәм архитектура һәйкәлдәрен һаҡлау буйынса йәмәғәт советының сираттағы ултырышында уның рәйесе - Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡаланың милли-мәҙәни һәм архитектура мираҫы объекттарын һаҡлау һәм тергеҙеүгә ярҙам итеү буйынса төҙөлгән "Имән ҡала" фондының етәкселәре - Күҙәтеү советы рәйесе Сергей Веремеенко һәм генераль директоры Илдус Әҙеһәмов менән таныштырҙы.**

Фондтың темаһынан уҡ уның төп эшмәкәрлек йүнәлеше күренә - ул Башҡортостандың баш ҡалаһының тарихи мираҫын һаҡлау.

- Бер нисә ай элек улар минең үтенесем буйынса ике дини объектты: тәү сиратта Комсомол урамындағы ҡорамды һәм "Әрләхим" мәсетен төҙөп бөтөрөү өсөн инвесторҙар эҙләү мәсьәләһенә ҡушылды. Бындай объекттар Һупайлы биҫтәһендә лә, ҡаланың үҙәк өлөшөндә лә бар. Уларҙы төҙөкләндереү өсөн инвестициялар кәрәк. Коллегаларым ошо маҡсаттан махсус "Имән ҡала" фондын булдырҙы. Беҙ Үҙәк Рәсәйҙә, республикала тиҫтәләрсә ҡорамдар төҙөгән һәм тергеҙгән Сергей Алексеевичтың ҙур тәжрибәһе ярап ҡалырына өмөтләнәбеҙ, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

Үҙ сиратында Сергей Веремеенко Фондтың тарихи мираҫты һаҡлау өлкәһендә күп яҡлы эш алып барыуҙы күҙаллауын билдәләне. Ул биналарҙы һәм ҡоролмаларҙы тергеҙеп кенә ҡалмаясаҡ, ә төрлө күргәҙмәләр ойошторасаҡ, йәштәр менән эшләйәсәк, йәш быуында үҙ ҡалаһының тарихына ҡыҙыҡһыныуҙы арттырасаҡ. Ирек Ялалов йәмғәтселек вәкилдәрен, крайҙы өйрәнеүселәр, тарихсыларҙы саҡырып, Фондтың исем туйын үткәрергә тәкдим итте. Әйткәндәй, Мәҙәни мираҫты һәм архитектура һәйкәлдәрен һаҡлау буйынса йәмәғәт советы 2012 йылдың сентябрендә Өфө ҡала хакимиәте ҡарары менән ойошторолә. Уның маҡсаты - тарих һәм мәҙәниәт, власть органдары, йәмәғәт берекмәләре һәм ойошмалары вәкилдәренең ошо өлкәләге ҡануниәтте тормошҡа ашырыу буйынса эшмәкәрлеген әүҙемләштереү.

# БАШҠОРТ БАЛЫН ТАНЫТАБЫҘ

APIMONDIA CANDIDATE 2021 RUSSIA/UFA

**2021 йылда 47-се "Апимондия" конгресын һәм "АпиЭКСПО" күргәҙмәһен уҙғарыу урыны итеп Өфө һайланды. Сараларҙы үткәреү илен 3 октябрҙә Истанбулда "Апимондия" халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһы конгресында тауыш биреү юлы менән билдәләнеләр.**

Рәсәйҙең ғаризаһы 30 сентябрҙә тәкдим ителде. Рәсәй менән таныштырыу сараһынан тыш, Истанбулда шулай уҡ Сербияның, Словенияның һәм Данияның ғаризалары ҡаралды. "Өфөнө конгресстың баш ҡалаһы сифатында һайлау законлы, - тип аңлатма бирҙе республика Башлығы. - Беҙҙәге кеүек башҡа бер ерҙә лә умартасылыҡҡа үҙ иғтибар бүленмәй. Ата-бабаларыбыҙҙың ҡырағай балды йыйыу - солоҡсолоҡ буйынса йолаларын һаҡлайбыҙ. "Башҡорт балы" тигән төшөнсә республикабыҙ өсөн ысын брендҡа һәм, һис шикһеҙ, юғары сифат билдәһенә әйләнде. Конгресты Рәсәйҙә уҙғарыу умартасылыҡ тармағын үҫтереүгә яңы көс бирер, белгестәребеҙҙең тәжрибәһен байытыр тип ышанам. Шул уҡ ваҡытта ул "башҡорт балы" брендын бөтә донъяға танытырға, продуктыбыҙ өсөн яңы һатыу баҙарҙарын асырға мөмкинлек бирәсәк. Шуны өҫтәгем килә: ғаризабыҙҙың еңеүе йәнә бер тапҡыр Башҡортостандың баш ҡалаһы статусын халыҡ-ара конгресс үҙәге сифатында раҫлай. Бында ҙур халыҡ-ара саралар уҙғарыу өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған. "Апимондия-2021" конгресының Рәсәйҙә иң юғары кимәлдә үтәсәгенә шикләнмәйем".

# ЗАМАНСА ХЕҘМӘТЛӘНДЕРЕҮ



**Өфөлә "Делимобиль" автомобилдәрҙе минутлап ҡуртымға алыу сервисы эшләй башланы. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов системаның эш үҙенсәлектәре һәм каршерингтың өҫтөнлөктәре менән танышты.**

Башланғыс этапта "Делимобиль" сервисында Hyundai Solaris маркалы 50 автомобилде файҙаланыу күҙаллана. 2018 йылға автомобилдәрҙең һанын 300 берәмеккә тиклем арттырыу планлаштырыла. Сервиста смартфон өсөн ҡушымта йәки интернет-браузер аша буш автомобилдәргә онлайн-заказ бирергә мөмкин. Автомобилдәр пункты тәүлек әйләнәһенә, көн һайын эшләй. Машинаны минутлап, сәғәтләп йәки көнләп ҡуртымға алырға була. Страховка һәм бензин ҡуртым хаҡына инә.

"Каршеринг Руссия" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры Леонид Сысоев һөйләүенсә, статистика буйынса, бер каршеринг автомобиле 10-ға яҡын шәхси машинаны алыштыра. Шул арҡала юлдарға әллә ни көсөргәнеш төшмәй һәм экологик хәл яҡшыра. Бынан тыш, ул шәхси автотранспортҡа сығымдарҙан ҡотолорға мөмкинлек бирә. Бындай машинала йөрөү хаҡы таксиға ҡарағанда уртаса 50 процентҡа арзанығаҡ.

- Хәҙер Өфөлә яңы заманса технологиялар ҡулланыла. Был Мәскәү, Петербург һәм Краснодар крайынан ҡала проект тормошҡа ашырылған дүртенсе биләмә. Ошо йәһәттән яңы заманса алдынғы технологиялар индереү күҙегенән беҙгә иғтибар йүнәлтеүҙәре ҡыуандыра, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Әгәр ошо проект әүҙем үҫешһә, ҡала урамдарында тығындар аҙыраҡ булыр, йәғни өс мең шәхси автомобилдең ҡала урамдарынан китеүе ихтимал. Һөҙөмтәлә хәрәкәт бер аҙ еңелләшәсәк.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН ӨЙРӘНӘЙЕК!



**Республикала башҡорт телен өйрәнеүгә ҡағылышлы тәкдимдәр ҡабул итеү дауам итә. Уларҙың һәммәһе лә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында туплана.**

Республика халҡы "лингвистик акция"ға әүҙем ҡушылды. Күпселек тәкдимдәр башҡорт телен популярлаштырыуға ҡағыла, шул иҫәптән мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында. Мәҫәлән, тәкдимдәрҙең береһе - кескәйҙәргә ҡыҙыҡлы булған популяр йәнһүрәттәрҙе башҡорт теленә тәржемәләү тураһында. Уҡырға өйрәнгән бәләкәстәр өсөн ике телдә (башҡортса һәм русса йәки башҡортса һәм инглизсә) үҫтереүсе китаптар сығарырға тәкдим итәләр. Улар республиканың күпселек магазиндарында һатыуҙа булырға тейеш. Башҡорт телендә аралашмаған уҡыусылар өсөн дәрестәрҙә "өлкәндәр" тормошо өсөн файҙалыраҡ итергә, мәҫәлән, уҡыусыларҙы аралашыу телмәре нигеҙҙәренә һәм башҡорт телендәге документтар менән эш итергә өйрәтергә тигән тәкдимдәр бар.

Бер юлы бер нисә автор үҙҙәренең хатында мәктәптә башҡорт теле дәрестәренә тыуған яҡты өйрәнеү элементтарын өҫтәргә: тәбиғәткә тәбиғәте, йәнлектәр донъяһы, тарихы һәм мәҙәни мираҫы хаҡында һөйләргә тәкдим итә. Шулай уҡ башҡорт телендә конкурстар уҙғарыу, өҫтәмә белем биреүҙә ойоштороу һәм хатта популяр lingualeo ресурсы кеүек телде онлайн-уҡытыу өсөн айырым мәғариф платформаһын булдырыу кәрәклеге хаҡында тәкдимдәр яңғырай. Идеяларҙы һәм тәкдимдәрҙе kurultay-ufa@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә мөмкин.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә билдәле ҡурайсылар "Ҡурай баттл" алышына сыға. Башҡарыу оҫталығында дүрт пар музыкант көс һынаша. Ишморат Илбәков - Рәсүл Ҡарабулатовҡа, Рушан Биктимеров - Илшат Ишморатовҡа, Морат Йәнәҙаҡов - Илнур Хәйруллинға, Илмир Ҡоҙабаев Марсель Сәйетовҡа ҡаршы сығыш яһай. Алышты Өфө эстрада театры ойоштора. Ҡурайсыларҙың көҙгө баттлы 27 октябрҙә Конгресс-холда үтә.

✓Йыл һайын Эстонияла Эстония халыҡтары көнө һәм Хәтер көнө билдәләнә. Быйыл байрам саралары 17 сентябрҙән алып 30-ына тиклем Балтик буйы иленең бер юлы бер нисә ҡалаһында үтте. Быйылғы сарала Башҡортостандан ҡунаҡтар - Виктор Хәкимов һәм шағирә Лариса Абдуллина ҡатнашты.

✓Республика көнө айҡанлы 8, 9 һәм 10 октябрҙә баш ҡала райондарында ауыл хужалығы йәрминкәләре ойошторола. Йәрминкәлә ауыл халҡы емеш-еләк, йәшелсә, бал һәм башҡа продукция тәкдим итә. Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов һүҙҙәренсә, был көндәрҙә йәрминкәгә республика районданрынан 400-450 машинаның килеүе көтөлә.

✓Өфөнөң М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы уҡыусылары Башҡортостан Республикаһы көнөнә ҡарата патриотик клип төшөргән. Дүрт минутлыҡ клипҡа Өфөнөң төп иҫтәлекле урындары һәм баш ҡалабыҙҙың күркәм күренештәре ингән. Уҡыусылар ошо байрамдың берҙәмлек, тыныслыҡ һәм татыулыҡ билдәһе икәнлеген күрһәтеү өсөн клипта ҡурай моңдарын һәм өс йырҙы файҙаланған.

✓26-29 сентябрҙә Башҡортостан биләмәһендә Дәүләт автоинспекцияһы "Мотоцикл" иҫкәртеү операцияһын уҙғарҙы. Ведомство мәғлүмәте буйынса, ошо ваҡыт эсендә 957 берәмек мототранспорт тикшерелгән. Билдәләнгән тәртиптә теркәлмәгән 42 мотоцикл асыҡланған. Ошо категория водителдәре 507 Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу осрағына юл ҡуйған. Дүрт осраҡта мотоциклсылар иҫерек булған. 39 водитель тейешле таныҡлығы булмаған килеш ике тәгәрмәсле транспортҡа идара иткәне өсөн тотолған. 29 мотоцикл махсус туҡталҡаға ҡуйылған.

✔ *Уның эсендә һалма амфитеатр һәм сәхнә эшләү проектлаған. Амфитеатр өс йөҙләгән тамашасыны һыйҙырыр, тип көтөлә. Ирек Ялалов был эшкә Өфөнөң миллиардерҙарын йәлеп итеү идеяһын да инҡар итмәй.*



...ГӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨБӨҘҘӨҢ ЯҢЫ ЙӨҘӨ...

## яңыса буласаҡ

**Өфө Мәскәү конструкторҙары проекты буйынса төҙөкләндерелә. Эйе, тап шулай: август аҙаҡтарында баш ҡаланың "Ҡашҡаҙан" ял паркын комплекслы төҙөкләндереү эштәре башланған да инде. Концепцияның авторы - Мәскәүҙең "Стрелка" конструкторҙар бюроһы. Был хаҡта кесаҙна ошо бюроның директоры Далиә Сафиуллина менән берлектә үткәргән матбуғат кәңәшмәһендә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов хәбәр итте.**



Ҡала етәкселеге был юлы беҙҙе ниндәй яңылыҡтар менән таң ҡалдырыр икән, тиген ҡомарлы эске тулҡынланыу менән ҡараштарыбыҙ телмәр тотоусыларға "ҡаҙаҡланды". Әйтергә кәрәк, түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар һаны гәҙәттәгенән күпкә артығыраҡ ине. Хатта ки, Ирек Ишмөхәмәт улы тирәһендә урын алған бер нисә урынбаҫарын да таныны бөн фәкирегеҙ. Улар төп спикерға кәрәк ерҙә урынлы мәғлүмәттәр биреп, әңгәмәне тағы ла йөкмәткелерәк итте. Хәйер, Ирек Ялаловтың компетентлығы төрлө кимәлдәге ҡайһы бер етәкселәргә өлгө итеп ҡуйырлыҡ икәнен уның сығыштарын күреп йөрөгән һәр кем белә торғандыр. Бөгөн дә етәксе ҡәләм осона алырлыҡ төплө фекерҙәрен яуҙырҙы.

Баш ҡала башлығы, һәр ваҡыттағыса, иң тәүҙә Өфө халҡының һәм ҡунаҡтарҙың әүҙем ялын ойоштороу өлкәһендә һуңғы бер нисә йылда атҡарылған һәм атҡарылып ятҡан күләмле эштәргә байҡау яһаны. "Һуңғы 6 йыл эсендә ҡалала 28 ял зонаһы яңыртылды, 19 урында яңылары төҙөлдө", - тине баш ҡала менеджеры. Һуңғы проекттар, тигәндә Ирек Ишмөхәмәт улы З.Биишева исемендәге скверҙы, Революция урамындағы аллеяны, М.Ғафури исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркын, Инорс биҫтәһендә төҙөлөп ятҡан скверҙы, Якутов исемендәге парк менән "Ҡашҡаҙан" паркын һәм башҡа объекттарҙы атаны. Уларҙы тәрбиәләү һәм йүнәтеп тороуға киткән сығымдарҙы иҫәпкә алмағанда, 47 ял урының әлеге хәләнә килтереүгә 2 миллиард һум аҡса киткәнлеген дә белдерҙе Ирек Ишмөхәмәт улы.

Ошо урында бәйәнде әҙәп торайыҡ. Бөтә был эштәр беҙҙең гәзиттә даими яҡтыртылып барғанға күрә, "үгеҙҙе мөгөҙөнән алып", төп темаға - кәңәшмәнең үҙәк өлөшөнә күсәйек, булмаһа. Билдәле булыуынса, "Ҡашҡаҙан" паркын төҙөкләндереүгә Федераль бюджеттан 80 миллион һум самаһы аҡса бүленгән. Ирек Ишмөхәмәт улы әйтеүенсә, ҡала өсөн үҙәк ял зонаһы иҫәпләнмәгән локаль парктарҙы төҙөкләндереү тарихында был аҡса, бәҡтиһән, быҫаса күҙәтелмәгән хәл, заманса әйткәндә, нонсенс икән. Беҙҙә айырыуса ғәжәпләндергәне шул булды: "Ҡашҡаҙан" паркын төҙөкләндереү өсөн властар парк эргәһендәге шәхси йорттарҙы (ә улар күп кенә) күсереү тураһында етди һүҙ алып бара. Паркты 2025 йылға тиклем төҙөкләндереп бөтөргә иҫәп тота белгестәр. Моғайын, үҙ эштәрен яҡшы беләләрҙер, тиергә ҡала. Ни тиһәң дә, кешенең шәхси милке, шәхси ҡыҙыҡһыныуҙары менән күҙмә-күҙ осрашып эшләнәсәк бит был эш. Ҙур проектты тормошҡа ашырған саҡта тағы ла ҙурыраҡ проект булып торған ныҡлы ғаилә нигеҙҙәрен ҡаҡшатырлыҡ булмаһын инде был эш, тиген теләк һәм кемдә барҙыр. Ныҡлы ғаилә - ил нигеҙе бит. Хәйер, был эш ойошҡан рәүештә һәм закон сиктәрендә йәрып сығылыр, тип өмөтләнәйек, алдан саң ҡаҡмай торайыҡ.

"Ҡашҡаҙан"ға кире ҡайтҡанда... "Стрелка" конструкторҙар бюроһы белгестәре уның эсендә һалма амфитеатр һәм сәхнә эшләүҙе проектлаған. Амфитеатр өс йөҙләгән тамашасыны һыйҙырыр, тип көтөлә. Ирек Ялалов был эшкә Өфөнөң миллиардерҙарын йәлеп итеү идеяһын да инҡар итмәй. Киреһенсә, был йүнәлеште үстереү яғында. "Астанала булһағыҙ, күргәнһегеҙҙер, ундағы монументаль әйберҙәрҙең - скульптураларҙың, һәйкәлдәрҙең күпселеге шәхси кешеләр, меценаттар ярҙамы менән ҡуйолған. Беҙҙең ҡаланың да шундай бер нисә меценаты өлгө булырлыҡ, әлегә башҡаларҙы ла йәлеп итеү буйынса эшләйбеҙ", - тине сити-менеджер. Ул шулай уҡ Өфөнөң Якутов исемендәге паркын төҙөкләндереүҙә ҡулланған яңы ысул - бергәләп төҙөү тураһында ла әйтеп үтте. Эште ойоштороуҙың яңы моделе булып һанала алырлыҡ күренеш - ҙур проектты бәләкәй-бәләкәй өлөштәргә бүлеп, ҡаланың эре предприятиелары ярҙамында тормошҡа ашырыу файҙаһы, Якутов паркында алынған тәжрибәне артабан файҙаланыу зарурлығы тураһында ла аңлайышлы итеп әйтелде. Якутов паркының бер өлөшөн - бер, икенсе өлөшөн - икенсе, өсөнсө, дүртенсе предприятие үҙ көсө менән тергеҙгән икән.

Мәскәү белгесе Далиә Сафиуллина проект халыҡтың теләк-талаптарынан сығып тормошҡа ашырыласағы тураһында белдерҙе, башҡа мәлдәргә лә туҡталды. Әйтәйек, бюро ҡаланың иҫтәлекле урындарында төшөрөлгән, социаль селтәрҙәргә һалынған фотоларға анализ яһап, халыҡтың иң яратҡан урындарын күрһәткән карта булдырған икән. Бер ыңғайҙан, "Ҡашҡаҙан" паркын да өйрәнгән. Һөҙөмтәлә, бюро паркта халыҡ бик уҡ йөрөмәгән, "потенциалы асылмаған" урындарҙы төҙөкләндереп, уларға яңы һулыш өрөп ебәреү йүнәлешендә эш башлаған. Айырым иғтибар быуаны матурлауға йүнәлтелгән.

Ирек Ишмөхәмәт улы мәскәүҙәр менән хеҙмәттәшлектең әһәмиәтле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды, "Стрелка" конструктор бюроһының яңыса ҡарашлы булыуына, эште яҡшы ойоштора белеүенә һоҡланыуын йәшермәне һәм: "Беҙ ҙә үҙебеҙҙең ошондай шәп проектлаусыларыбыҙҙы тәрбиәләп, үстереү йүнәлешендә эшләйбеҙ", - тип, Өфөлә даими үткәрелә килгән "Урбан-байрам" һымаҡ майҙансыҡтар тураһында һөйләне.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һеҙгә Өфөнөң бөгөнгө йөҙө оҡшаймы? Һеҙ уны ниндәйерәк итеп күрергә теләр инегеҙ? Үҙегеҙҙең теләктәрегеҙҙе беҙгә яҙған хаттарығыҙҙа белдерһәгеҙ ине.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

БАШ ҠАЛАМ



# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**Ҡала хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеүҙең 27 йыллығына арналған сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү тураһында" ҡарар ҡабул ителде һәм Өфөлә үтәсәк саралар планы раҫланды.**

Республика көнөн байрам итеү концепцияһы рәсми, мәҙәни-тамаша, спорт, киң күләм сараларҙы, шулай уҡ яңы төҙөлгән социаль объекттар менән танышыуҙы үҙ эсенә ала. Бөгөнгә байрам саралары үтәсәк барлыҡ майҙандар, парктар һәм скверҙар әҙер. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, 9 октябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында республика һәм ҡала етәкселеге ҡатнашлығында тантаналы ултырыш буласаҡ. Сәхнәлә "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле, ижади коллективтар сығыш яһаясаҡ. Мәҙәниәт һарайы фойеһында "Халыҡ йолаларының тере шишмәләре" декоратив-ҡулланма сәнғәтенең күргәҙмә-конкурсы ойоштороласаҡ.

Республика көнөнә бағышланған республика тантаналы ултырышы 10 октябрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында үтәсәк.

6 октябрҙә "Башкирия" үҙәгенең Lifestyle майҙанында "Йәштәр - республика йөрәге!" тип аталған фестиваль планлаштырылған. Сарала ҡатнашыусылар спорт уйындарында һәм конкурстарҙа, бейеү флешмобында, шулай уҡ вакансиялар йәрминкәһендә ҡатнашасаҡ

30 сентябрҙән 14 октябрғә тиклем уҡыусылар араһында спорт туризмы буйынса Өфө ҡалаһы беренселеге, сыңғысылар араһында роллерҙар һәм еңел атлетика кросы буйынса Өфө беренселеге һәм Чемпионаты, Олимпия спорт төрө булған тхэквондо буйынса Өфө беренселеге һәм Чемпионаты бара.

Байрам саралары шулай уҡ Өфө районларының майҙандарында ла гөрләйәсәк. 5 октябрҙә - Октябрь, 6-һында - Калинин һәм Киров, 9-һында - Орджоникидзе, Ленин, Совет, 10-нда Дим районларында производство алдынғылары бүләкләнәсәк.Тантаналы ултырыштарҙан тыш, 11 октябрҙә һәр районда мәҙәни саралар ойоштороласаҡ. 7 октябрҙә Совет районында Октябрь проспектындағы 1-се һәм 3-сө йорт араһында урынлашҡан "Өфө саҡрымы" скверы асыласаҡ

Баш ҡаланың дөйөм белем биреү ойошмаларында 3-10 октябрҙә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеүҙең 27 йыллығына арналған аҙналыҡтар үтә. Уның сиктәрендә класс сәғәттәре, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт символдары буйынса, туған телдәрҙә инша яҙыу буйынса конкурстар ойоштороласаҡ. Уларҙа 100 меңдән ашыу уҡыусы ҡатнаша.Шулай уҡ Республика көнө алдынан яңы белем биреү усаҡтарын: Киров районында 160-сы мәктәпте, Дим районында 161-се лицейҙы асыу планлаштырыла. 26 октябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында балалар ижадының "Дуҫлыҡ сәскәһе" фестивале үтәсәк. Ул халыҡ ижадының иң яҡшы өлгөләре менән танышыу мөмкинлеген бирәсәк.

Наилә ЗАҺИТОВА.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бысҡы вағы

❖ Бысҡы вағы ҡый түгел, дауа ул. Арҡа (умыртҡалыҡ) ауыртһа, һағыҙ, сайыр еҫе сығып торған бысҡы вағына ҡайнап торған һыу ҡойорға, һауытында бер аҙ торорға, һыуын түгергә. Ҡалған эҫе һыуҙа бешкән "бутка"ны ҡайһы ерегеҙ ауырта, шунда ҡуйығыҙ һәм марля менән бәйләгеҙ. Йылы юрған ябынып ятығыҙ, шул килеш йоҡларға ла була.

## Юғары ҡан баҫымы

❖ Дарыуханала һатылған төнәтмәләрҙең күбеһенә спирт ҡушылған була. Эсмәүселәргә спирт насар тәьҫир итә. Ә был рецептар спиртһыҙ эшләнә. Гөлйемеш һәм әнәлек (боярышник) емештәрен, бесәй үләненең тамырын, үгәй инә япраҡтарын, шыршы еләген, арыҫлан ҡойроғо үләнен 1-әр ҡалаҡ алып, ваҡларға, 1 балғалаҡ үлән ҡатнашмаһын термосҡа һалырға ла, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙгәс, 1 стакан һыу өҫтәргә. Төнәтмәне көнөнә 3 мәртәбә, ашарҙан 40 минут алда 1/3 стакан эсергә.

❖ Ҡара миләш, ҡара ҡарағат, сәскәле кесерткәнде, борос бөтнөгө япраҡтарын, балан сәскәләрен 1-әр ҡалаҡ алып, бергә болғатырға. Тәүгеһе кеүек миҡдарҙа 2 сәғәт термоста төнәтергә. Һөҙгәс, 1 стакан ҡайнаған һыу өҫтәргә, көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 40 минут алда 1/3 стакан эсергә.

## Сөйәл

❖ Үксәгә, ус төбөнә, аяҡ табандарына, терһәктә тире мөгөҙ һымаҡ булып ҡалыная, ауырта, унайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Ундай урындарҙы 20 минут самаһы ҡайнар һабын күбегендә тоторға кәрәк, сөйәл йомшара, аҙ генә ҡуба, тире бер аҙ кипкәс, йә крем, йә аҡ май һөртергә кәрәк. Был ярҙам итмәһә, үләндәр менән дауалап ҡарарға кәрәк.

❖Бешкән ҡайнар һуғандан йәки йәшел һуған ҡыяғын төйөп, бутка яһап, сөйәлгә һаларға. Таҙа тире зарарланмаһын өсөн уны бәйләп ҡуйырға кәрәк. Бер нисә сәғәттән аяҡты ҡайнар һыуға тығып, сөйәлде бик һаҡ ҡына ҡисҡеләп алырға. Был дауа сөйәл бөткәнсе эшләргә.

❖ Сөйәлгә помидор иҙмәһен дә һөртәләр. Помидор аяҡ бармаҡтары араһындағы бәшмәкте лә бөтөрә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Йәҫриб илселәре

Мөхәммәт бәйғәмбәр менән Йәҫриб мәжүсиҙәренең тәүге осрашыуы 620 йылда Мәккә янында уҙғарылған йәрминкәлә үтә.

Әйтергә кәрәк, Мөхәммәт бәйғәмбәр бындай йәрминкәләргә йөрөргә яратмай, халыҡ менән осрашыу өсөн генә бындай саралар ҙа ҡатнашырға мәжбүр була. Йәрминкәгә барған һайын йәне көйөп ҡайта унын. Сөнки бындай йәрминкәләрҙә гонаһ ҡылыуҙың ос төрө лә киң ҡолас йәйә.

Беренсенән, ҡыҙыл байраҡ ҡуйылған тирмәләрҙә шарап һатыла. Был тирмәләр янында кешеләр эсә, йырлаша, аҙаҡ бындай күңел асыу йыш ҡына күмәкләп һуғышыу менән тамамлана. Ҡайһы бер көтөүселәр бер нисә көн дауам иткән бындай йәрминкәләрҙә барлыҡ малын ғына түгел, ир ғорурлығы булып торған ҡоралын да һатып эсә. Ғаиләләре иһә ирҙәрҙең былай күңел асыуы арҡаһында йыл буйына ас ҡала, байтаҡ ғаиләләр ғүмерлек фәҡирлеккә дусар була. Бай эскеселәр иһә бындай тирмәләр менән "көрәшергә" ярата. Улар дуҫтарын алып килә лә, тирмәләге шарапты тотошлай эсеп бөтөрөп, ҡыҙыл байраҡты алдыртып ҡуя. Шуны ысын ирлек һанайҙар. Һатыусылар иһә бындай йола барлығына ҡыуана, ундайҙарҙы дәртләндерә һәм сәмләндерә.

Икенсенән, отошло уйындар киң таралған була. Бындай уйындар әлеге лә баяғы көтөүселәрҙе отоуға ҡорола, ул заман шулерҙары ла үҙ һөнәренә ижади ҡарай һәм эштәрен оһолло башҡара.

Өсөнсөнән, фәхишәлек киң таралған була. Үҙҙәрен тәрбиәләп, йәштән үк матурлыҡтарын һаҡлаған фәхишәләр өҫтәүенә белемле лә була. Үҙ һөнәрҙәренә кәрәкле бар нәмәне лә камил үҙләштерергә тырыша улар - байтаҡ шиғырҙарҙы яттан белә, матур итеп йырлау һәм бейеү оҫталығына эйә була, мажаралы ваҡиғаларҙы ла, һуңғы яңылыҡтарҙы ла оҫта итеп һөйләй ала. Шуның менән сүллектә көн күреүсе ябыҡ, ҡояшҡа янып-көйөп бөткән, уҡый-яҙа белмәгән ҡатын-ҡыҙҙарҙан ҡырҡа айырылып торалар. Шуға ла ҡайһы бер аҙғын ирҙәр улар менән күңел асыу өсөн аҡсаһының байтаҡ өлөшөн сарыф итеүҙән тартынмай.

Ошондай гонаһтар ҡылып, кешелек сифаттарын юғалтыуға юл ҡуйыусы мәжүсиҙәргә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең асыуы ҡабарғандан-ҡабара. Көндәлек ләззәт арҡаһында иртәгәһен онотҡан халыҡтың киләсәге юҡлығын аңлай ул. Сөнки ундайҙарҙы иманға килтереү генә түгел, башҡа төрлө юғары маҡсат менән дә берләштерергә булмай...

Ошондай йәрминкәләрҙең береһендә, 620 йылда, Мөхәммәт бәйғәмбәр Йәҫрибтән килгән алты илсе менән осраша. Һөйләшеү барышында Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡыҫҡа ғына вәғәзендә Ислам диненең асылын аңлата, һорауҙарға яуап бирә. Ырыу-ара һуғыштан тамам йонсоған илселәрҙе мосолмандарҙың бер өммәткә берләшеү идеяһы бигерәк тә ҡыҙыҡһындыра. Бер Алла, бер дин, бөтөнөһө өсөн дә бер Ҡанун, тип өйрәтә Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Илселәргә Ислам тәғлимәте бик көслө тәьҫир яһай. Улар, Йәҫрибкә ҡайтыу менән, ырыуҙаштарын Ислам динен ҡабул итергә һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе мөмкин тиклем тиҙерәк үҙҙәренә ала һалырға кәрәклеген төшөндөрә башлай.

Киләһе йыл Йәҫрибтән Мөхәммәт бәйғәмбәр янына ун ике кешенән торған илселәр килә. Улар үҙҙәренең Ислам динен ҡабул итергә әҙер булыуҙарын белдерә һәм рәсми рәүештә, аҡһаҡалдар һәм ырыу башлыҡтары исеменән, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе һәм уның өммәтен үҙҙәренә йәшәргә саҡыра.

**(Дауамы бар).**

*ТУҒАН ТЕЛЕМ*

**Гәзитебеҙ биттәрендә туған телебеҙгә ҡағылышлы мәҡәләләрҙе уҡырға яратам. Республикабыҙ райондарындағы һәр төрлө һөйләшкә - диалекттарға иғтибар итеп, үҙебеҙҙең яҡтың һөйләше менән сағыштырыуҙар минең телемде байытыуға ла ярҙам итәләр, тип уйлайым.**

# ХӘЛӘЛ ЕФЕТ - ИПТӘШМЕ?



Шулай ҙа ҡайһы саҡ телебеҙгә бер аҙ ятыраҡ һүҙҙәр ҙә килеп ингеләгән һымаҡ. Бер ағайҙың бер таныш ҡатын менән һөйләшеүенә иғтибар иттем. Ҡатын үҙенең хәләл ефетен "иптәшем", тип атағас, был ағай: "Ул һинә нишләп иптәш булһын, "ирем" тип әйтһәң ни була?" - тигән иҫкәртеү яһаны. Ағайҙың уйынлы-ысынлы әйткәненән мәҙәк табып, көлөп кенә ҡуйып, оноторға ла булыр ине, тик бына ошо һүҙҙәрҙә туған телебеҙгә ҡағылышлы мөһим генә бер мәғәнә ятҡан һымаҡ тойолдо. Никахта торған иштәрҙең береһен икенсеһе "иптәш" тиеүен электән үк күп мәртәбәләр ишетеп йөрөгән булһам да, бығаса әллә ни иғтибар итмәгәнмен икән. Ысынлап та, был һүҙ "товарищ" тигәнде аңлата түгелме?..

Сирек быуат хеҙмәт иткән дәүерҙә үҙем дә ул һүҙҙе меңәрләгән тапҡыр ҡулланғанмындыр. "Иптәш полковник", "иптәш капитан", "иптәш сержант"... тип көнөнә генә әллә нисә тапҡырҙар мөрәжәғәт итергә тура килә ине бит инде. Элекке бер революцион фильмда "товарищ Надя", тип, берәүҙең үҙенең ҡатынына өндәшкәнен ишеткәс, ирмәк кенә тойолғайны. Күрәһең, ул ваҡытта был һүҙ модала булғандыр һәм беҙҙең телебеҙгә лә шул мәлдәрәк килеп ингәндер. Ул ғына ла түгел, әҙәби телебеҙгә лә әйләнгән, ахырыһы. Башҡортса-русса һүҙлектә был һүҙ мәғәнәләренең береһе "супруг, супруга", тип тәржемә ителгән. Берәүҙең ҡатыны, йәиһә ире хаҡында һөйләгәндә, "уның тормош иптәше", тигән һүҙ бәйләнешен дә йыш ҡулланабыҙ. Коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексында "Кеше - кешегә дуҫ, иптәш һәм туған", тип яҙылғанын хәтерләйем. Фекерҙе шундайыраҡ йүнәлештә тағатып алып, уйлай башлаһаң, ысынлап та, кеше үҙенең хәләл ефете менән дуҫтарса, иптәштәрсә, йә иһә туғандарса, ғөмүмән, татыу мөнәсәбәттә генә лә булырға тейеш. Тик, шуға ла ҡарамаҫтан, башта әйткәндәй, ҡатынынды "иптәш" тип атау барыбер килешеп етмәгән һымаҡ (минең шәхси фекерем). Үҙеңдең хәләл ефетең хаҡында һүҙ барғанда башҡорт телендә унан башҡа ла атамалар күп, әлхәмдүлиллаһ. Мәҫәлән, күп кенә кешеләр бер-береһен Әлмира, Гөлмира, Фәүзиә, Таһир, Йосоп, тип исеме менән атай. Ә кемдер үҙенең ҡатынын хатта ҡартайып киткәндән һуң да "минең кәләш" тип кенә алып йөрөй. Үҙенә генә өндәшкән саҡта (кәйефкә ҡарап) "һөйкләм", "бәғрем", "йөрәгем", "алтыным", тип әйтеү ҙә насар түгелдер.

Элегерәк яҙылған китаптарҙағы хикәйәләргә иғтибар итһәң, унда ирҙәр үҙҙәренең һөйкләһөнә "бисәкәй" тип тә мөрәжәғәт итә. Тик, нишләптер, хәҙерге ҡатындар былай өндәшеүҙе әллә ни өнәп етмәй. Минең хәләл ефетем дә йәш саҡта ана шулай тип өндәшһәң, "Был һүҙ әллә нисек яңғырай бит. "Бисә", тигәс тә, илле-алтмыш йәштәр самаһындағы, "мөлкөп" йөрөгән йыуантағыраҡ ҡатынды күҙ алдына килтерәм", тигәйне. Йәнәһе лә, был мөрәжәғәт йәш ҡатындарға килешеп етмәй. Бындай фекер, әлбиттә, дөрөҫлөккә тап килмәй. Беҙҙең тирәлә (Баймаҡ районында) был һүҙҙе, "фәлән кешенең бисәһе", тип, башлыса, икенсе бер сит ҡатын хаҡында һөйләшкәндә ҡулланыуҙары сәбәпле, шулай тойолғандыр уға. Күп кенә башҡа райондарҙа ошо термин ир кешенең үҙенең хәләл ефетенә ғәҙәттәге мөрәжәғәт итеү һүҙе булып тора бит. Ә оло йәштәгеләрҙең (айырыуса, Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил, Хәйбулла тирәләрендә) хәләл ефетен "әбейем", тип атағанын беләм.

Элегерәк, беҙ бала саҡта, ауылыбыҙҙа йәшәгән ҡарт ҡына бер инәй үҙен "әбей", тип әйткәндәре менән килешмәй: "Нишләп мин әбей булайым, бисә тип атағыҙ", - тип төҙәткән имеш кешеләрҙе. Бәғзе бер районда "әбей" атамаһы менән өләсәләренә, ә кемдәрҙер ҡәйнәләренә өндәшә. Мәҫәлән, ҡайны-ҡәйнәләре Стәрлетамаҡ яғынан булған ҡустым хәләл ефетенең ата-әсәһен "бабай", "әбей" тип атай. Баштан уҡ уға шулай тип өндәшергә ҡушҡандар икән. Ә киленебеҙ беҙҙең атайәсәйебеҙгә "ҡайным" һәм "ҡәйнәм" ти торғайны.

Минең атайым һәм әсәйемә килгәндә инде, ул мәрхүмдәрҙең бер ваҡытта ла бер-береһенә исеме менән өндәшкәнен ишеткәнем булманы. Әйтелгән һүҙҙәрҙең фәҡәт үҙенә генә йүнәлтелгән икенсеһе шунда уҡ аңлай. Күп кеше араһында булһалар ҙа, "Һин кемгә әйтәһең ул?" тип һорашмай торғайнылар. Ә инде береһе хаҡында башҡаларға ниҙер һөйләгәндә "балаларҙың атаһы, әсәһе", тип әйтерҙәр ине. Ейәнсура районында йәшәгән беҙҙең ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бер-береһенә "атаһы", "әсәһе", тип өндәшә торғайны. Хәләл ефетеңә ҡарата бына ошондай рәүештәге мөрәжәғәт шәриғәт ҡанундарына ла тап килә. Ислам диненә булған боронғо ата-бабаларыбыҙҙың һәр тарафта шәриғәт буйынса йәшәргә тырышҡаны һиҙелә. Тик һуңғы быуат дәүерендә генә телебеҙҙең күп кенә ҡиммәттәре үҙгәргеләп киткән икән шул. "Атаһы", йә "әсәһе", тип өндәшеүҙә, минеңсә, балалар һәм башҡалар алдында берберендең абруйын күтәреүгә лә ниндәйҙер кимәлдә сәбәпсе, ярҙамсы булып торалыр. Бер-береңә хөрмәт менән мөрәжәғәт иткән һымағыраҡ яңғырай бит был һүҙҙәр. Юғарыла иҫкә алып киткән Ғариф һәм Әнзинә исемле ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарымдың шулай тип һөйләшеүҙәрен тәү мәртәбә ишеткәс менән "Былар ифрат та татыу йәшәйҙер, моғайын", тигән тәьҫир ҡалғайны. Ысынлап та шулай булып сыҡты. Ҡоҙабыҙ баҡыйлыҡҡа күскәнсе, ҡырҡ йылдар самаһы улар, иңгә-ин терәп, пар күгәрсендәр һымаҡ, башҡаларға үрнәк булып ғүмер иттеләр. Ана шул боронғо "атаһы", "әсәһе", тигән матур яңғырашлы, гүзәл һүҙҙәребеҙҙең милләттәштеребеҙҙең теленән төшөп ҡалыуын бер ҙә генә теләмәйем. Үҙемдән башларға уйланым. Ошо мәҡәләне яҙа башлаған мәлдән, "әсәһе", тип, хәләл ефетемдең мәҙәһына тейәм. Күңелгә ятып торған был һүҙҙе телемде артабан үҫтереүҙең бер бәләкәй генә өлөшө итеп тоям.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *1914 йылда полицияның эҙәрлекләүенән ҡасып, Швейцарияға сығып китә. Эмиграцияла ул большевиктар лидеры Ленин менән таныша. 1917 йылда Башҡортостанға ҡайтып, Башҡорт мәркәз шураһын (советы) етәкләй.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ТӘҮГЕ ЮҒАРЫ БЕЛЕМЛЕ БАШҠОРТТАР



**Башҡорттарҙың юғары белемгә эйә була башлау тарихы XIX быуаттың урталарына ҡайтып ҡала. Быға тиклем башҡорттар Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусында хәрби белем алһа (унда, ғәҙәттә, кантон башлыҡтарының балалары уҡыған), 1836 йылдан Рәсәйҙең дәүләт Советы ҡарары менән башҡорт үҫмерҙәрен Ҡаҙан гимназияһына һәм университетына уҡырға ебәрә башлайҙар.**

Улар тәүҙә гимназияны тамамлап, артабан уҡыуын Ҡаҙан университетында дауам итергә тейеш була. Был маҡсатта гимназия һәм университетта башҡорттар өсөн 20 урын (квота) бирелгән. Ҡаҙан ҡалаһының 1-се гимназияһында 1836-1844 йылдарҙа 20-шәр, 1845 йылда - 13 кеше, 1846 йылда - 12, 1847 йылда - 14, 1848 йылда - 15, 1849 йылда - 17, 1850 йылда 18 башҡорт һәм мишәр балаһы уҡыған. 1870-1871 йылдарҙа гимназияла башҡорттарҙан 7 малай белем алған. Был уҡыусыларҙың ҡайһы берҙәрен төрлө сәбәптәр арҡаһында Башҡортостанға кире ҡайтарып, уларҙың урынына икенселәрен ебәргәндәр. Ҡаҙан гимназияһына шулай уҡ Ырымбур хәрби училищеһынан (кадет корпусы) һәләтле балаларҙы ебәргәндәр.

Тыуған еренән алыҫта уҡыған, ауылдан килгән был үҫмерҙәр ҡала шарттарына бик ауыр күнеккән. Башҡорт ғәскәре командующийы улар тураһында 1845 йылда: "Ата-әсәләренең теләге менән гимназияға ебәрелгән малайҙар туғандарынан һәм тыуған иленән оҙаҡ йылдарға айырылғас, тәрән ҡайғы кисерәләр, йыш ҡына илайҙар, үҙ өйҙәренә, тыуған яҡтарына ҡайтарыуҙы үтенеп һорайҙар", - тип яҙған. Әммә ошо һынауҙы үтеп сыға алған башҡорт үҫмерҙәре артабан Ҡаҙан университетында юғары белем алыу маҡсатына ирешкән. Уларҙы, ғәҙәттә, университеттың медицина факультетына уҡырға инергә әҙерләгәндәр. 1843 йылда университетҡа гимназия тамамлаған - 1 башҡорт егете, 1844 йылда - 7, 1845 йылда - 8, 1846 йылда - 6, 1847 йылда - 15, 1848 йылда - 9, 1849 йылда - 3, 1850 йылда - 2 башҡорт егете уҡырға ингән.

Ҡаҙан университетына абитуриенттарҙы гимназия ғына әҙерләмәгән. Был уҡыу йортона Ырымбур хәрби училищеһын тамамлаусылар ҙа туп-тура килеп инә алған. Мәҫәлән, 1832 йылда уҡ әле буласаҡ билдәле мәғрифәтсе Сәлихйән Күкләшев (1836 йылда университетты тамамлай), 1834 йылда Хәлит Шәрипов, Бикарыҫлан Собханғолов, 1840 йылда Садиҡ Ниғмәтуллин, 1843 йылда Сәйфулла Тоҡомбәтов университетҡа хәрби училищенан һуң инәләр. Шуларҙан Күкләшев һәм Тоҡомбәтовтан башҡалары табип һөнәренә уҡығандар.

Ҡаҙан университетының медицина факультетын тамамлаған башҡорттар араһынан медицина фәне өлкәһендә юғары кимәлгә өлгәшкән кешеләр ҙә була. Шуларҙың береһе - Әхмәтйән Әбделғәлләм улы Әбдиев медицина докторы дәрәжәһенә ирешкән. Ул 1-се Ҡаҙан гимназияһынан университеттың медицина факультетына уҡырға инеп, 1856 йылдың 10 ноябрендә уны уңышлы тамамлай. 1858 йылға тиклем ул Башҡорт ғәскәрендә табип булып хеҙмәт итә. Медицина өлкәһендә белемен камиллаштырыу өсөн Санкт-Петербургтың Медицина-хирургия академияһына уҡырға инә. 1862 йылдың майында имтихандар тапшырып һәм диссертация яҡлап, ул медицина докторы тигән ғилми дәрәжәгә лайыҡ була. Ырымбурға ҡайтҡас, Әбдиев Башҡорт ғәскәренең 4-се участка дауаханаһында хәрби доктор итеп тәғәйенләнә. Шулай итеп, Әхмәтйән Әбдиев - башҡорттарҙан медицина фәндәре докторы ғилми дәрәжәһенә өлгәшкән тәүге кеше була.

Башҡорттар Ҡаҙан университетында медицина йүнәлешендә генә белем алмай, әлбиттә. Башҡа факультеттарҙа ла уҡыйҙар. Мәҫәлән, Сәлихйән Күкләшев, Сәйфулла Тоҡомбәтов, Әлмөхәмәт Ҡыуатов, Шаһиәхмәт Әбелхәйеров, Мөхәмәт Мәҡсүтов философия факультетының Көнсығыш телдәр бүлеген, Заһретдин Носратдинов, Зариф Сыртланов, Шаһисолтан Шаһиәхмәтов юридик факультетты тамамлағандар. Шулар араһынан С. Күкләшев университетты тамамлағас, Ырымбур хәрби училищеһында көнсығыш телдәр уҡытыусыһы булып эшләй, мәғрифәтсе булып танына. Кантон башлығы Әлмөхәмәт Ҡыуатов, тел ғилеме буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай, шулай уҡ башҡорттар араһында мәғарифты үҫтереүгә көс һала, донъяуи мәктәптәр асыуға булышлыҡ итә. Сәйфулла Тоҡомбәтов университеттан һуң ғәрәп-фарсы телдәре буйынса кандидат ғилми дәрәжәһенә эйә була. Шулай уҡ Минзәлә өйәҙенән бер башҡорт студенты Шаһисолтан Шаһихәмәтов Ҡаҙан университетының юридик факультетын яҡшы тамамлау арҡаһында кандидат дәрәжәһенә диссертация яҙыу мөмкинлеген алған.

XIX быуатта башҡорт ҡыҙҙары ла һирәкләп юғары белемгә өлгәшкән булған. 1858 йылда хөкүмәт тарафынан башҡорт ҡыҙҙарын медицинаға уҡытыу башланған. Бының өсөн Санкт-Петербургтағы акушерлыҡ институты эргәһендә кендекселәр (кендек инәһе) бүленә Башҡорт ғәскәре аҡсаһы иҫәбенә ҡыҙҙар өсөн 10 урын бирелгән. Был урынға урыҫ телен белгән башҡорт ҡыҙҙары ебәрелгән. Институтта уҡыуҙан тыш, улар Калинкин дауаханаһында тәжрибә үткәндәр. Был ҡыҙҙар, 5 йыл уҡып, акушер-кендексе һөнәрен алғас, Башҡорт ғәскәре ҡарамағындағы дауаханаларға эшкә ҡайтарылғандар. 1864 йылда 6 дауаханала Бөрө, Верхнеурал, Өфө, Ырымбур, Силәбе өйәҙҙәрендә башҡорттарҙан 10 табип, уларҙың 7 ярҙамсыһы, 6 ветеринария табибы, 84 фельдшер менән бер рәттән, ҡатын-ҡыҙҙарҙан 8 башҡорт акушеры эшләгән.

XX быуат башында башҡорттарҙан юғары хәрби белем алыуға өлгәшкән кешеләр ҙә була. Башҡорт дворяны, 1-се Рәсәй Думаһы депутаты Шаһихәйҙәр Сыртлановтың улы Рауил Сыртланов 1905 йылда Санкт-Петербургтағы батша армияһының Генераль штабының академияһын тамамлай. Уға генерал дәрәжәһе бирелә. Ул Беренсе донъя һуғышында батырҙарса һәләк була.

Ә инде 1917 йылда Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт ойошҡас, юғары белемле башҡорт зыялылары ошо хәрәкәттең авангардын тәшкил иткән. Башҡорт хөкүмәте ойошторолғас, улар хөкүмәттә етәксе урындарҙы биләй һәм башҡорт халҡының киләсәге өсөн фиҙәкәр хеҙмәт итә.

Башҡорт милли хәрәкәте лидерҙарының береһе Шәриф Манатов 1910 йылда Санкт-Петербургтың Бехтерев институтының тарих-филология факультетына уҡырға инә, бында ул сәйәси-революцион эшмәкәрлек менән шөғөлләнә. 1914 йылда полицияның эҙәрлекләүенән ҡасып, Швейцарияға сығып китә. Эмиграцияла ул революционерҙар менән аралаша, большевиктар лидеры Ленин менән таныша. 1917 йылда Башҡортостанға ҡайтып, Башҡорт мәркәз шураһын (советы) етәкләй. Шураның составына Ҡаҙан университетының юридик факультетын тамамлаған, мировой судья Юныс Бикбов, медицина факультетын тамамлаған Ғүмәр Ҡыуатов (артабан ул республиканың һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары була, хәҙер Республика клиник дауаханаһы (РКБ) уның исемен йөрөтә) һәм уның ҡустыһы медицина факультетының 4-се курс студенты Усман Ҡыуатов һайлана. 1917 йылдың 15 ноябрендә ул етәкләгән шура Башҡортостан автономияһын иғлан итә.

1917 йылдың ноябрендә Рәсәйҙең ойоштороу йыйылышына (Учредительное собрание) Ырымбур губернаһы башҡорттарынан кандидаттар тәҡдим ителә. Уларҙың бөтәһе лә юғары белемле зыялылар була. Мәҫәлән, унда Шәриф Манатов, Юныс Бикбов, Усман Ҡыуатовтарҙан тыш, билдәле башҡорт ғалимы, мәғрифәтсеһе Ризаитдин Фәхретдиновтың улы, Ҡаҙан университетының агрономия факультетын тамамлаған Ғәбделәхәт Фәхретдинов, юридик факультетта белем алған офицер Ғабдулла Иҙелбаевтар була.

1917 йылдың декабрендә 3-сө Башҡорт ҡоролтайында тәүге Башҡорт хөкүмәтенең рәйесе итеп юғары белемле юрист Юныс Бикбов һайлана, хөкүмәттең юридик (юстиция) бүлеген башҡорт дворяны, юғары белемле адвокат Искәндәрбәк Солтанов (Ҡаҙан университетының юридик факультетын тамамлаған) етәкләй. 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте рәйесе итеп Ҡаҙан университетының медицина факультетын тамамлаған табип, бер үк ваҡытта мәғрифәтсе Мөхәмәтхан Ҡулаев һайлана. 1919 йылдың мартында уның етәкселегендәге башҡорт делегацияһы Мәскәүҙә совет власы менән Башҡортостан автономияһы тураһында килешеү төҙөй. Бына шулай итеп, юғары белемле башҡорт зыялылары мәғарифты үҫтереүҙә, милли дәүләтселек яулауҙа ҙур өлөш индерә.

**Сығанаҡ:** Ә. Әсфәндийәров. Олатайҙарҙың бар тарихы. Өфө, 1996 йыл, Ярмуллин А.Ш. Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында. Өфө, 2009 йыл.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Таҙлар

Таҙлар ҡәбиләһе хаҡындағы тарихи мәғлүмәтте яңы быуатҡа тиклем үк осратып була. Мәҫәлән, "Таҙбаш" ҡушаматы алған Буртас (б.э.т. 683-633 й.й.) 50 йыл хакимлыҡ иткән. Буртас яу алдынан барлыҡ бейҙәргә, баш һалыу билгеһе итеп, баштарын ҡырырға ҡушҡан. Уның династияһы хакимлыҡ иткән осор ҙа "Таҙбаш дәүере" тип аталған. Таҙлар ҡәбиләһе атамаһы ла шул дәүерҙән килә.

Таҙлар табындар ырыу-ҡәбиләһе берләшмәһенә ҡараған. Л.П. Потапов тастарҙың телеуттар менән этник туғанлығы хаҡында әйткән

Был мәғлүмәттәр таҙларҙың уғыр-самаҙый ҡәбиләләре менән этник бәйләнештәре барлығы хаҡында һөйләй.

Боронғо уғырҙар араһында "таҙлар"ҙың килеп сығыуы был ҡәбиләләрҙең тимер ҡырынғыс яһарға әүәҫ булыуҙарын да аңлата. Ғәҙәттә, ғалимдар боронғо башҡорт ырыуҙарын күсмә тормош менән йәшәүсе, мәғдәнселек, тимер эшкәртеү, солоҡсолоҡ, һөнәрселек, мәҙәни социум, этник ижад һ.б. менән шөғөлләнмәгән ҡәбиләләр итеп күрергә теләй. Бындай шөғөлдәр ултыраҡ тормош менән йәшәүсе халыҡтарға хас. Башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының ултыраҡ тормош менән йәшәүе хаҡында мәғлүмәттәр етерлек.

Таҙлар Урал алдына ҙур һәм бәләкәй төркөмдәр менән килеп башҡорттарҙың бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, табын һ.б. ҡәбиләләренә ҡушылған.

## Әйләләр

Мырҙалар ырыуы риүәйәттәрендә һәм легендаларында әйләләргә ҡыпсаҡтар, төркиләшкән монголдар ҡушылыу ихтималлығы хаҡында бәйән ителә. Әйләләрҙең, табындарҙың этнографик үҙенсәлеге уларҙың монгол тибындағы тирмәләре, ситән һәм саман өйҙәре булыуына, ҡашмауҙарының һәм хәситәләренең булмауына бәйле, тип яҙа С.И. Руденко. Авторҙың фекеренә ярашы, VII-VIII быуаттарҙа, хатта унан алдараҡ та Башҡорт иленең көньяҡ-көнбайышында башҡорт ырыуҙары составында һарттар, әйләләр түбәләре һәм Урал аръяғы ҡатайҙары күренә башлай.

Әйләләр һәм мырҙалар тәүҙә көньяҡ Уралға, Әй, Ағиҙел, Яйыҡ, Уй, Миәс буйҙарын төйәк итә. Әбйәлил районында Әйҙегән тигән тау бар, тәүге әйләләр шунда төпләнә. Һуңынан улар Миәс һәм Әй йылғалары буйына китә. Унда һарт әйләләре һәм мырҙалар йәшәгән. Атаҡлы Ҡол Ғәли (XII-XIII б.б.) әйле башҡортарының вәкиле. Ошо уҡ тамырҙан билдәле башҡорт шағиры һәм ғалимы Тажитдин Ялсығол әл Башҡорди сыҡҡан.

Әйләләр ете ырыуҙан торған: әйле, көҙөй, мырҙалар, һыҙғы, дыуан, ҡошсо, өпәй. Әй ырыуы үҙе ете ырыуға бүленә: тырнаҡлы, ҡаратаулы, төркмән, һарт-әйле. Көҙөйҙәр шайтан-көҙөйгә, төркмән-көҙөйгә, урман-көҙөйгә, ҡыр-көҙөйгә, бүләкәй-көҙөйгә бүленә. 1247-1318 йылдарҙа йәшәгән Рәшит әт-дин уғыҙҙарҙың боронғо төҙөлөшөн өйрәнгән, унда әйләләр яраз, төкән, дөргөн, йәйерле ырыуҙарынан торған. Ҡәбилә Уғыҙ исемле кеше исеменән алынған. Уларҙың "ярымай" тамғаһы шулай уҡ боронғо уғыҙҙарға ҡарай.

Әйле ырыуынан сыҡҡан Ризаитдин Фәхретдинов ғәрәп, төрөк, фарсы һәм урыҫ телдәрен белгән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Нимәгә күңел кителә? Ҡаланың тап башҡорт халҡының баш ҡалаһы булыуын күрһәтер урындар аҙ. Ул беҙҙең милли төйәк булыуын ҡыҫҡырып торорға тейеш тә бит...*



**"Өфө башҡорто" рубрикаһының сираттағы ҡунағы - музыка белгесе, журналист, педагог, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Миләүшә Абрар ҡыҙы ИҘРИСОВА. Ул баш ҡалала тыуып үҫеп, ғүмере буйы уның рухи ҡиммәттәренә хеҙмәт итә. Атаһы, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, композитор Абрар Хаҡ улы Ғабдрахмановтың, әсәһе - Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев ордены кавалеры Нажия Аллаярованың аманатын дауам иттереүсе урта быуын вәкилдәренең береһе ул.**

# МИЛЛИ ҮҘӘҢ

## туған тел һәм моң



**▸ Миләүшә Абрар ҡыҙы, һеҙҙең ғаиләлә "Өфө башҡорто" быуыны кемдән башланды?**

- Минән. Атайым менән әсәйем сығыштары менән Учалы районының Наурыз һәм Яңы Байрамғол ауылдарынан. Баш ҡалабыҙҙа ғаилә ҡороп, төпләнгәс, йәш ғаиләнең тәүге емеше булып мин донъяға килгәнмен.

Атайым менән әсәйем студенттар булып, береһе Өфөлә, икенсеһе Мәскәүҙә юғары белем алған саҡта, мин ете йәшемә тиклем олатай-өләсәй һәм атай-әсәй араларында йөрөнөм. Күберәген ауылда булдым. Шуға ла асылым тас ауылса минең - олатай-өләсәй тәрбиәһе. Ә бит ул заманда ҙур ҡалала башҡортлоҡто һаҡлап алып ҡалыу бик ауыр булған. Рухлы, моңло, аҡыллы, изге күңелле олатайым менән өләсәйем ҡарамағында тәрбиәләнеүем, әлбиттә, минең өсөн бәхет булған инде ул...

Беренсе класҡа Өфө ҡыҙы булып, уҡырға барҙым. Башта 91-се мәктәптең башҡорт класына йөрөттөләр. Унан Телеүҙәк янындағы 35-се мәктәпкә рус класына күсерҙеләр. Ә мин, бығаса тик башҡортса ғына һөйләшкән бала, рус телен белмәйем тиерлек... Ауыл байманлығына өйрәнгән бала булараҡ, "Ауылға ҡайтҡым килә, минең өйөм унда", тип илап та ала инем. Үҙемде ете ят мөхиттә хис иттем мин ул заманда, ҡыйын була торғайны. Торараҡ имтихан тотоп, махсус музыка мәктәбенә (колледжға) уҡырға индем.

**▸ Бала саҡта ҡаланың ниндәй урындарында уйнай, йөрөй инегеҙ?**

- Салауат һәйкәле янында йыш була инек. Һәйкәл тирәләй ул заманда иҫке ағас өйҙәр күп ине, ихаталары тулы - алма баҡсалары. Беҙ, бер өйөр бала-саға, шул баҡсаларға төшөп, алма урлап, шул шуҡлығыбыҙҙан ҡыҙыҡ табып, таулы-түбәнле сабышып йөрөр булдыҡ. Һәйкәлдең аҫ яғындағы таштарҙа һикерешәбеҙ. Хәтеремдә, әхирәтем Лена шундағы таштарҙы "Был беҙҙең һарай таштары, ошонда өйөбөҙ ултырҙы" тип күрһәтә торғайны. Йылға, яр буйҙары ла - беҙҙең яратҡан урындар. Архирейка тип аталды шул яр буйындағы йорт-бараҡтар. Иҫ киткес матур урында урынлашҡан ине улар. Муйыл, сирень, алмалыҡтар араһында ғына. Шундай бер иҫке генә бараҡтың беренсе ҡатында әсәйемдең ағаһы ғаиләһе менән көн итте. Мин ике туған апайым менән уйнарға барам. Йорт торған ярҙың аҫтында ғына Ағиҙел йәйрәп ағып ята! Эй, күңелле, ҡабатланмаҫ мәлдәр!..

**▸ Ҡалала "тыуған йортом" тип әйткәндәй йортоғоҙ бармы?**

- Бар! Ҡалабыҙҙың Ленин урамындағы икенсе һанлы йорто ул. Өфөлә 1938 йылда Сталин архитектураһында төҙөлгән иң беренсе бейек ҡатлы йорт. Уны "Дом специалистов" тип атайҙар әле лә. Күренекле шәхестәр йәшәгән унда - яҙыусылар, артистар, композиторҙар. 1961 йылда атайым менән әсәйемә шул йорттоң бишенсе ҡатындағы коммуналканан туғыҙ метрлыҡ ҡына бер бүлмә бирәләр. Шунда 7 йыл, мин мәктәпкә төшкәнсе йәшәнек. Йорттоң ихатаһы ла башҡа йорттарҙыҡына оҡшамаған: дүрткел. Дүрт яғынан да йорт менән кәртәләнгән һәм уртала балалар майҙансығы, матур фонтаны бар ине. Хәҙер инде ул фонтандың һөлдәһе генә ҡалған. Бик матур, үтә лә күркәм йорт булды. Бына шул йортто "тыуған йортом" тип иҫәпләйем. Мин бит һаман да уның еҫен дә хәтерләйем!

Аҙаҡ башҡа йортҡа күстек. Әммә тап шул йорт гел үҙенә тартып торҙо, тормошҡа сығып, ғаиләм булғас та, шунда ҡайтҡым килеп, шул уҡ подъезда фатир һатып алдыҡ. Балалар үҫкәнсе, һиҙҙ йыл йәшәнек унда...

**▸ Атай-әсәйегеҙ ҡаланың, республиканың күренекле кешеләре. Уларҙың аралашып йәшәгән ғаилә дуҫтарын хәтерләйһегеҙме? Шул аралашыу, ҡатнашыу мөхите ниндәйҙер тәрбиәүи төшөнсәләргә нигеҙ була алдымы икән, нисек уйлайһығыҙ?**

- Беҙгә бик күп кеше килә ине. Эш буйынса ла, ҡунаҡҡа ла, кәңәшкә лә. Ҡумәк булып йыйылып китәләр, һөйләшәләр, бәхәсләшәләр, ижад менән шөғөлләнәләр ине. Легендар шәхесебеҙ Заһир Исмәғилевтарҙың ғаиләһе менән бик тығыҙ аралашыу булды. Заһир Ғариф улы менән Мәхсүфә Хәсән ҡыҙы беҙҙә йыш ҡына Йоматауҙағы дачаларына алып ҡайтҡаны хәтеремә уйылған. Мәхсүфә апай мәрхүмәнең телде йоторлоҡ ваҡ бәлештәренең таты әле лә тел осонда ғына кеүек. Тағы ла яҙыусы, журналист Рәүеф ағай Насировтың, һуғыш ветераны, хәрби осоусы Муса Ғайса улы Билаловтың ғаиләләре менән бер туғандар кеүек булдыҡ. Ижадташ дуҫтары Яҡуп Ҡолмой, Рафаэль Сафин, Абдулхаҡ Игебаевтар, музыка белгесе Фәрит Камаев, скрипкасы Михаил Швайштейн, пианист Елизавета Крылова, әсәйемдең әхирәттәре Ғәлиә Солтанова, Йыһания Рәхмәтуллина, Флүрә Ноғоманова, уҡытыусыһы Миләүшә Мортазина... Һанай башлаһаң, улар шул тиклем күп. Һәм һәр береһе - күренекле шәхес! Бына шундай шәхестәр менән осрашыуҙар, аралашыуҙар бала күңелендә эҙ ҡалдырмай буламы һуң!

**▸ Һеҙ атайығыҙ Абрар Ғабдрахмановтың юлын дауам иттереүсе лә. Унан ниндәй һабаҡтар алып ҡалдығыҙ?**

- Атайым оҙаҡ йылдар Башҡортостан радиоһында эшләне һәм радио тыңлау беҙҙең тормоштоң айырылғыһыҙ бер өлөшө булды. Иртәнсәк тә, төшкө ашҡа ҡайтҡанда ла, ял көндәрендә лә ул радионы ҡолағынан ысҡындырмай, тыңлап, фекерләп, анализлап йөрөй. Үҙем башта телевидениела, унан радиола эшләй башлағас, бына ошо мөхиттең, ошо һабаҡтарҙың күңелемә һеңдерелеүенә һөйөнөп бөтә алманым. Сөнки минең өсөн бында барыһы ла таныш, яҡын ине. Бөтөн музыкаль тәьҫораттар, сәнғәт әҫәрҙәре, әҙәби мираҫ мейегә һеңә барған.

Теҙә китһәң, атайымдан, әсәйемдән өйрәнгән, отҡан, мираҫ итеп алған аң-белем, тәжрибә-кәңәш етерлек ул. Йомғаҡлап әйткәндә, миңә улар иң мөһиме - милли рух тойғоһон һеңдерә килгән. Телевидение, радио, матбуғат өлкәһендә эшләгән, ижад иткән башҡорт белгестәренең бурысын ошо позицияларҙы ныҡ тотоп, милләт өсөн хеҙмәт итеүҙә күрәм.

**▸ Бөгөн ҡалала һеҙ күреп үҫкән мәҙәни мөхит бармы, һаҡланғанмы?**

- Һәр замандың үҙ заңы бит инде. Ваҡыт уҙыу менән кешеләр ҙә үҙгәрә, ҡала мөхите лә. Элекке мөхиттә лә ыңғай күренештәре лә, киреләре лә булған кеүек үк, әлеге мәлдә лә, ҡыуандырғаны ла, көйөндөргәне лә етерлек. Атай-әсәйҙәребеҙгә, ауылдан килеп, Өфөнө "яулауы" анһаттан булмаған, әлбиттә. Ләкин уларҙа йәшлек дәрте, ижад хыялы, "яҡты киләсәккә" инаныу көслө булған. Унан килеп, совет заманында бит милли сәнғәткә, әҙәбиәткә ҡараш бит етди була, уларҙы үҫтереүгә ил етәкселеге тарафынан күп көс һалына. Башҡорт композиторҙары алдында профессиональ музыка сәнғәтен төҙөү маҡсаты ҡуйыла! Тимәк, йәш ижадсыларға бөтөн юлдар ҙа асыҡ: тик эшлә генә! Һәҙәмтәлә, улар быуыны беҙҙең милләт тарихын, ҡала тарихын, ил тарихын яҙған. Ә беҙ улар аманатын киләһе быуындарға тапшырыуға бар көсөбөҙҙө һалырға тейешбеҙ.

**▸ Әлеге ҡала тормошонда, күренешендә, йәшәйешендә һеҙгә нимәләр оҡшай һәм оҡшамай?**

- Тормош алға бара, ҡалалағы үҙгәрештәр һәм яңылыҡтар артынан эйәреп өлгөрөп тә булмай. Һөйөндөргәндәре лә, көйөндөргәндәре лә бар, әлбиттә. Нимәгә күңел кителә? Ҡаланың тап башҡорт халҡының баш ҡалаһы булыуын күрһәтер урындар аҙ. Ул беҙҙең милли төйәк булыуын ҡыҫҡырып торорға тейеш тә бит... Мәҫәлән, Ҡаҙағстандың ҡалалары улар ҡаҙаҡ донъяһы икәнлеген әллә ҡайҙан һөйләп тора. Беҙҙә ниндәйҙер дөйөмләштереү, барыһына ла ҡулайлы булыу яғын ҡайырыу тойола. Сит ил яҙыуҙары, көнсығыш стилен алырға тырышыу күҙгә ташлана.

Бына, Әхмәтзәки Вәлиди урамындағы бейек йорттар өҫтөндәге башҡорт орнаменттары ниндәй колоритлы! Шундай биҙәк үҙәк урамдарҙың барыһында ла булһын ине ул. Ленин урамын ҡар бөртөктәре менән биҙәгәнсе, үҙебеҙҙең биҙәктәр торһа, Ә.-З.Вәлиди исемендәге Милли китапхана ҡаршыһындағы аллеяны милли эпос геройҙары, йәки үҙебеҙҙең данлыҡлы шәхестәребеҙҙең һәйкәлдәре, кистәрен янып-балҡып торған ҡурай фонарҙары, тирмә формаһындағы биналар биҙәһә, ҡалай отошло булыр ине. Республикабыҙға килгән ҡунаҡтар бит тәү сиратта баш ҡалабыҙҙың үҙәк урамдарын байҡай. Уларҙы халҡыбыҙҙың асылын күрһәтерҙәй архитектуралы биналар, һәйкәлдәр ҡаршылаһа, милли көйҙәр, ҡурай яңғырап торһа, ни тиклем онотолмаҫ тәьҫораттар алып ҡайтыр ине улар. Баш ҡалабыҙҙың ҡабатланмаҫ йөҙө булырға тейештер бит! Быларҙың барыһын да, теләк булғанда, эшләп була.

Шөкөр, "Ете ҡыҙ" фонтаны, Салауат Юлаев һәйкәле, "Ватан" майҙаны кеүек урындар бар, әммә улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ә бит ҡала ҙур! Черниковка, Дим, Һупайлы биҫтәләре кеүек микрорайондарҙа башҡорт ҡалаһы икәнлектең әҫәре лә юҡ...

Шатландырғаны шул: мин бәләкәй саҡта ҡала урамдарында башҡортса һөйләште бик һирәк ишетә инек. Яҙайоҙа ишетеп ҡалһаҡ: "Был ҡайһы төпкөл райондан килде икән", - тиғән уй тыуа торғайны. Нисектер, күптәр туған телендә аралашырға тартына ине шикелле. Хәҙер урамдарҙаололар ҙа, йәштәр ҙә рәхәтләнеп, тартынмайынса башҡортса әңгәмәләшә, бер-береһенә мөрәжәғәт итә. Ә шулай

*✓ Әйткәндәй, башҡорт фольклорына, композиторҙар ижадын өйрәнеүгә арналған диплом эштәре, диссертациялар яҙыуға ла ҡараш бик һүлпән беҙҙә. Шундай бай музыкаль мираҫыбыҙ булып та, уны ҡәҙерләй, һаҡлай белмәйбеҙ.*



# ҺӘМ РУХ...

## менән инә балаға

ҙа урамда минә берәйһе туған телдә һүҙ ҡушһа йәки нимәлер һораһа, әле һаман аптырап-ҡыуанып китәм...

**Һеҙҙең ғаиләлә тәрбиәләнгән Өфө башҡорттары кемдәр улар?**

- Ғаиләбеҙҙә өс ҡыҙ үҫтерҙек. Оло ҡыҙыбыҙ Айгөл ғаиләһе менән Мәскәү ҡалаһында йәшәй, Марсель кейәүебеҙ, ейәндәребеҙ менән Мәскәү башҡорттарын тәшкил итә улар бөгөн. Айгөл беҙҙең сәнғәт институтын тамамланы, музыка белгесе, олатаһының ижадына арналған китап-монография сығарҙы. Ейәндәребеҙ Ибраһим менән Алтынай Мәскәүҙәге "Алтын ай" башҡорт фольклор төркөмөндә шөғөлләнә, бәләкәс кенә булып бейеп, шиғырҙар ятлап йөрөйҙәр.

Уртансы ҡыҙыбыҙ Диләрә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры йырсыһы, Халыҡ-ара бәйгеләр еңеүсеһе, "Онегин" һәм "Алтын битлек" Рәсәй театр премиялары лауреаты. Әлеге мәлдә ул бик мауығып, бар көсөн һалып ижад итә. Австрияла урынлашҡан опера агентлығы уны үҙенең эксклюзив солисткаһы итеп ҡабул итте, һәм ул һуңғы йылдарҙа, беҙҙең театрҙа эшләү менән бер рәттән, шул агентлыҡ менән дә тығыҙ хеҙмәт итә. Әйткәндәй, сит илдәрҙә сығыш яһағанда Диләрә концерт программаларына йыш ҡына башҡорт халыҡ йырҙарын индерә. Һәм ҡыуандырғаны шул: ҡайҙа ла беҙҙең моңдо халыҡ хайран ҡалып ҡабул итә, ихлаҫлап алҡышлай.

Кинйә ҡыҙыбыҙ Асия Санкт-Петербург консерваторияһында скрипкаға уҡый, өсөнсө курс студенты. Консерваторияның уҡыу программаһы, әлбиттә, классик музыка өлгөләренә нигеҙләнә. Ә шулай ҙа Асия яҡташтары менән осрашыуға ла ваҡыт таба, Петербургтың "Аманат" исемле башҡорт студенттары ойошмаһының әүҙем ағзаһы. "Аманат"тың йыйылыштарында Асия скрипкала башҡорт халыҡ көйҙәрен уйнап, йырлап, концерттарҙа ҡатнаша килә, шуның менән сикһеҙ ғорурлана... Халыҡ әйтмешләй, атанан күргән уҡ юнған, инәнән күргән тун бескән...

**Уҙған быуаттың 70-80-се йылдарында ҙур ҡалала башҡортлоҡто һаҡлап ҡалыу бик ауыр булды, тинегеҙ. Бөгөн ҡала ерлегендә ошо милли аманатты һаҡлауҙың ниндәй юлдарын күрәһегеҙ?**

- Уның юлы бер генә - ғаиләлә башҡортса һөйләшеү, башҡортса йәшәү. Балаларым менән русса һөйләшеп китһәм, атайым: "Һин дә башҡортса һөйләшмәһәң, уларға бер кем дә туған телен өйрәтмәйәсәк", - тип һәр ваҡыт иҫкәртеп торҙо. Беҙҙә башҡорт мөхите йәшәй: туған телдә һөйләшеү-аралашыу, ҡунаҡ килһә - башҡортса һыйлау, балаларҙың башҡортса концерттарын ойоштороу ғәҙәткә ингән. Хәҙер ейәндәрҙе лә шул матур тәртиптә тәрбиәләргә килә. Балаға бит милли үҙаң, рух туған тел һәм моң менән инә. Был рухи байлыҡты башҡа бер ниндәй белем дә йәки өйрәтеү ҙә алмаштыра алмай. Үҙ теленә, туған мәҙәниәтенә битараф ата-әсә үҙ балаларын ошо хазинанан үҙ теләге менән мәхрүм итә, уларҙы рухи фәҡирлеккә дусар итә, манҡорт яһай. Һөҙөмтәлә ул балалар ни рус, ни башҡорт түгел...

**Һеҙ - музыка белгесе. Халыҡ моңдары тураһында бер генә фекер әйтегеҙ әле?**

- Беҙҙең халыҡ көйҙәренең үҙенсәлеген бала саҡтан күңеленә һеңдереп үҫкән кеше генә тоя ала. Нота билдәләренә һыймай беҙҙең моң, сөнки Европа мәҙәниәте ҡанундары, нота системаһы, ғөмүмән, беҙҙең традицион сәнғәткә ят нәмә. Башҡорттоң оҙон көйө - ул юғары сәнғәт, һәм бик ҡатмарлы сәнғәт. Хатта бик-бик оҫта итеп эшкәртеп, нотаға һалынған оҙон көйҙө лә, эстән тоймаһа, йырсыға башҡарыу ауыр. Өйрәнеп-ятлап ҡына йәнһеҙ итеп башҡарыусыларҙан йырҙарыбыҙҙы йәлләйем, сөнки көйҙөң аһәңе, моңо юҡҡа сыға... Ә ошо аһәң, моңдо бары тик телдән-телгә тапшырып була. Мине шатландырғаны шул: балаларым башҡорт моңон тойоп, аңлап үҫтеләр.

Диляраны оло сәхнәләргә сығарыусы ла - оҙон көйҙәребеҙ булды. Халыҡ-ара академик вокал конкурстарында, сит илдәрҙә күп тапҡыр еңеү яулаһа ла, үҙе әйтеүенсә, еңеүҙәренең иң ҡәҙерлеһе - "Ирәндек моңдары" башҡорт халыҡ йырҙары конкурсында яуланған Гран-при. Ҡала ҡыҙының шундай абруйлы бәйгелә еңеп сығыуы, миненсә, үҙе үк күпте һөйләй. Әйткәндәй, ул "Алтын битлек" премияһын алған тәүге башҡорт йырсыһы ла!

Үҙемә килгәндә, бынан 3 йыл элек сәнғәт фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһенә диссертация яҡланым. Хеҙмәтемдең темаһы - беренсе быуын башҡорт композиторҙары, милли музыка сәнғәтенә юл ярыусылар - Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Хәбибулла Ибраһимов, Камил Рәхимов, Мәсәлим Вәлиев, Таһир Кәримовтарҙың ижады. Уларҙың әҫәрҙәрен электән радионан тыңлап үҫтем. Ләкин улар хаҡында бик аҙ белеүебеҙ гел эсте бошора торғайны. Бигерәк тә телевидениела эшләй башлағас, был композиторҙар хаҡында монографияларҙың, уҡыу әсбаптарының наҡыҫлығы айырыуса күҙгә ташланды. Ә бит уларҙың тормошо, ижады - беҙҙең байлығыбыҙ! Башта беренсе профессиональ башҡорт йырсыһы, композиторы, музыка белгесе, йәмәғәт эшмәкәре Ғ. Әлмөхәмәтовтың тормошо һәм ижад юлы хаҡында китап яҙҙым. Тик был ғына, әлбиттә, аҙ булып күренде. Ҡулымдан килгәнсә ошо бушлыҡты тултырыу, ошо оло талант эйәләренең фиҙакәр хеҙмәтенә тейешенсә баһа биреү ниәте менән диссертацияға тотондом. Унда башҡорт профессиональ музыка сәнғәтенең аяҡҡа баҫыуын, беренсе композиторҙарҙың эстетик ҡараштарының формалашыуы, халыҡ ижадына таянып ижад ителгән тәүге әҫәрҙәре, тора-бара профессионаллек дәрәжәһенә үрләүенә байҡау яһала, вокаль әҫәрҙәре, халыҡ көйҙәренең эшкәртмәләре тикшерелә. Был эштә композиторҙарҙың шәхси архивтарын өйрәнергә, китапханаларҙа, дәүләт архивтарында ҡаҙынырға, хатта Ырымбур һәм Ҡазан ҡалаларына сәфәр ҡылырға тура килде...

Әйткәндәй, башҡорт фольклорына, композиторҙар ижадын өйрәнеүгә арналған диплом эштәре, диссертациялар яҙыуға ла ҡараш бик һүлпән беҙҙә. Шундай бай музыкаль мираҫыбыҙ булып та, уны ҡәҙерләй, һаҡлай белмәйбеҙ. Был йәһәттән беҙгә Ҡазан консерваторияһынан үрнәк алыу бик файҙалы булыр ине. Унда йыл һайын консерватория уҡытыусылары һәм студенттары тарафынан татар музыкаһына бағышланған ғилми хеҙмәттәр яҙыла һәм даими нәшер ителеп тора! Ҡазанға юл төшкән һайын сумкалар тултырып яңы китаптар алып ҡайтам...

Диссертациямды монография итеп сығарырға ниәтләйем. Милли музыка сәнғәтебеҙ менән ҡыҙыҡһыныусылар, бигерәк тә йәштәр, уҡыусы балалар беҙҙең "аҡһаҡалдарыбыҙҙың" ижадын, сәнғәтебеҙ үткән юлдарҙы белергә тейеш бит!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бына был, исмаһам, Өфө башҡорто! Өфөнөң ысын, уяу, рухлы башҡорто!" тигән ҡанатлы уй йөрөнө оҙаҡ ҡына Миләүшә Абрар ҡыҙы менән һөйләшеүҙән һуң. Өфө шулай ҙа бәхетле, уның ошондай ул һәм ҡыҙҙары бар!**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

---

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



# ҒӘЙЕП... АТАЙ-ӘСӘЙҘӘ

**Бер генә ата-әсә лә үҙ балаһының насар булыуын теләмәй. Шул уҡ ваҡытта үҙенең насар өлгөһөн, кире йоғонтоһон ваҡытында аңлап етмәй, шуның менән тәрбиәлә кире һөҙөмтә килеп сыға. Быға миҫалдар күп килтерергә булыр ине. Шуның береһе тураһында ғына һөйләйем әле.**

Беҙҙең балалар йорто ҡаршыһындағы матур ғына ағас өйҙә бер йәһүд ғаиләһе йәшәй ине. Ғаилә башлығы - музыкант. Көн дә саксофонын чехолына һалып, эшкә йүнәлә. Ә әсә кеше йә врач, йә уҡытыусы ине шикелле. Уларҙың матур ғына бөҙрә сәсле ҡыҙҙары ла бар. Исеме Иринка икәнен беләйнек, сөнки "Иринка, кайт!" тип саҡырғандарын ишеткәнебеҙ булды. Беҙ, балалар йортондағы ҡыҙҙар, көн дә бер төҫтәге ситса күлдәктәр кейеп, урамға сығып, аҡбур менән асфальтҡа шаҡмаҡтар һыҙабыҙ ҙа, һикереп уйнайбыҙ. Иринка беҙҙең уйнарға сығыуыбыҙҙы күреп ҡалһа, иң матур ебәк күлдәген кейеп, оло бантын тағып, ҡулына йә ҙур алма, йә ап-аҡ ҡалас, йә ҙур бублик тотоп сыға ла, беҙҙең уйнауыбыҙҙы ситтән күҙәтеп-ҡарап тора.

Шулай бер көндө ғәҙәттәгесә уйнап йөрөһәк, ҡурсаҡ кеүек кейенеп, ҡулына ҙур шоколад тотоп, Иринка өй алдарына сығып баҫты. Үҙе беҙҙе күҙәтә, үҙе ҡурғаштарын ҡыштырҙата-ҡыштырҙата шоколадын шаҡмаҡлап һындырып ала ла, ауыҙына ҡабып, тәмле итеп һура. Был хәл, әлбиттә, беҙҙе битараф ҡалдырмай, ауыҙҙан һыуҙар ҡойола, тик белдермәйбеҙ генә.

Беҙҙең арала Вәсилә исемле ҡыҙыҡай русса арыу ғына һупалай (ул "Шафраново" тигән санаторийҙа бер йылға яҡын дауаланып, русса өйрәнеп ҡайтҡайны), беҙ ҙә русса аҙ-маҙ аңлайбыҙ, сөнки икенсе синыфта уҡый һәм дәрестәрҙә рус телен үтә башлағайныҡ инде. Вәсилә йомшаҡ ҡына тауыш менән: "Иринка, идем с нами играть!" - тип саҡырҙы. Ә Иринка беҙҙең яҡҡа күҙ генә һирпеп алған булды ла, матур тауыштарын сығарып, тағы ла шоколадын һындырып алды һәм ауыҙына ҡапты. Вәсилә, бер ауыҙ асҡас, сигенергә уйламаны: "Әйҙә инде, бик тә уйнағың килә бит", - тип ныҡышыуын белде. Вәсиләгә бөтән ҡыҙҙар ҙа ҡушылып саҡырғас, Иринка ҡаршы тора алманы, өндәшмәй, ҡыйыуһыҙ ғына атлап беҙгә яҡынлашты.

Вәсилә Иринкаға быяла кисәге һуҙҙы. "Мә, һикер, бик оҫта һикерәһеңдер әле!" тип дәртләндереп, һалпы яғына һалам ҡыҫтырып ҡуйған булды. Ҡайһы бала ҡүмәк уйында ҡатнашырға хыялланмай инде! Иринка һикерә, ә Вәсилә маҡтап тора: "Калай еңел һикерәһең, тик шоколадың ҡамасаулай, әйҙә, тотоп торайым, иркенләп һикерһең, еңеүсе лә булырһың әле", - ти. Иринка шоколадын Вәсиләгә тоттороҙо, ә үҙе тырышып, мауығып һикерә башланы. Яңылыш һыҙыҡҡа баҫһа ла, күрмәмешкә һалышабыҙ, сөнки Вәсилә баяғы шоколадты түңәрәк буйлап ебәргәйне, һәр беребеҙ унан берәр шаҡмаҡ һындырып ҡалырға тырыша.

Иринка күңеле булғансы, арығансы һикереп туҡтаны. Күрә: ҙур плитка шоколадтың яртыһы ғына ҡалған. Әсе тауыш менән ҡысҡырып илап, өйөнә ҡайтып китте, ә беҙ үҙ йортобоҙға йүгерҙек...

Беҙҙең күҙҙе ҡыҙҙырып, үҙен беҙҙән юғары ҡуйып, маһайыуы өсөн булды был һабаҡ Иринаға. Бәлки, ул беҙҙең был ҡылығыбыҙҙы икенсе төрлө аңлағандыр, сөнки бәләкәй ине бит әле ул. Шуға ла хәҙер ошо хәлде иҫкә төшөрһәм, "Ғәфү ит беҙҙе, Иринка" тип әйткем килә лә тора. Уның ғәйебе юҡ бында. Ата-әсәһе шулай тәрбиәләгән бит, башҡаларҙан, айырыуса беҙҙең кеүек балалар йортонда тәрбиәләнеүселәрҙән үҙен юғарыраҡ ҡуйырға, бергә уйнамаҫҡа, үҙ әйберҙәрен бирмәскә өйрәткән...

Әйткәндәй, йәмғиәтебеҙ тағы ла байҙарға һәм фәҡирҙәргә бүленде бит. Байҙарҙың "бүтәндәрҙең күҙе ҡыҙһын әле" тип, ҡыланып-ҡыланыуҙары бер ҙә генә лә оҡшамай. Йә тотош футбол клубын, йә Карл Фаберженың пасха-ювелир йомортҡаларын һатып алалар. Ярай, аҡсаларын теләнә нисек туҙҙырһындар ҙа, ти. Фәҡирҙәргә ярҙам да итмәһендәр, ти. Тик маһаймаһындар, үҙҙәрен донъя тотҡаһылай тоймаһындар ине. Ошо хәл оҡшамай минә, был осраҡта гел генә: "Ғәйеп кемдә?" - тип уйланам. Барыбер ата-әсәләр, тәрбиәләр ғәйеп. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Фәүзиә ЯХИНА.**

**✓ Ул был йәшәйештән түгел, киреһенсә, бынау йорттар, юл ҡырлатып тигеҙ рәткә теҙелгән ағастар, ҡайҙалыр ашыҡҡан халыҡ ағымы артҡа шылып, унан ҡасалар төҫлө. Ана, теге бала табыу йорто.**




– Арыным, ишетәһегеҙме, арыным, я устала! Һеҙҙең янығыҙҙа бер көн, хатта бер сәғәт тә ҡала алмайым! Алла тарафынан онотолған һоро был ҡалала ошоғаса нимә белеп, нимә күреп үҫтем? Көн иткән урыныбыҙ һаҫыҡ бер бүлмәле фатир ҙа, өҫтөмә кейгәнем - барахолканан алынған ҡытай аламаһы. Инвалид тиндәрен еткерә алмай, осто-оҫҡа ялғап йәшәйбеҙ, юҡ, йәшәмәйбеҙ - существуем! Ҡайһы берәүҙәрҙең иҫ китмәле муллыҡҡа күмелеп, байлыҡтарына маһайып көн иткәндәрен күреп беләм. Ары ла ошо хәйерсе тормошо дауам итһен, тиһегеҙме? Килеп сыҡмаҫ! Не выйдет! Бала табып, больницала ҡалдырғанмын икән, уныһы - мое личное дело. Бик кәрәкһә, барып алығыҙ, аҫырағыҙ! Разрешаю! А я не хочу!..

Стенаға ҡағылған көҙгө алдына баҫҡан Дилемма биттәре буйлап һырғалаған еүеш тушь юлаҡтарын ҡулъяулығы менән ентекләп таҙартты ла, диванға ултырып, ҡоластарын йәйеп, ала-сола итеп буялған ҡыҫҡа сәсле башын артҡа ташланы. Бер нисә урындан туҡымаһы өлбөрәп тишелгән, пружиналары ҡаҡшаған ҡаралты илау тауышы сығарып әсе сыйнап ҡуйҙы. Өләсәһе аҡ һалған күрәғара күҙҙәрен көсәндереп, ҡаршы яҡ стенаға текәлде, әйтерһең, ул шулайтып бик күп билдәһеҙлектәре булған, сисеүе үтә лә ауыр мәсьәләне хәл итергә тырыша ине шикелле. Тик көсһөҙ, зәғиф ҡараш таш стенаны мөсһөҙ ҡапшаны ла ситкә бәрлекте. Күкһел соҡорҙарға батҡан, тоҙ төҫөндәге былай ҙа нурһыҙ күҙҙәр һүнгәндәй итте, тамаҡ төбөнән тоноҡ, инрәүгә тартым өн һығылып сыҡты:

- Тәүбәгә кил, балам, тәүбәгә кил... Быларҙы ейәнсәрем түгел, икенсе, йәнен шайтан алыштырған әҙәм әйтә, Хоҙайым, кисер уны...

- Юҡ, өләсәй, быларҙы я говорю, сөнки күпкә аҡылландым, на мир смотрю другими глазами, другим взглядом!

Бер яҡ ситтә, һумалтыр ширлектә өнһөҙ генә суҡайған ҡартатаһының иҫкереүе етеп эшлектән сыҡҡан аяҡ протезы, әйткәндәр менән килешмәгәндәй, ауыр шығырлап ҡуйҙы, шул ыңғырашыуға ауыр көрһөнөү ҡушылды. Тәмәке ыҫы һеңеп, ҡарағусҡыл һары төҫкә ингән бармаҡтар пинжәк кеҫәһенән папирос тартып сығарып әүәләргә тотондолар.

- Үкенергә тура килмәгәйе, тим, ҡыҙым ... Асы хәҡиҡәт, үкенеү, ғазап, ғәҙәттә, һуңынан килә. - Ҡартатаһының тауышы һәүетемсә генә, тыйнаҡ, һәлмәк ишетелә.

- Үкенмәйем! Өгөтләмәгеҙ, у меня институтское образование, нигде не пропаду!

- Юғары белем аҡыл өҫтәһә ҡана ла һуң... Үҙең хәл ит, ауырымаған яғыңа ят. - Бармаҡтар битендә тәгәрәгән папиростың ҡағыҙы, баҫымға сыҙамай йыртылып, тәмәке онтаҡтары иҙәнгә һибелде. Тыныс холоҡло ҡартатаһы ла сығырынан сыҡты шикелле, ҡулындағын көйәләнгән ҡиәфәттә иҙәнгә ырғытты ла, нәҙек оҙон бармаҡтарын аралаштырып, устарын ҡаушырҙы. Тырпайған мыйыҡ остары түбән һалынды. Эсе бошҡанда ул шул ҡиәфәттә ҡалыусан.

- Күптән хәл иткәнмен, китәм һеҙҙән, этот город, его люди до чего мне надоели! Ишетәһегеҙме - надоели! - Дилемма урынынан тороп уҡ китте лә, алдан хәстәрләп, кәрәк-ярағын, кейем-һалымын тыҡшырып тултырған спорт сумкаһын елтерәтеп, зал уртаһына сығарҙы, ҡабаланып кейенә башланы.

- Бәлки...

Өләсәһе ниҙер әйтергә теләп, һүҙ башлағаны, уны Дилемма тупаҫ бүлдерҙе:

- Бәлки, түгел, китәм, тигәс, китәм, бындағы хәйерсе тиндәренә бил бөгөп, көндәремде ярым емерек фатирҙа тамамлайһым килмәй! Эҙләп мәшәҡәтләнмәгеҙ!

Ишекте ҡаҡлыҡтыра ябып, ярым ҡараңғы подъезға уҡталды. Сыҡҡас, тынысланырға теләп, аяҡтарын тыбызыҡлап, урынында тапанды, сумкаһын баҫҡыс майҙансығына быраҡтырғас, асыу менән курткаһының замогын өҫкә тартты, ҡулын джинсы кеҫәһенә тығып, стенаға һөйәлде, ирендәренә һаламдай нәҙек фильтрлы сигарет ҡыҫтырып, осона зажигалка ялҡынын тейҙерҙе. Үпкәләренә тулған татлы төтөн йән көйөгөн баҫманы, киреһенсә, күңелен болғандырҙы. Ауыҙындағын яһилланып таш иҙәнгә төкөрҙө лә кроссовкаһы менән тызып уҡ ҡуйҙы. Бер аҙ тыңлап торҙо. Фатирҙа ҡалған ҡартатаһы менән өләсәһенең һөйләшеүе ишетелмәй. Хәйер, улар икеһе лә сарғалана һалып бармаған сабыр йәндәр инде. Мөйөшкә баҫтырылған балалай, ишек менән стена арауығына һыйынып, бөршәйеп, бер аҙ тора биргәс, сумкаһын ҡабаттан эләктерҙе лә йүгерә-атлай баҫҡыстарҙы аша-төшә баҫып, түбәнгә ташланды.

Ҡыуып килеүселәрҙән ҡотоларға теләгән ҡасҡындай, ишеге ярым ябылып ҡуҙғалырға өлгөргән автобусҡа һикерҙе, артҡы тәҙрә уратаһын ҡоршаған тотонғосҡа йәбеште. Ул был йәшәйештән түгел, киреһенсә, бынау йорттар, юл ҡырлатып тигеҙ рәткә теҙелгән ағастар, ҡайҙалыр ашыҡҡан халыҡ ағымы артҡа шылып, унан ҡасалар төҫлө. Ана, теге бала табыу йорто. Унда бер тапҡыр ҙа ҡулына алмаған балаһы ҡала. Икенсе ҡаттағы тәҙрәнән биләүҙәге баланы күтәргән ят ҡатынды төҫмөрләгәндәй ҙә иткәс, әллә йөрәге, әллә һөттән тиркән түше әрнеүле һулҡып ҡуйҙы. "Был ҡатын уның улын шулай, юрамал, күреп ҡалһын был, тигәндәй, күтәреп баҫҡанмы?.." Өндәге һаташыуынан арынырға теләп, башын әйеп, усы менән күҙҙәрен ҡапланы. Тимер юл вокзалына килде лә поездар барыр йүнәлештәрҙе сағылдырған ҙур табло-экран янында туҡталды. Исемлек теҙмәһе күҙҙе ҡамаштырып, башты бутап, өҙлөкһөҙ алмашып ҡына тора. Ҡайҙа olaғырға теләйһең, етеҙ поезд һуңлатмай алып барып еткерәсәк, теләгең, йәнә аҡсаң ғына булһын. "Ниәтләп сыҡҡас, баш ҡаланың үҙенә барырға кәрәк. Унда мөмкинлектәр киңерәк". Хәл итте. Оҙон сиратҡа баҫып, билет алды, көтөү залына үтеп, тимер ултырғысҡа урынлашҡас, һалынҡы яурынбаштарын теҙенә эйелдереп, бөгөлөп төштө.

Өләсәһе хаҡлы, бер аҙға ғына туҡталып, фекер тупларға, бараһы тарафыңды тоҫмалларға кәрәктер ул. Тик уны һуңғы айҙарҙа алыштырып ҡуйҙылармы ни, күңеленә ят йән инеп оялап, өҙлөкһөҙ нимәгәләр ҡоторта, һөслөтә, ҡайҙалыр ҡыуалай, туҡтау ғына түгел, тын алырға ирек бирмәй. Ҡасан башланды әле ундай бәргеләнеүҙәр? Әхирәте үткәргән тыуған көн кисәһенән һуң ятаҡтағы алданған шыҡһыҙ төн һалдымы күңеленә шул шомдо, әллә ауырлы булыуын әйткән акушер-гинекологтың һалҡын, мыҫҡыллы ҡарашы менән осрашҡандан аҙаҡ башландымы өйәнәктәй ҡабатланған мәхшәр?.. Кем алданы бит әле, йәне, тәне тартмаған һөйкөмһөҙ Джон! Башта уҡ уның һөмһөҙ бәйләнеүҙәренә ярайһы ҡаты ғына кәртә ҡуйғайны, хистәре яуапһыҙ ҡалған егет тора-бара уға үтә лә нығ ҡаныҡты. Аңдый, эҙәрлекләй торғас, яйын тапты, теләгәнен алды тәки. Кисәгә килгәс, янында ла ярамһаҡланып уралманы, бәйләнмәне лә. Ә бына өҫтәл артында һут ҡына уртлап ултырған Дилемманың бер аҙҙан тәне ауырайҙы, күңеле болғанды, башы әйләнде. Һиҙҙермәй генә эсемлеккә нимәләр ҡуштылар шикелле. Әхирәттәре күрше бүлмәгә сығарып һалдылар. Ҡунаҡтар таралып бөткәс, иҫерек Джон килеп инде лә әрһеҙ, оятһыҙ ҡыланып, башта үҙе сисенде, шунан уның өҫтөндәге кейемен йолҡҡосларға кереште. Өҙәләнеп ҡыҫҡырып та маташты, тик ярҙамға килеүсе генә табылманы. Араҡы еҫе аңҡыған ауыҙ ирендәрен томалап, уҫлаптай кәүҙә карауатҡа ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп ҡыҫҡас, көсһөҙләгөн тойоп, шым ғына илап ебәрҙе. Биттәренә бәрелгән, ауыр, һаҫыҡ тын өнөн быуҙы, сатын ярған тупаҫ ауыртыу үҙәгенә үтте... Йәшерен, уйында ғына йөрөткән илаһи ҡушылыу төнөнөң керһеҙ хыял ҡапҡаһына шулайтып, таҙармаҫлыҡ булып, дегет яғылды, йәнен ауыр тойғо биләне. Ул тойғо ауыры ҙурайып, ҡорһағы бүлтәйә барған һайын үҫә генә барҙы, әле донъяға тыумаған сабыйына, өкәлтәктәй иҫке фатирҙа көн иткән, ағас протезлы ҡартатаһына, аяҡ юлын көскә таныған өләсәһенә ерле юҡҡа асыуы ҡабарҙы. Институтты тамамлағандан һуң, оҙаҡ эҙләп, төҙөлөш идаралығы начальнигының секретары булып ваҡытлы эшкә урынлашҡайны, эш хаҡы ла ташҡа үлсәйем, аҙыҡ-түлектән артмай, әҙәмсә кейенә лә алмай, исмаһам. Бала тыуһа, ҡайһылайтыр? Ул бит артыҡ тамаҡ, аяҡтарына тышау. Күргеһе килмәй уны, тыуғанынан тыумағаны мең артыҡ. Бер көн Джон эргәһенә үк килеп: "Әгәр телеңде тыймаһаң, ҡара уны! Үлтерәм! Недотрога инең, хәҙер кемгә кәрәгең бар, йыуғыс", - тип уҫал ыҫылданы ла, хәҙер күргән һайын, йә хәлдәрең нисек, бисара, тигәндәй һауалы текәлеп уҙа. Милицияға хәбәр итмәне, "үлтерәм"дән ҡурҡты, йәнә, исемде сығарып, ян-тирәһен шаулатыуҙан ни фәтеүә, ояттҡа батырһың, мәсхәрәгә ҡалырһың бары. Ҡартатаһынан, өләсәһенән башҡа морон төртөр, яҡлар кеме бар был мәрхәмәтһеҙ донъяла! Әсәһен хәтерләмәй ҙә, уның хаҡында яҡындары ла һөйләй һалып бармайҙар. Ул уны тыуҙырып, Дилемма, тип исем ҡушҡан да ҡомға һеңгән һыу тамсыһылай юҡҡа сыҡҡан. Йәнәһе, мәрхәмәтһеҙ тормош дилеммаһын үҙең хәл ит, һин миңә кәрәкмәйһең.

Баштараҡ ауырын йәшерергә тырышып, тар джинсы салбар кейеп йөрөнө, шунан бүлтәйә барған эсен ары йәшерерлек рәте ҡалмағас, ҡорһағын шнурлы корсет менән шыҡырлатып быуып тарттырып ҡуйҙы. Йәне алҡымына килеп тығылдымы ни, был хәлдә атлап йөрөү түгел, тын алыуы ауыр. Әгәр сабыйы тонсоғоп ҡуйһа?.. Әй, дөмөкһөн дә. Ҡотолор, исмаһам... Беҙҙе ҡапсыҡта йәшереп тотоп буламы инде, теләйме-юҡмы, тәҡәте ҡалмағас, джинсыһын сисеп, иркен юбка кейергә мәжбүр булды. Шулай итеп, сере асылды. Хәҙер таныш-тоноштары осраһа, иң әүәл уның ҡабарған ҡорһағына текәлә, шунан ғына йәлләгәндән хәлен һорашҡан булалар. Хәле билдәле инде, барыр ере, батып үлер күле генә юҡ.

Яңылыҡты ишеткән өләсәһе бошонманы ла шикелле, хатта сирле йөҙөндә ҡыуаныу ишараты сағылдырҙы:

- Кейәүгә сығып тапһаң, башҡалар алдында йөҙөң яҡты булыр ине лә, ярай, ни хәл итәһең, өсәү йәшәгәнсе, дүртәүләп көн итеүебеҙ яҡшы.

- Уны ошо тар бүлмәлә аҫырарбыҙмы, нимә ашатырбыҙ, нимә кейҙерербеҙ? - Ундай яуапты көтмәгән Дилемма аптырап ҡалды.

- Аҫырарға ул мал түгел - кеше! Нисек тә бергәләп йәшәрбеҙ әле. Бына беҙ һине, бер ҙә тарһынмай, яратып үҫтерҙек тә.

- Ул бит минең теләгемдән тыш яңылыш яралған!

- Бер бала ла ошоға тиклем яңылышлыҡтан, елдән яралмаған. Һеҙ гонаһлы булһағыҙ ҙа сабый ғәйепһеҙ.

- Уның атаһын мин яратмайым, яратыу ғына түгел, күрә алмайым!

- Ҡайһы саҡ һөйөүҙән дә һөйкөмһөҙҙәр ярала. Тыуыр йәндең яҙмышы Алла ҡөҙрәтендә.

- Кәрәкмәй ул миңә, кәрәкмәй! Иртәгә үк аборт яһатам!

Өләсәһе ары һүҙ көрәштермәне, тешһеҙ ауыҙын мөйтәңләтеп уҡына-уҡына, ҡулына намаҙлығын алды. Шул шөғөлө менән ул Дилемманың сығарған ҡарарына ҡаршылығын белдерҙе.

* * *

Акушер-гинеколог бүлмәһендәге өҫтәл артында был юлы ят кеше ултыра: илле йәштәр самаһындағы мөләйем йөҙлө ҡатын. Теге, тәү килгәндәге битараф йөҙлө, тупаҫ, төрпө һүҙле табиптың булмауына ҡыуана биреп тә ҡуйҙы. Шулай ҙа шиксел төбәлеп, биреләсәк һорауҙарға уҫал, кире ҡаҡҡыһыҙ яуаптарын ҡайтарырға йыйынып, ултырғыс ситенә һаҡты.

Табип Дилемманы күптәнге танышылай ҡабул итеп, уны кушетҡаға уңайлап һалды ла апаруҡ ҡабарған ҡорһаҡты ҡапшарға, наҙлы һөйләнергә кереште:

- Йә, үҫәбеҙме? Ҡана, ҡарайыҡ әле, нисегерәк ятаһың икән? Ҡулай, матур ғына урынлашҡанһың былай, һәйбәт, һәйбәт... Хәҙер, һеңлем, тороп баҫ, йөрәгеңде, үпкәләреңде тыңлап ҡарайыҡ, ҡан баҫымыңды үлсәйек.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

# КӨҘГӨ ЙЫР

*Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА*



### Мая

Аҫтан түгел, өҫтән түгел -
Һарғая шәлкем-шәлкем.
Ҡайынды әйтәм - көҙөнә
Әүерәүе шул хәтлем!
Тош-тош ерҙә - алтын һырға,
Тош-тош ерҙә - һарылыҡ.
Сулпыларын, һаҡалдарын
Инселәп тә тағырлыҡ.
Йәшелдең дә төҫө уна -
Ҡоңғортлана тирә-йүн.
Аҡ ҡайында - көҙ сарпыуы,
Килеп арҡа терәнем.
Аҫтан түгел, өҫтән түгел,
Шәлкемләп һала һырын.
Алтынланған көҙҙәремә
Мая булды был йырым...

* * *

Ерҙең битен һорғолт һипкел алған -
Иртә килгән көҙҙөң билдәһе.
Күҙ ялҡыны ялмап бөтөп бара
Йәшел йәйҙең елбер итәген.
Шаҙраланған һыуҙың өҫтәрендә
Ваҡыт үҙе аға, ашығып.
Толом сулпыларын һыуға һибә
Ипкенгә лә ирер тал-сыбыҡ.
Бала көткән ҡатын эше генә -
Ерҙең битен һоро тут алған.
Һары йәшен түгеп йәйем илай -
Көҙ миҙгеле менән буталған...

### Доға

Телеп әйтер телем был,
Белеп әйтер телем был,
Өләшкә төшкән көмөш -
Йыйып әйтһәң, илем был.
Телеп әйткән ярамаҫ
Туғанына - башҡортҡа.
Тура һүҙҙән тайҡалап
Әйләндекме маңҡортҡа?
Тура әйткән тыйылды,
Ситләтелде иленән.
Үҙендеке, яу булып,
Уны төйҙә килелә...
Телеп әйткән телемме,
Беҙгә яҙған бүлемме,
Телгә килгән яу бөгөн
Милләтемә үлемме?
Телгеләнгән телемдәр
Берекмәҫтәй заманмы?
Теленән биҙгән башҡортҡа
Ошо хәле таманмы?
Телеп әйтер телкәйем -
Теләп әйткән доғамда.
Һине Аллам һаҡлаһын
Фани ғына донъямда!
Амин!

### Көҙгө йыр

Һары менән йәшел аралашҡан -
Көҙ билдәһе инде, билдәле.
Бушай барған урман төпкөлөнә
Ҡараш атып, алыҫ инмәле.
Сүкер, ҡурпы - киндер күлдәк ише,
Кәбән-түштәр тиртә яланда.
Әрәмәнең ҡуйы йәшеллеге
Утрау ғына булып ҡалған да.
Йәшел менән һары аралашҡан -
Ягалашҡан сағы йәй-көҙҙөң.
Алтын япраҡ итеп күңелемдән
Көҙгө йырҙы бына мин өҙҙөм...

### Аҡыл

Аҙ ауырыу, анһат үлем бир, тип,
Көн-төн теләй ине инәйем.
Һүҙҙәрендә алтын аҡыл булған,
Әйтерендә булған кинәйә...
Бала саҡта быны аңлау ҡайҙа -
Сәйер инәй, тинек - шул ғына.
Түшәк тартып сәғәт ятмаңы ул -
Теләгәне ысын булды ла...
Түшәк тартып атай күпме ятты,
Кеше көнлә бөгөн ағайым.
Хәснә инәй, һинең әйткәндәрҙе
Хәҙер килеп кенә аңлайым...
Аҙ ауырыу, анһат үлем бир, тип,
Һау сағында һорап ҡал икән.
Оло һүҙе - аҡылдың бит үҙе -
Йөрәгенә генә ал икән...

### Шәхси фекер

Гәзит-журналдар маҡтайҙар
Ситкә сығып киткәндә.
Сит енесте ише итеп,
Уңып донъя көткәндә.
Сит ерҙә солтанлыҡ ҡайҙа,
Олтанлыҡ беҙгә - бәхет.
Таҡта ғына урындыҡ та
Үҙе ерендә - тәхет.
Сит ерҙәрҙә фәлән барҙыр.
Барҙыр ҙур аҡса, шәп ир.
Унда алтын ҡойолалыр
Сығып өлгөрмәҫтән тир...
Унда кешеләр йәшәйҙер
Төймәгә генә баҫып.
Күрмәйҙер беҙҙәге ише
Нужа, ыҙалар, аслыҡ...
Сит ерҙә бары ситсәләр -
Дине, мөхите, теле...
Тик үгәй әсәй булалыр
Һин алыштырған илең...

* * *

Йәй еттеме беҙҙә турист баҫа:
Түләп килә, түләмәгән күп.
Уларҙан һуң ерҙә нимә ҡала?
Шешә, банка, өйөм-өйөм сүп.
Агиҙелдән һалдар аҡмай хәҙер -
Резина кәмәләр теҙмәһе.
Яр буйҙарын, йәшел сиҙәмдәрҙең
Улар иҙеп китә иҙмәһен.
Шүлгән тәңгәлендә кеше мыжғый -
Ҡайҙан ғына бында килмәйҙәр!
Асфальт булмаһа ла был төбәккә
Ниндәй "тачка"ларҙа елмәйҙәр?
Арандай ауыҙын асҡан Шүлгән
Тау өңө тик килгән-киткәнгә.
Төкөрҙө, ти, улар тарихына,
Иҫе китте, ти, данлы үткәнгә.
Һалҡын тынын өрөп, тарта Шүлгән
Бөрйән балаһын да, ятты ла.
Меңенсе ҡат торам ауыҙында
Ошо мөғжизәгә аптырап!
Күгәреп тә яткан Шүлгән һыуы
Һағышымды минең таратмай.
Бар һин ҡара ошо ер тип янмай,
Тыуған төйәгем тип йән атмай!

### Аҡҡа төшөү

Күк келәһе - Етегән
Бисмиллалап эленгән.
Ай нурына мохтаждар күп -
Ҡыйырсыҡ бит - теленгән.
Төнгө тауыш китә алыҫ -
Селлә һиллеген боҙма.
Таралған күстәй йондоҙҙар -
Йыйырға кәрәк моҙға!
Ысығы ла бал тәм(е)әйтә -
Үлән-уттың бешкәне.
Ысыҡ һирпеп бесән саба
Кешеләрҙең эшсәне.
Таң һарыһы - йүкә балы,
Ҡояштың ҡыҙыу, алы.
Урманға саҡырып сыңлай
Кемдер сүкегән салғы.
Йәйге селләнең сарпыуы
Ҡағылдымы күңелгә -
Аҡ ҡағыҙға сихри мәлдең
Балҡыштары түгелә.

### Көнләшеү

Ил иләүен уйлап сабауыллай
Бер мәхлүҡәт - кескәй ҡырмыҫҡа.
Үҙе шундай оло миҫал инде
Беҙҙә аптыраткан тормошта!
Үҙ иләүе уның, үҙ законы,
Үҙе генә белгән теле лә!
Меңәрләбе йөнен фиҙа ҡыла
Берәү һөжүм итһә иленә...
Унда - закондар ҙа бүтән башҡа -
Аллаһ ҡушҡан, Аллаһ бойорған.
Тайпылмайҙар кескәй мәхлүҡәттәр
Батшалары ҡушҡан тыйыуҙан.
Унда - гармония, тулы бәхет,
Һәр берәһе кәрәк, ҡәҙерле.
Ҡыйырһытмай улар берен-бере,
Икенсенән күрмәй йәберҙе...
Эх, Сөләймән* була алмайбыҙ шул -
Ҡырмыҫҡаға торам көнләшеп.
"Беҙҙән үрнәк ал һин, башҡорт!"-тиеп
Китер ине микән өндәшеп...

**Сөләймән - Сөләймән ғәләйһис-сәләм ҡоштар, хайуандар, бөжәктәр телен белгән.*

АҠЫЛ ҺАНДЫҒЫ

# ҺАҠАЛЫҢ ОЛОРАҠМЫ,

## әллә үҙеңме?



**Суфый юлы - ул фекерҙең һәм йөрәктең туктауһыҙ эшмәкәрлеге. Төрлө заманда йәшәүсе бөйөк суфыйҙарҙың аҡыл һандығынан сыҡҡан бер нисә кинәйәле хәлдәрҙе һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

### Туҡмау

Бер хужа үҙенең фәҡир хеҙмәтсеһен йыш ҡына туҡмай икән. Хужаһы үҙен ни өсөн туҡмағанын аңламаған хеҙмәтсеһе яр һалып илай икән. Уның илауын ишеткән икенсе берәү хужанан:

- Һинә етем фәҡирҙе туҡмау хоҡуғын кем бирҙе? Алланан ҡурҡ, туҡтат был ҡылығыңды! - тип һораған.

- Нинә минең эшемә ҡыҫылаһың. Мин бит фәҡир етемде түгел, ә уның эсенә ултырған һәм миңә зарарлы эш ҡылырға бойорған, уны тыңлауһыҙ иткән Иблесте туҡмайым. Уны хатта ғәзиз әсәһе лә минең кеүек туҡмар ине, - тип яуаплаған хужа.

### Күренмәгән һөйөү

Бер суфый стенала элеүле торған буш моҡсайҙы күреп ҡалған да, аптырашынан бот сабып:

- Бары тик буш моҡсайҙа ғына мәкер булмай, - тип белдергән суфый.- Унда донъя бәләләренән дарыу ғына бар! Ул - хәйерселәр батшалығы! - тигән ул.

Уға башҡа суфыйҙар ҙа ҡушылып, илай-көлә буш моҡсайҙы маҡтарға тотонған.

- Һинә ул бушлыҡты маҡтарға һуң? - тип һораған суфыйҙарҙың был ҡылығын нимәгә юрарға белмәгән үткенсе.

- Һинә бында урын юҡ, - тип яуап биргәндәр уға суфыйҙар.-Һин бары тик ҡул менән тотоп ҡарап була торған нәмәне генә күрә алаһың. Беҙҙә аңлар өсөн һинә ғашиҡ булырға кәрәк, тик ғашиҡ кеше генә тәнән дә, көнөн дә башҡаларҙың күҙенә күренмәгән һөйөүен күрә ала...

### Кем олораҡ?

Аҡ һаҡаллы мулланан "Һаҡалың олораҡмы, әллә үҙеңме?" тип һорағандар.

- Әлбиттә, үҙем, - тип яуап биргән мулла, - мин тыуған сағымда әле бер төк тә һаҡалым юҡ ине.

- Әгәр ҙә һин һаҡалыңдан олораҡның икән, нинә ул ағарған, ә һинең күңелең ҡарайған һуң? - тигән һорауға мулла яуап бирә алмаған.

### Кәңәш

Берәү күршеһенә кәңәш һорап килгән, әммә күршеһе уны тыңларға ла теләмәгән.

- Үҙеңә башҡа кәңәшсене эҙлә, күршем. Үҙеңә шулай яҡшы булыр, сөнки мин һинең аҫтыртын дошманың, ә дошманлыҡ - насар кәңәшсе. Ана, дуҫтарыңдың берәһенә мөрәжәғәт ит, улар һиңә яҡшы кәңәш бирер, - тигән күршеһе.

- Һинең һүҙҙәреңдән мин шуны аңланым, күршем, - тигән кәңәш һораусы, - һин, ысынлап та, миңә аҫтыртын дошманһың, әммә был хаҡта миңә үҙең әйтәһең икән, тимәк һин намыҫлыһың. Ә намыҫлы дошман намыҫһыҙ дуҫтан мең артыҡ...

### Ашаусы һәм ризыҡ

Селәүсендә суҡышы менән эләктергән ҡошсоҡ, табышы менән мауығып, үҙенә яҡынлашып килгән бесәйҙе һиҙмәгән. Ҡошсоҡ селәүсендә йотоп өбәреүе булған, бесәй уның үҙен дә тамаҡлап ҡуйған. Шулай итеп, ҡошсоҡ бер юлы үҙе ашаусы ла, ризыҡ та булып ҡуйған.

Кем - ашаусы, кем һуң ризыҡ?
Бер үк төрлө улар - ҡыҙыҡ,
тип ошо күңелһеҙ хәлде күҙәтеп торған бер суфый бәйет сығарған ти.

### Уҡыусы һәм илаусы уҡытыусы

Бер уҡыусы уҡытыусыһының ҡысҡырып илап тороуын күреп, үҙе лә ҡушылып иларға тотонған. Улар оҙаҡ ваҡыт ҡысҡырып илағандан һуң, уҡытыусы илауынан туктап, уҡыусыһына өндәшкән:

-Һинең сәбәпһеҙгә илауың миңә бик сәйер күренә, һин бит миңә оҡшарға тырышып ҡына илайһың. Ә сәбәпһеҙгә илаусы кеше ғәйепле һанала. Шуға күрә бер ваҡытта ла күнел төбөндән сыҡмаған күҙ йәштәрендә түгеп, гонаһҡа батма, - тигән уҡытыусы суфый.

### Ғашиҡтар урыны

Бер һылыу яратҡан егетенән:

- Һин донъя буйлап күп гиҙгәнһең, күп йөрөгәнһең. Әйт әле: һин булған ҡайһы ил иң матуры һуң? - тип һораған.

- Барлыҡ урындарҙан иң матуры икебеҙ бергә булған ожмах. Әгәр ҙә икебеҙ ҙә гүр эйәһе булһаҡ, миңә хатта ҡәбер ташы ла матур булып күренәсәк. Йософто һөйөүсе ҡыҙ өсөн хатта ул ултырған төрмә лә ожмах булып тойолған бит, - тип яуап биргән уның егете.

ИНТЕРНЕТТАН



# ДӨРӨҪ ЯЛ...

## һөҙөмтә бирә

■ Брокколи кәбеҫтәһендәге индол-3-карбинол берләшмәһе организмды токсиндарҙан таҙарта. Йәш өлкәнәйә барыу менән арилуглеводород рецепторы эше һүлпәнәйә, күҙҙәр насарыраҡ күрә башлай, төрлө специфик ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Брокколи составындағы берләшмә ошо репецторҙарҙы әүземләштереп ебәрә лә инде. Брокколи составына аҡһымдар, майҙар, күҙәнәклек, селен, магний, калий, кальций, фосфор, тимер, цинк кеүек төрлө минераль берләшмәләр, С, РР, Е, К, U, бета-каротин витаминдары инә. С витамины әфлисунға ҡарағанда ике тапҡыр күберәк. U витамины сей яраларҙы буллырмай. Был витамин тағы ла спаржала бар.

■ Тәм-том тирегә насар тәьҫир итә. Шәкәр молекулалары протеин һәм майҙарҙы үҙенә тарта. Был процесс тиренең тәбиғи ялтырауын, тонусын юғалтыуға, шулай уҡ һырҙарға алып килә. Матур булып ҡалырға теләүселәр шәкәрҙе йәшелсә-емеш, бал менән алыштырырға тейеш. Шәкәр шулай уҡ иммунитетты ла ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Инфекциялы ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризыҡтар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

■ Матдәләр алышыныуҙы тиҙләтеү - күҙәне һомғол тотоуҙа ҙур роль уйнай. Кемгәлер был нәҫелдән бирелә. Ир-егеттәр, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда калорияларҙы тиҙерәк яндыра. 40 йәште үткәс, күптәрҙең метаболизмы яйлай. Ғалимдар билдәләүенсә, беҙ хатта тик ултырғанда ла, организм калорияларҙы яндырыуын дауам итә. Кемдең мускулдар массаһы күберәк, уларҙы матдәләр алышыныу тиҙлеге лә ҙурыраҡ. Сама менән иҫәпләгәндә, 500 грамм мускул туҡымаһы көнөнә 6 калория тотона. Шул уҡ ваҡытта, 500 грамм май көнөнә 2 калория ғына яндыра. Шуға ла мускулдарҙы үҫтерегеҙ. Калорияларҙы эшкәртеү өсөн организмға һыу кәрәк. Һыу етешмәй башлаһа, матдәләр алышыныуы шунда уҡ яйлай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә 6-8 стакан һыу эсергә кәрәк.

■ Күңел болғанғанда, мускулдар һыҙлағанда имбир файҙалы. Ул ҡандағы шәкәр кимәлен дә түбәнәйтә, аш һеңдереүгә булышлыҡ итә. Имбирҙе Азия илдәрендә ит, балыҡ ризыҡтарына ла, сәйгә лә өҫтәйҙәр. Гингерол - төп биологик әүҙем матдә имбиргә файҙалы сифаттар өҫтәй. Яман шештең ҡайһы бер формаларын имбир менән дауалап була. Бигерәк ашҡаҙан аҫты, һөт биҙҙәре яман шешен булдырмау өсөн имбир ҡулланырға кәңәш итәләр. Был тәмләткес респираторлы инфекцияларға ҡаршы көрәшә.

■ Американың ғаилә һәм хеҙмәт институтында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡыҫҡа эш көнө хеҙмәткәрҙәр өсөн дә, ойошма өсөн дә файҙалы. Медицина күҙлегенән сығып ҡарағанда, офиста оҙаҡ ултырыу йөрәккә насар тәьҫир итә. Аҙнаһына 55 сәғәт һәм унан да күберәк эшләүсе кешелә аҙнаһына 40 сәғәт эшләүселәргә ҡарағанда инсульт хәүефе 33 процентҡа юғарыраҡ. Бынан тыш, тик эш менән генә шөғөлләнеүселәр насар йоҡлай, шуға ла тиҙерәк арый. Иң мөһиме, ти ғалимдар, кем оҙағыраҡ ял итә, улар һөҙөмтәлерәк эшләй.

ҺАБАҠТАР

**Күп кенә илдәр һәм халыҡтар хаҡындағы тарихты, мәғлүмәттәрҙе сәйәхәтселәр яҙып ҡалдырған. Беҙҙең башҡорттар хаҡында ла Ибн-Фаҙлан кеүек донъя гиҙеүселәрҙең яҙмалары бар. Һәм, моғайын, иң тоғро мәғлүмәттәр тап ана шул ситтән килгән күҙәтеүселәр тарафынан биреләлер ул. Уларға кемгәлер ярарға йәки оҡшарға кәрәкмәй, улар күргәндәрен-кисергәндәрен, сағыштырыуҙарын ғына яҙалар.**

# ДОНЪЯ КҮРЕП, ХАЛЫҠТАРҘЫ БЕЛЕП...

## (Журналистың ҡуйын дәфтәренән)

Мин дә быйыл аҙ ғына булһа ла сәйәхәт иттем, ят ерҙәр, ят халыҡтар менән аралаштым. Һәм, һөнәремә тоғро ҡалып, һәр күҙгә ташланғанды күҙәтергә, һорашырға, белергә тырыштым. Шул күргәндәрҙе үҙебеҙ менән сағыштырҙым һәм ҡайһы бер нәмәләргә шатландым да, эсем дә бошто.

Абхазия һәм Абхазияға яҡын булған Адлер, Сочи кеүек Ҡара диңгеҙ ярына теҙелгән ҡалаларҙа күберәген абхаз һәм әрмән халҡы йәшәй икән (әлбиттә, үҙҙәре әйтеүенсә, тау халҡының тағы ла 12-15 төрө бар унда). Башлыса христиандар, мосолмандар 16 процент тирәһе генә. Әрмәндәр Әрмәнстандың әрмәндәре түгел, үҙҙәре әйтеүенсә, телдәре лә, ғөрөф-ғәҙәттәре лә башҡа. Абхаздар христиан диненддәләр, сиркәүгә йөрөйҙәр, әммә Иисусҡа табынмайҙар. Сиркәүгә йөрөүселәр ҙә тик ҡатын-ҡыҙҙар, ир-егеттәр, аңлауымса, былдайға бөтөнләй ваҡыт әрәм итмәй. Уларҙа дөйөм Алла төшөнсәһе бар, ә нығынған дини йүнәлеш юҡ. Һөйләшеп ултырғанда хатта христиан дине лә уларға яңылыш ҡына бирелгән кеүек тойолдо.

Беҙҙең фатир хужалары Абхазия әрмәндәре булып сыҡты. Беҙҙәге кеүек үк, кинйә улдарын башлыҡҡа ҡалдырып, бер йортта алып ҡалған ғаилә. Йәштәрҙә бер-бер артлы өс ир бала үҫеп килә. Йәшәгән урындары диңгеҙҙән башланып, ҡапыл үргә күтәрелгән бейек тау итәгендә. Ана шул тау итәгендә 8-10-ар сутый ғына ерҙәрҙе биләп, ҡарлуғас ояларының шикелле итеп йорттар төҙөп бөткәндәр. Тар ғына юлдар буйлап үргә үрмәләгәндә тәҙ генә итеп баҫып та тороп булмай, ә ҡапҡаларҙы асып инһәң - ихата тип-тигеҙ итеп эшләнеп, ялпаҡ таш менән ябылған (замансараҡтарҙа - асфальт). Бер кешелә лә бер ҡатлы ғына йорт юҡ. Йорттар таштан йәки нисектер иҙелмә ҡойоп блоклап, мотлаҡ подвалды һәм ике-өс ҡатлы итеп төҙөлгән. Йорттан һәм урталағы йәйге ашау урыны булған веранданан тыш, бөтә ерҙе баҡса биләй. Сәскәләрҙең ниндәйе, емеш ағастарының ҡандайы ғына юҡ. Йөҙөмдәрҙең төрлө сорты үрмәле гөл булып ҡоймаларҙы, өйҙө уралтҡан. Ә бында ер шәптән түгел. Быны хужабикә лә әйтте. Тупраҡтары ҡомло-балсыҡлы, тоҙло, үҫемлектәргә бармай икән. Баҡса үҫтереү өсөн ерҙе һатып алалар! Һатып алынған тупраҡта шундай охмаж баҡсаһы тота уңған хужабикә. Тупраҡ ҡәҙерлелер, күрәһең, эте бикле торған еренән килеп сығып, бер гөл көршәген ауҙарғайны, һеперел кенә ташлау урынына, бөртөгөнә тиклем йыйып, ярсыҡтарынан арындырыу өсөн иләк аша үткәреп алды. Быны күҙәтеп ултырған мин көләм. Хужа әйтә: "Һеҙҙәге ерҙәр



беҙҙә булһа, шул ерҙәрҙән дүрт аяҡтан тормай эшләр, әллә нимәләр үҫтереп алыр инек", - ти.

Хужабикә пенсияла, өйҙәренең бер ситендәге бүлмәләрҙә йәшәгән ял итеүселәрҙе ҡарай. Һигеҙ бүлмә тапшырыла. Был торлаҡтарға ихатанан айырым баҫҡыс буйлап күтәреләһең. Хужалар таңғы биштә тора, шул мәлдә бер-бер артлы ике машина ҡабыҙыла, мин шуларҙың тауышына уянам. Хужабикә улы менән ирен оҙата ла, баҡсаһына һыу ҡоя башлай, ап-аҡ итеп керҙәр йыуып элә. Мин дә иртә торам, әммә верандаға төшкәнемсә ул был эштәрен башҡарып бөткән була. Мине күреп, ҡыуанып китә. Әллә ҡунаҡтарҙы шулай хөрмәтләүҙәре микән? Икәүләшеп өҫтәл артында ултырып, яйлап һөйләшеп алабыҙ. Ул сәй эсмәй. Ғөмүмән, ул халыҡ сәй эсмәй. Минең сәғәттән ашыу бер үҙем аяҡ һонop ултырып сәй эсеүемде ҡыҙыҡ күрәләр. "Башкирия за чай села", - тиҙәр. Хужабикә кофе бешереп бирһә, ул бәләкәй генә сынаяҡты ике йотоуҙа эсәм дә ҡуям, уныһын да эселегәнен сытырайып, тегене үпкәләтмәйем тип, көсләп йотам. "Кофены улайтып эсмәйҙәр, ауыҙҙа тәмен татып ҡына, һурып ҡына йотоу кәрәк, ә һин ағыу эскән һымаҡ күҙ йомоп төп күтәрәһең", - тип өйрәтә хужабикә көлә-көлә.

Хужабикә иртәнән кискә тиклем аяғөҫтә. Көнө буйы эҫелә әлһерәп, әммә әкрен генә эшләп йөрөй. Йәшәүселәренең бүлмәләрен тәртипләй, көнөнә нисәләр тапҡыр баҡсаһына һыу һибә, өҙләкһеҙ ашарға бешерә, ейәндәрен көтөшә. "Нишләп аҙыраҡ ятып тормайһығыҙ, һеҙ оло кеше лә инде", - тиһәм: "Юҡ, яткан һайын ятыуға өйрәнелә, үҙенде йәлләргә ярамай, ҡартайған һайын күберәк хәрәкәт итергә тейешбеҙ. 83 йәшлек әсәйем әлеге мәлдә тауҙарҙа йүгереп йөрөп кәзәләрен һауып ала, үҙ аллы донъя көтә", - тип һөйләй. Диңгеҙгә такси менән төшөп-менеп йөрөгән ҡатындарҙан көлә. Диңгеҙ, тигәндән, ерле халыҡ артыҡ һыу инеп бармай икән. Хужабикәнең 15 йылдан ашыу диңгеҙгә яҡын барғаны ла юҡ. Мин уны тәҙрәнән күрәм, шауын ишетәм - еткән, тип кенә ҡуя.

Ирҙәр иртәнән кискәсә эштә, тип әйттем бит инде. Өлкән хужа дәүләт автобустарында водитель, улы шәхси микроавтобусында туристарҙы төрлө ерҙәргә алып йөрөтә, үҙе гид ролен дә үтәй. Беҙҙе лә Абхазия тауҙарына алып барҙы. Мәмерйә, шарлауыҡ, тарлауыҡ, күл, тау, башня, ниндәйҙер ҡәлғәләр ҡалдыҡтарының барыһының да тарихтарын, легендаларын белә һәм бик мауыҡтырғыс итеп һөйләй. Ҡыҫҡаһы, теге яҡҡа ҡараһаң да нимәлер аңлата, был яҡҡа ҡараһаң да күҙең төшкәнгә ҡыҙыҡһырлама бирә. Русса теле шыма, үҙ телендә һәм тағы ла әллә нисә төрлө тау халҡы телдәрендә һөйләшә. "Ул хәтле тарихты ҡайҙан өйрәндегеҙ, уҡынығыҙмы?" - тип һорайым. "Беҙҙә уларҙы барыһы ла белә, алты йәшлек улымдан һорағыҙ, күптәрен ул да һөйләр. Ололар нимәгә тәртөп күрһәтһә лә, ир бала уның тарихын белергә тейеш", - тип тә аптыратты.

Ғаиләләге ирҙәр алһыҙ-ялһыҙ эштәләр, шунын араһында тағы ла бер кәсептәре бар. Баҡсаның төбөндә ултырған оло агас мискәләрҙә йөҙөм, әсе алма һәм тағы ла ниндәйҙер бер емештән (исемен хәтерләп ҡалмағанмын) шарап әсетәләр. Шул шараптың әсеү кимәленең бер өлөшөндә унан чача тигән көслө иҫерткес эсемлек ҡыуалар. Аңлауымса, беҙҙәге самогон кеүегерәк эшләнә ул, тик үҙенән емеш еҫе килә. Ана шул шарапты һәм чачаны һаталар. Хужабикә ҡараңғы төшкәс ҡайтып ингән ир-егеттәренә "шун-

✓ ***Был ғаиләләге килен кешенең һөнәре бар, юғары белем алған, әммә уның буйынса әле бер көн дә эшләмәгән. Ғаиләһенә өс-дүрт бала тапмайынса, ул башҡа нәмә хаҡында уйларға тейеш түгел, ти ҡәйнә. Ул үҙе лә шулай иткән.***



са-шунса адресҡа заказдар бар" тип әйтә лә, улары йәһәт кенә таратып сыға. Беҙ булған аҙнала ла аҙ килем алманы улар был сауҙанан.

Ғаиләлә өс ир бала үҫә, тигәйнем. Өлкәненә 6, икенсеһенә 4, кеселәре имсәк бала. Килен кеше бәләкәсенән бушай алмай, уныһы бик мыжыҡ күренә. Алты йәшлек малай мин торғанда инде урамдың түшәмен йыуып йөрөгән була. Һабынын күпертеп, щеткалап йыуа. Унан ситлектә торған һунар эттәрен ашата, шуларҙы һыу менән ҡойондора, тарай. Ҡустыһын эйәртеп, велосипедта ҡайҙалыр барып киләләр. Бер шуларҙың артынан эйәреп менеп киләбеҙ. Ҡустыһы артта ҡала. "Сандалийымдың ҡайышы өҙөлгән, шуға яйлайым", - тип аңлата ағаһына. Шунда тегенеһе килеп, уның аяғын күтәртеп ҡарай ҙа: "Иртәгә сығып һатып алып бирермен", - ти. Был хәбәрҙән беҙ, ҡалай мыҡты кеше, һатып әпирә имеш, тип һөйләшеп көлөшәбеҙ. "Аҡсаң бармы һуң әпирергә?" - тиһәм: "Бар, өләсәй бирә", - ти бик етди итеп. Һуңынан шуны өләсәһенә һөйләһәм, малайҙарға бәләкәстән аҡса биреп өйрәтәбеҙ, буласаҡ ир кеше аҡса хаҡын һәм сығымдарҙы белергә тейеш, ти. Урам йыуған өсөн мин аҡса бирәм, эттәрен ҡаратып олатаһы түләй, ул шул аҡсаларҙы үҙе кәрәк тип тапҡан әйберҙәргә тотона, күберәген ҡустыһының күңелен күрә, шуның сәпитенә запчастар, уйынсыҡтар, тәмлекәстәр ала инде, ти. Шунда был халыҡ ир-егетенең ҡолап ятып аҡса эшләргә, нимәнән дә килем алырға ынтылып торған тәбиғәттәрен аңлағандай булдым. Уларҙа белем алыу алға ҡуйылмаған, ә үҙендә һәм ғаиләңде аҫрау, уларға яҡшыраҡ шарттар, яҡшыраҡ тормош булдырырға өйрәтеү алға ҡуйылған икән. Хатта балаларҙы таң һарыһынан уятып эшкә ҡушыу ҙа тап ана шул хеҙмәт тәрбиәһенең бер өлөшө. "Йәлләмәйһегеҙме?" - тиһәм, "Йоҡоһона баш була алмаған егет уңмай. Йәнлектәрҙе ҡара, ҡоштарҙы, улар аҙ ғына йоҡлай, кешеләр ҙә шулай тейешле, әммә улар боҙолған", - тип әллә нимәләр фәлсәфәләп ташлай оло хужа. Уның ошондай юҫыҡтағы аҡылдарын тыңлап үҫә инде йәштәре.

Ир-егеттәр урамда, сауҙала, юлда бик бәйләнсектәр, һин унан һатып алһын, уның тауарын һайлаһын, уның машинаһына ултырһын өсөн ҡырҡ һүҙгә етәләр. Әрләп ебәргәндә лә үпкәләмәйҙәр, әйләнә лә кире килеп "Уважаемая! Красавица!" тип ҡабаттан башлайҙар. Был халыҡтың бер генә лә ғорурлығы юҡ икән, тип уйлап та ҡуяһың. Беҙҙә шундай әрһеҙлек, йығылып ятып өгөтләү ғәҙәте юҡ та инде. Ә бына шул ирҙәр өйҙәрендә хан кеүектәр. Кистәрен ике ҡатын уларҙы ҡапҡа асып ҡаршы ала. Эргәләрендә бейеп торалар. Апай иренең артынан таҫтамал тотоп эйәреп йөрөй, йыуынып сыҡҡанын көтөп тора ла, ашарға ултырта. Ирҙәр ашағанда, нисек кенә һуң булыуға ҡарамаҫтан, балалар ҙа ҡаршыларында ултыра. Хатта иң бәләкәйҙәрен дә алып сығып, атай-олатай алдына ҡуялар. Өҫтәл артында үҙ телдәрендә һөйләшәләр - беҙгә аңлашылмай.

Халыҡ эсмәй. Эсеү ғәҙәте ҡандарында юҡ. Ҡайһы көндәре өлкән хужа ғына берәй бокал шарап һурып ултыра, йәше ауыҙына ла алмай. Хужабикә лә бөтөнләй ҡапмай. Ял иткән мәрйәләрҙең туҡтауһыҙ эсеүен, күренеп тора, оҡшатмайҙар, әммә өндәшмәйҙәр. Хужабикә шулай ҙа, артыҡ ҡыланғандарҙы икенсе йылына килһәләр алмайбыҙ, тип һөйләй.

Ҡатын-ҡыҙ хаҡында әйтергә онотҡанмын. Урам араһында ҡатындар бик һирәк күренә. Бигерәк тә ял урындарында, һыу буйында тау милләтле ҡатын-ҡыҙ бөтөнләй юҡ. Йөҙ-төҫтәре ап-аҡ, йомороraҡ тән төҙөлөшлөләр. Йыуантаҡтар, тиергә лә була. Күптәре, нишләптер, сәстәрен аҡҡа буята. Бер күҙ һалыу менән үк һин уның тау ҡыҙы икәнен күреп тораһың. Танау, күҙ, ҡараш уларҙа үҙенсәлекле бит инде. Һәм шул төҫкә аҡ сәс бөтөнләй килешмәй. Мин ошоно хужалар менән һөйләшкәндә лә әйттем. Тау ҡыҙҙарының үҙҙәренең тәбиғи төҫө матур, ҡара сәскә ни етә, тинем.

Был ғаиләләге килен кешенең һөнәре бар, юғары белем алған, әммә уның буйынса әле бер көн дә эшләмәгән. Ғаиләһенә өс-дүрт бала тапмайынса, ул башҡа нәмә хаҡында уйларға тейеш түгел, ти ҡәйнә. Ул үҙе лә шулай иткән. Һөнәре буйынса иҡтисадсы булған икән. Биш бала тапмайынса, эшләмәгән, унан ғына үҙе теләп эшкә сыҡҡан. Тимәк, был милләт ҡатын-ҡыҙына иң беренсе сиратта ҡатын-ҡыҙ бурысын үтәү талабы һалынған (асылда, башҡа милләт ҡатындарына ла шулай тейешле лә бит...) һәм улар был бурыстарын үтәмәй тороп, ғаиләлә лә, йәмғиәттә лә хөрмәт ҡаҙана алмай.

Йәштәрҙең өйләнешеүе үҙ-ара танышып та, димләп тә башҡарыла. Хужалар үҙҙәре танышҡан, әлеге улдары ла кәләште үҙе алып килгән. Ә былай димселәр ныҡ яҡшы эшләй икән, йәше еткән егет тә, ҡыҙ ҙа ултырып ҡалмай. Атай-әсәй димсене өйҙәренә саҡырып, үҙ шарттарын әйтә, түләй һәм тиҙ арала хәл дә ителә. Үҙ варианты булмаған йәш кеше ололар һүҙен йыҡмай. "Сит милләткә өйләнәләрме, кейәүгә сығалармы?" - тип һорағайным, хужалар иҫләп-иҫләп тә таныштары араһында ундайҙарҙы хәтерләй алманы.

Тағы ла теге бәләкәй малайға әйләнеп ҡайтам. Ял итеүселәрҙең араһында балалы кешеләр ҙә бар һәм уларҙың балалары хужаларҙың балаларының әйберҙәренә тейә. Мәҫәлән, әүһәләйенә, сәпитенә тотона. Шунда хужабикә "Хужанан рөхсәт һорарға кәрәк", тип тыя. Мин, өлкән кеше шул бала-саға әйберенә лә ҡыҫыламы икән, тип уйлайым. Анан "хужа ла хужа" тигәндәре шул алты йәшлек малай булып сыҡты. Ғаиләләге өлкән малайға "хужа" тип өндәшәләр икән. Тимәк, атай менән олатай өйҙә юҡта был ғаиләгә ул хужа. Шунан нисек итеп ул бала етди һәм яуаплы булмаһын! Шул бер һүҙ генә лә түбәһен күтәрә бит уның.

Иң оҡшамағаны урыҫ туристары булды. Сит ил ял итеү зоналарында беҙҙең ил халҡын яратмауҙары юҡҡа түгел икән. Ҡайҙа иҫерек кеше - шул урыҫ, ҡайҙа ғауға - шунда иҫерек урыҫ. Диңгеҙ ярында һәр урында "эсмәҫкә" тип яҙылған - юҡ, улар шешәләрен таҫтамалға төрөп алып килеп тә эсә. Ҡолап йоҡлап китәләр, эҫе һуға, яналар, баталар... Унан ҡала шул халыҡ урамда купальниктарҙа йөрөй. Белеп торалар ниндәй ерҙә икәндәрен, ерле милләттең тәртип сиктәрен, ундайҙы өнәмәгәнен дә. Үҙ фиғелдәренә, тәрбиәләренә әҙәп һалынмағас, шулай итәләрҙер, күрәһең.

Хушлашҡанда, хужалар: "Башҡорттарҙы ла белдек, мәҙәниәтле халыҡ икәндәр. Тағы ла килегеҙ", - тип ҡалдылар. Беҙ ҙә уларҙы белдек. Ҡунаҡсыл, әммә артыҡ түшәлеп бармаған, алсаҡ, әммә үҙ өлөшөн тоттормаҫ һәм бер нәмәне лә буш бирмәй торған халыҡ булды былар. Беҙҙең кеүек, күп нәмәне айыҡ аҡыл менән түгел, ә хис һәм эмоциялар аша хәл иткәндәргә ундайҙар араһында бик ауыр булыр ине. Шулайтып, сит ерҙәргә һоҡланып, сит халыҡты ҡыҙыҡһынып күҙәтеп, үҙ төйәгебеҙҙе һағынып, туған телебеҙҙе танһыҡлап ҡайтып киттек...

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

## ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР



# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ

* * *

Ғалимдар 80 йәшлек кешенең күпме ҡаны ағышын, һауа һулышын, эскән һыуын, сереткән аҙыҡ-түлеген, һөйләгән һүҙен дә иҫәпләп сығарғандар. Шул иҫәп буйынса, мин, 79 йәштәге кеше, тәнемдә йөрәгем аша 250 миллион литр ҡан үткәргәнмен икән. Үпкәләрем 300 мең литр һауа һулаған. Ауыҙымдан, эсәктәремдән 55 мең литр һыу, эсемлек үткән.

150 мең килограмм аҙыҡ-түлек ашап сереткәнмен. Самаса һөйләгән һүҙҙәремдең күләме лә, китапҡа һалһаң, икешәр йөҙ битлек меңәр китапҡа саҡ һыйыр ине, имеш.

Әҙәмдең ауыҙы, тәне, эсәк, бауырҙары аша бик күп аҙыҡ-түлек, һыу-эсемлек үтә икән шул. Күпме аҙыҡ, бүтәне сарыф ителә.

Эшләгән эштәр, йәшәгән ғүмерҙең файҙаһы шуларҙы күпме ҡаплата ала икән?

Уларын да үлсәп самалап ҡарарға ине.

Әрәмтамаҡ булып, ғүмерҙе заяға үткәреп йәшәлмәне микән?

Ғалимдар анауындай хисап алғас, бынауындай яуабын да бирергә кәрәктер бит инде.

* * *

Мыҫҡыллауға яуап ҡайтарғансы, уға иғтибар итмәүең яҡшыраҡ, ти ҡытай халыҡ мәҡәле.

Әшәкегә ҡағылып, бысрана күрмә, тип кәңәш итә беҙҙең халыҡ.

Үҙеңдән түбәндәргә түбән тәнҡите, алама һүҙе, йоҡмаҫ мыҫҡылы өсөн яуап биреп, аңлатып булашыу үҙеңде шулар түбәнлегенә төшөрөп алыуға тиң булыр ине.

Аламалыҡ өсөн баш кәрәкмәһә лә, уның кире шауҡымы көслө.

Аламалыҡҡа аламалыҡ менән яуап биреү үҙ күңелеңде ҡырып, тиҫкәре энергияны хасил итеүе генә мөмкин.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**(Дауамы бар).**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Курсты үҙгәртеү

Атайым үҙе нимә теләгән, шул эштәрҙе генә башҡарған. Ул моряк та булған, ит сабыусы ла, фермер ҙа, уйлап табыусы ла, ландшафт дизайнеры ла, төҙөүсе лә. Шуға күрә мин, эш - ул үҙең теләгән нәмәне башҡарыу, тигән ныҡлы ышаныс менән үҫтем. Әгәр һөнәреңде үҙгәртеү теләге тыуа икән, бары тик тоторға ла яңы нәмә менән шөғөлләнә башларға кәрәк. Мин юрист булырға уҡыған еремдән уҡыуымды ташлап, портретист та булдым, китаптар ҙа яҙҙым, карикатуралар ҙа төшөрҙөм. Ә бит күп кеше үҙенең яратҡан эше менән шөғөлләнеү өсөн мөмкинлек күрмәй. Эшеңдән ҡыуаныс һәм йәм табыу өсөн йөрәгеңде тыңларға, ул нимә ҡуша - шуны эшләргә кәрәк. Мин быға ышанам һәм тап ошо принцип буйынса йәшәйем. Әлбиттә, барыһы ла үҙ иркенә эшләргә теләмәй. Ҡайһы бер һөнәрҙәр өсөн хеҙмәтте шулай ойоштороу бөтөнләй мөмкин түгел... Әйтәйек, банк менеджерҙары йәки пассажирҙар авиалиниялары пилоттары араһында фрилансерҙар булыуы мөмкин түгел. Бынан тыш, күптәр бер генә эштә эшләргә һәм бер генә карьера яһарға теләй. Әммә мине иң аптыратҡаны - күпселектең үҙ ирке менән үҙе яратмаған эшкә йөрөүе һәм үҙҙәрен аҡлау өсөн аҡланыуҙар табыуы. Бер һүҙ менән әйткәндә, карьераны ла беҙ инаныу системаһына ярашлы һайлайбыҙ. Карьераны үҙ ваҡытында белеме самалы үҫмер, йәғни үҙебеҙ һайлағанбыҙ. Әгәр беренсе һөнәрҙе 17 йәштә һайларға тура килһә, икенсе мөмкинлекте лә һынап ҡарарға була бит. Ни өсөн үҙеңде бер нисә өлкәлә һынап ҡарамаҫҡа? Әйтәйек, ҡасандыр музыка уҡытыусыһы булырға хыялландығыҙ, ти, әммә ата-әсә теләге буйынса, уларҙың һүҙен йыҡмайым тип, инженер булып киттегеҙ. Тәү сиратта, был һөнәрҙе улар өсөн һайлайһығыҙ, сөнки ата-әсәһеҙ йәшәү мөмкин түгел. Әммә уларға шәхси тормоштарында ҡыҙыҡһыныу табырға кәрәк. Улар өсөн үҙегеҙҙе ҡорбан итеп, уларҙың ғына түгел, үҙегеҙҙең тормошоғоҙҙоң үҫешен дә тотҡарлайһығыҙ, сөнки донъяға ата-әсәйегеҙҙең тормошҡа ашмаған хыялын үтәү өсөн килмәгәнһегеҙ.

Бынан тыш, быны үҙегеҙ өсөн дә эшләргә кәрәк. Инженерға уҡып, 4-5 йыл ғүмерегеҙҙе әрәм итеүегеҙ етмәгән, тағы ла 40 йылығыҙҙы үҙегеҙ яратмаған эш менән үткәреү ярамай. Был осраҡта үҙегеҙҙе ғүмер буйы уртасалар рәтендә йөрөүгә дусар итәсәкһегеҙ һәм был күңел өсөн дә, сәләмәтлек өсөн дә ныҡ зыянлы. Ә эште яратып ҡына уны яҡшы сифатлы итеп башҡарырға мөмкинме? Миҫалға ике табипты алайыҡ. Уның береһе пациенттарын дауалауға бар күңелен бирә, икенсеһе - машинаһын йәнендәй күрә... Һуҡыр эсәгегеҙҙе алдырғанда кеменә барыр инегеҙ? "Миңә тиҙ генә эштән китеп, музыка менән шөғөлләнә башларғамы, үҙ төркөмөмдө ойошторорғамы ни?" - тиер кемдер. Юҡ, бары тик эштән буш ваҡытығыҙҙа көйҙәр уйнарға ныҡлы өйрәнегеҙ, бер нисә концерт ойоштороп ҡарағыҙ. Шундай термин бар - аҡыллы хәүеф. Тәүҙә өйрәнәһең, белем туплайһың, оҫталығыңды камиллаштыраһың, үҙ хеҙмәтеңә һорау тыуҙыраһың... Һуңынан ғына яратҡан эшеңде һөнәргә әйләндерәһең.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✔ *"Проектыбыҙҙың йомғаҡлаусы шиғри кисәһен ысын башҡорт теле байрамы итеп эшләргә теләйбеҙ. Хәҙер шуға ҙур әҙерлек эше бара", - тип һөйләне проекттың авторы Нәйлә Сәфәрғолова.*



СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ДИЛӘРӘ ТАҒЫ ЕҢЕҮСЕ



**Ошо көндәрҙә Санкт-Петербургта, Дмитрий Шостакович исемендәге филармонияның Ҙур залында Елена Образцова исемендәге XI йәш опера йырсылары халыҡ-ара конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы үтте.**

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы Диләрә Иҙрисова Санкт-Петербургтан Анастасия Донец менән абруйлы өсөнсө урынды бүлеште. Конкурста бөтәһе донъяның 21 иленән 18-32 йәшлек 184 йырсы ҡатнашты. Финалға биш илдән 15 конкурсант үтте. Донъя халыҡ-ара конкурстар федерацияһы ағзаһы булған был конкурс, ғәҙәттәгесә, Елена Образцованың тыуған ҡалаһы Санкт-Петербургта ике йылға бер тапҡыр уҙғарыла. Киләһе конкурс 2019 йылда, йырсының тыуыуына 90 йыл тулыуға арнап ойоштороласаҡ. Был Диләрә Иҙрисованың тәүге еңеүе генә түгел. Ул - "Онегин" тәүге милли опера премияһының "Дебют" номинацияһы лауреаты, "Алтын битлек" Рәсәй милли театр премияһы лауреаты.

# ШИҒРИ ҺҮҘГӘ ҺЫУҺАҒАНБЫҘ...




**Өфөлә Шиғри һүҙ оҫтаһын һайлаясаҡтар. Конкурс форматындағы ғәҙәти булмаған кисәне ноябрь айында Башҡорт опера һәм балет театрында уҙғарыу күҙаллана. Сара "Ҡурай" телеканалының "Йөрәк һүҙе" шиғри проектына йомғаҡ яһаясаҡ.**

2017 йылда проекттың 56 тапшырыуы эфирға сыҡты. Унда билдәле яҙыусылар, шағирҙар, актерҙар, йырсылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре ҡатнашты. Финал өсөн уларҙан 12 дуэт һайлап алынасаҡ. 1 октябрҙән 30-на тиклем социаль селтәрҙә тауыш биреү үтәсәк. "Проектыбыҙҙың йомғаҡлаусы шиғри кисәһен ысын башҡорт теле байрамы итеп эшләргә теләйбеҙ. Хәҙер шуға ҙур әҙерлек эше бара", - тип һөйләне проекттың авторы Нәйлә Сәфәрғолова. Быға оҡшаш проект - шиғри бәйге йәки "Шиғри һүҙ буйынса беренсе чемпионат" 2015 йылда Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында үтте. Ул Әҙәбиәт йылын тамамлауға арналған Шиғриәт балы сиктәрендә уҙҙы.

# ТАҒЫ БЕҘҘЕҢ ҺЫЛЫУҘАР...



**Башҡортостан һылыуы Зөһрә Мөхәрәмова "Мисс и Мистер Студенчество Россия" конкурсында вице-мисс титулына лайыҡ булды.**

Һылыуға тажды Өфөнән икенсе һылыуыбыҙ - ШОС һәм БРИКС илдәренең Студентлыҡ королеваһы Гөлнур Зиннәтова кейҙерҙе. "Мисс и Мистер Студенчество России-2017" XI бөтә Рәсәй интеллект, ижад һәм спорт конкурсы Силәбелә уҙҙы. Еңеү өсөн илебеҙҙең төрлө төбәктәренән 50 студент: 33 ҡыҙ һәм 17 егет көрәште. Конкурста Башҡортостан Республикаһы исеменән "Bashkirian Beauty" студияһы моделдәре: Башҡорт дәүләт университетының Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында 4-се курста уҡып йөрөүсе Зөһрә Мөхәрәмова һәм Өфө дәүләт авиация техник университетының информатика һәм робот-техника факультетында шулай уҡ 4-се курста белем алыусы Данис Йосопов сығыш яһаны.

# ҠУРАЙҘЫ ЯРАТАЛАР...

**Билдәле ҡурайсы Рәмил Ғәйзуллин "Музыкальная Сарыарка" XIX халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашты. Фестиваль Ҡарағандала (Ҡаҙағстан) үтте. Унда Ҡаҙағстандан, Рәсәйҙән, Үзбәкстандан, Ҡырғыҙстандан, Әзербайжандан, Төркиәнән, Швейцариянан, Израилдән, Америка Ҡушма Штаттарынан профессиональ башҡарыусылар һәм коллективтар ҡатнашты.**

Башҡортостан музыканты Татимбета исемендәге академия хоры менән сығыш яһаны. "Карағандала тәүгә сығыш яһаным. Башҡорт көйө һәм ҡурай ҡаҙаҡтарҙа һәр ваҡыт ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Беҙҙе Ҡарағанда өлкәһе аҡымы ҡабул иткәндә бөтә музыканттар исеменән ҡурайҙа уйнауымды һоранылар. Башҡорт сәнғәтен пропагандалаусы бындай сәфәрҙәр республикабыҙ өсөн бик мөһим, - тип һөйләй Рәмил Ғәйзуллин. - Октябрь һәм ноябрь айҙарында мине йәнә Астаналағы һәм Ҡарағандалағы концерттарҙа ҡатнашырға саҡырҙылар".

# ҒӘЛИ ХӘМЗИН ПРИЗЫНА...



**Башҡортостанда йырсыларҙы Ғәли Хәмзин исемендәге III вокалсылар конкурсында ҡатнашырға саҡыралар. Бәйге 20-24 ноябрҙә Белорет районында ойоштороласаҡ, ғаризалар ноябргә ҡәҙәре ҡабул ителә.**

Башҡарыусылар жюри хөкөмөнә йырсының репертуарынан йырҙар тәҡдим итергә тейеш. Конкурс тыңлауҙары ике турҙа уҙа: I тур - һайлап алыу (20 ноябрҙә Инйәр ауылындағы район мәҙәниәт йорто, 22-лә Сермән ауыл мәҙәниәт йорто). II тур - финал (24 ноябрҙә Әхмәр ауыл мәҙәниәт йорто). Шул уҡ көндә гала-концерт һәм еңеүселәрҙе бүләкләү була. Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәли Хәмзин призына I йырсылар бәйгеһе 2013 йылдың 22 ноябрендә Белорет районында, халыҡ артисының тыуған ауылы Ҡоҙғон-Әхмәрҙә үткәрелгәйне. 2015 йылдың 20 ноябрендә һәүәҫкәр йырсыларҙың II конкурсы уҙҙы.

# МУЗЫКА ФЕСТИВАЛЕНДӘ

**27-30 сентябрҙә Ҡаҙанда XIII "Европа-Азия" халыҡ-ара яңы музыка фестивале уҙҙы.**

Быйыл сараға Австралия, Вьетнам, Гонконг, Испания, Төркиә, Төркмәнстан һәм тәүге тапҡыр Колумбия композиторҙары, музыканттары килде. Айырыуса Рәсәй төбәктәренән: Вологда, Кострома, Силәбе, Краснодар, Ярославль, Мәскәү ҡалаларынан, Башҡортостан, Удмурт, Сыуашстан, Ҡабарҙа-Балҡар, Яҡутстан республикаларынан ҡатнашыусылар күп булды. Өфө музыканттары, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты уҡытыусылары фестивалдең дипломына лайыҡ булды. Ҡурайҙа уйнау сәнғәте менән Ҡурайсылар союзы рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Өфө сәнғәт институтының традицион музыкаль башҡарыу кафедраһы мөдире Артур Ғайсаров таныштырҙы. Ҡурайсы С. Сәйҙәшев исемендәге Ҙур концерт залында уйнаны. Башҡортостандың Композиторҙар союзы рәйесе, профессор, Өфө дәүләт сәнғәт институтының композиция кафедраһы мөдире, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ артисы, Рәсәй Композиторҙар союзының Д. Шостакович исемендәге премия лауреаты Ләйлә Исмәғилева шулай уҡ үҙенең әҫәрҙәре менән сығыш яһаны.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (19) дүшәмбе | 6:05 | 7:35 | 13:30 | 17:00 | 18:30 | 20:00 |
| 10 (20) шишәмбе | 6:07 | 7:37 | 13:30 | 16:58 | 18:28 | 19:58 |
| 11 (21) шаршамбы | 6:09 | 7:39 | 13:30 | 16:55 | 18:25 | 19:55 |
| 12 (22) кесе йома | 6:11 | 7:41 | 13:30 | 16:53 | 18:23 | 19:53 |
| 13 (23) йома | 6:13 | 7:43 | 13:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 14 (24) шәмбе | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 16:48 | 18:18 | 19:48 |
| 15 (25) йәкшәмбе | 6:17 | 7:47 | 13:30 | 16:46 | 18:16 | 19:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 октябрь "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+
**8 октябрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+
**10 октябрь "Алтын асҡыс"** (А. Толстой), музыкаль мажара. Башлана 11.00 0+
**10 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**11 октябрь "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма 12+
**12 октябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия 12+
**13 октябрь "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00 0+
**8 октябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+
**8 октябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+
**11 октябрь "Ҡыҙ урлау йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия 12+
**13 октябрь "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Бәләкәй зал**
**7, 8 октябрь Премьера "Принцесса Крапинка"** (А. Шмидт). Башлана 14.00 0+
**12, 13 октябрь Премьера "О чем поет осень?"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). Башлана 12.00 0+
**Ҙур зал**
**7 октябрь "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). Башлана 12.00 0+
**8 октябрь "Сказка синего моря"** (Б. Ходырев). Башлана 12.00 0+
**11 октябрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). Башлана 12.00, 14.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12-13 октябрь Премьера "Бернарда Альба йорто"** (Ф. Гарсия Лорка), драма 16+

**Әйткәндәй, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры үҙенең 27-се миҙгелен Мостай Кәримдең "Өс таған" повесы буйынса сәхнәләштерелгән спектакль менән асты. Уны Башҡортостанда тыуып үҫкән йәш Мәскәү режиссеры Антон Федоров ҡуйған.**

Быйыл Стәрлетамаҡтың башҡорт драма театры "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй ҡалалар театрҙары" проектында ҡатнашты. Ике проект, шул иҫәптән "Өс таған" финанслау алды. "Артистар ҙа, тамашасылар ҙа көтөп алған сағыу тамаша аншлаг менән үтте, - тинеләр театрҙың матбуғат хеҙмәтендә. - Ошондай әһәмиәтле көндә Мостай Кәримдең ҡыҙы Әлфиә Мостафа ҡыҙы ла беҙҙең менән бергә булды. Ул режиссерҙың повесҡа яңыса ҡарашын, актерҙарҙың оҫталығын, ижади төркөмдөң эшен билдәләп, спектаклдең оҙон ғүмерле булыуын теләне".

Яңы ижади миҙгелдә башҡорт драма театрында икенсе премьера - Ф.Г. Лорканың пьесаһы буйынса "Бернарда Альбаның йорто", ноябрҙә Д. Сәлиховтың "Ҡатын түгел, аждаһа!", декабрҙә иһә "Берҙәм Рәсәй" партияһы булышлығында Н. Гоголдең "Өйләнеү" спектакле ҡуйыласаҡ.

*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

**Көлөү - ғүмерҙе оҙайта, ти халыҡ. Балалар көнөнә 300 тапҡыр көлә, тиҙәр. Кеше өлкәнәйә килә, был һан да кәмей, тип билдәләй ғалимдар. Үсмерҙәр көнөнә - 6, 20 йәште үткәндәр 4 тапҡыр ғына көлә, имеш. Бөгөнгө геройыбыҙ, көлөү - ул дауа, тип раҫлай. Яңы ижад миҙгелендә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы шаяртыуҙы аңлаған, көлөргә яратҡан тамашасыларына бүләк әҙерләй. Бында "Көлкө шоу" тип аталған яңы төркөм барлыҡҡа киләсәк. Төркөмдөң художество етәксеһе, һөйләү жанры артисы Фаяз ЙӘНТҮРИН менән әңгәмәләшәбеҙ.**



# БЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠҠА...

## эскерһеҙ юмор хас

**"Көлкө шоу" тип аталған яңы төркөм менән таныштырып китһәгеҙ ине?**

- Быйылғы ижад миҙгелендә Башҡорт дәүләт филармонияһында яңы төркөмдәр барлыҡҡа килде. Филармонияла эшләп килгән "Ҡыҙыҡ менән Мәҙәк" эстрада төркөмө әлегә республикала берҙән-бер ине. Артист булараҡ, ошо юмор театрында ҡанат нығытып, тәжрибә тупланым. Хәҙер яңы төркөмдә эшләйәсәкмен, филармония ошо йүнәлештә ижад итәсәк тағы бер коллектив булдырҙы. Бөгөн шоуҙар заманы, халыҡтың күңеленә был һүҙ майҙай яғыла, шуға ла бер көлкө шоуы тәҡдим итмәксебеҙ. Унда "Ҡыҙыҡ менән Мәҙәк" төркөмөнән артистар Зөлфиә Әхмәтова, Ғәлиә Тимербулатова, йырсы-композитор, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәмил Хәзиев күсте. Шулай уҡ яңы ғына Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлап, хеҙмәт юлын башлап ҡына торған йәштәр - Зөлхизә Ғәликәйева менән Фәнил Ҡарасурин да беҙҙең менән эшләйәсәк. Был төркөм яйлап үҫешәсәк, үҙенең юлын, тамашасыларын табасаҡ. Әлегә беҙҙең менән Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, Башҡортостандың халыҡ артисы Алмас Әмиров шөғөлләнә. Скетчтар, пародиялар йыр-бейеү менән аралашып барасаҡ концерттарҙа. Октябрь айында яңы төркөм менән Белорет районына гастролгә сығырға йыйынабыҙ.

**Дөйөм алғанда, бөгөн илдә юморға ҡоролған тапшырыуҙар, концерттар популяр, халыҡ уларға ағылып йөрөй. Был нимә менән бәйле, тип уйлайһығыҙ?**

-Тарихтан билдәле, борондан комедия театрҙары ойоштороу, халыҡ алдында көлкөлө ваҡиғалар уйнау киң таралған булған. Тормош булғас, барыһы ла була, сәйәси хәлдәр ҙә киҫкенләшергә генә тора, төрлө-төрлө кире мәғлүмәтте күп ишетәбеҙ. Былар барыһы ла кешене арыта. Бынан арыныуҙың бер юлы бит ул сәнғәт. Килеп, рәхәтләнеп көлөп, кире энергиянан арынаһың. Унан һуң, үҙеңә, булған ваҡиғаларға юмор аша ҡарай белеүҙән дә яҡшыраҡ сифат юҡ ул. Хатта быны һәләт тиер инем. Шуға ла тап ошондай тапшырыуҙар, шоуҙар популярҙыр, моғайын. Көлөү бит ул - дауа! Дауаның иң осһоҙло, ябай юлы. Бер көн булһа ла йылмайып-көлөп йөрөп ҡарағыҙ әле, шунда уҡ кәйефегеҙ күтәреләсәк, сирҙәрегеҙ ҙә онотоласаҡ. "Ҡыҙыҡ менән Мәҙәк" төркөмөнөң концерттарына ҡатын-ҡыҙҙар нисек әҙерләнә, беләһегеҙме? Улар унда күҙен-битен буямай бара, сөнки илай-илай көлә торғас, косметика барыбер йыуылып төшә. Шуға ла яңы төркөмдөң дә үҙ тамашасылары булыр, тигән ышаныстамын.

**Һәр халыҡтың үҙенә генә хас юморы була. Бөгөн дә һәр башҡорт ауылында Алдарҙар - шаян, телгә бөткән кешеләр йәшәп ята, уларҙың шаярыуҙары лаҡап булып беҙгә лә килеп ишетелә. Ошо халыҡсан юморға нигеҙләнгән сәхнә әҫәрҙәрен ижад итеүселәр бармы, ниндәй сығанаҡтарға мөрәжәғәт итәһегеҙ?**

- Халыҡ араһында күберәк булырға, аралашырға тырышабыҙ. Башҡортостандың төрлө район-ҡалаларынан ошондай шаяндарҙың ҡылыҡтарын хатҡа яҙып һалалар, концерт алдынан килеп һөйләп китәләр. Эйе, бөгөнгө көндә юмор яҙған яҙыусылар һирәк. Был йәһәттән ҡытлыҡ бар. "Ҡыҙыҡ менән Мәҙәк" өсөн, мәҫәлән, Тимер Ниәтшин, Юнир Салауатов, Салауат Итбаев әүҙем ижад итә ине. Эстрада юморы менән театр комедияһы икеһе ике төрлө жанр. Театрҙар комедияны үҙҙәренсә уйнай, ә эстрада театры бөтөнләй икенсе күренеш. Ул халыҡсанырaҡ, халыҡ юморына яҡынырaҡ була. Беҙҙең халыҡ ихлас, эскерһеҙ, шул уҡ ваҡытта телгә маһир бит ул, юморы ла шулай уның. Филармония юмор оҫталары араһында конкурс та ойошторҙо быйыл беренсе тапҡыр, унда ҡатнашыусылар күберәк булыр, тип ышанғайныҡ. Был йүнәлештә эш дауам итәсәк, шуға ла яҙыусыларыбыҙ юмор яҙыуға ла иғтибар итер, моғайын.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*ХОККЕЙ*

# ҺӨҘӨМТӘЛЕ УЙЫНДАР КӨТӘБЕҘ

**Көҙҙөң икенсе айындағы уйындар серияһын "Салауат Юлаев" хоккей командаһы Өфөлә башланы. Үҙ боҙонда уҙғарасаҡ дүрт матчтың тәүгеһендә юлаевсылар Ханты-Мансийск ҡалаһының "Югра"һы менән осрашты.**

Уйындың беренсе осоронда хужалар, күпселектә ҡалыуҙарынан файҙаланып, ҡунаҡтар ҡапҡаһына бер шайба индерҙе. Икенсе осорҙа командалар уңышҡа өлгәшә алманы, ә һуңғы осорҙоң тәүге минуттарында "Югра" таблолағы иҫәпте тигеҙләне. Төп уйын ваҡыты ла, өҫтәлмә минуттар ҙа был осрашыуҙың еңеүсеһен асыҡлай алманы. Ә буллиттарҙа иһә Анатолий Емелин командаһы хоккейсыһы Павел Варфоломеевтың голы "Югра"ға еңеү килтерҙе. Уйын һөҙөмтәһе, 1:2.

КХЛ-дың ғәмәлдәге чемпионы - Санкт-Петербургтың "СКА"һы - менән "Салауат Юлаев" 4 октябрь осрашты. Матчтың тәүге ике осоронда, ҡунаҡтарҙан айырмалы рәүештә, юлаевсылар бер гол да индерә алманы. Ә "СКА" иһә үҙ иҫәбенә 5 гол яҙҙы. Өсөнсө осорҙа ғына Өфө хоккейсылары бер гол индереү яйын тапты. Тик уларға яуап итеп "СКА" тағы ла бер шайба "бүләк" итте. Шулай итеп, уйын, ҡунаҡтар файҙаһына, 1:6 иҫәбе менән тамамланды.

Алдағы осрашыуҙар "Салауат Юлаев" өсөн уңышлы булыр, тип ышанғы килә. Һәр хәлдә, көйәрмәндәр һөҙөмтәле уйындар көтә.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ АШАҒАНДЫ...

## йотоп торма

Ғәҙел кеше үҙенә ҡаты, башҡаларға йомшаҡ булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Минә шул ҡәҙәре күп эш башҡарырға кәрәк, шуға ла мин киттем йоҡларға.

**(Роберт Бенчли).**

Гел еңергә һәм оторға теләһәң, үҙеңдең уйыныңды уйлап сығар ҙа ҡанундарын бер кемгә лә әйтмә.

**(Эшли Брильянт).**

Ғәйбәтте тутыйғош кеүек ҡабатлама. Үҙеңдән дә берәй нәмә өҫтәп ебәр.

**(Веслав Брудзиньский).**

Кешене унынң дуҫтарына ҡарап хөкөм итмәгеҙ. Иуданың да дуҫтары бик яҡшы булған.

**(Поль Валери).**

Бөтә нәмәгә лә эйә булыу мөмкин түгел. Шуға ла мин иң әҙенән - аҡсанан башлаясаҡмын.

**(Януш Васильковский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Кеше бер ваҡыт ҡошсоҡ тотоп алған.**

**- Ирекһеҙлектә кәрәгем булмаясаҡ минең, - тигән ҡошсоҡ, - ебәрһәң, һиңә өс файҙалы кәңәш бирергә ант итәм.**

**Беренсе кәңәште ҡошсоҡ Кеше ҡулында булғанда, икенсеһен - ботаҡҡа ҡунғанда, өсөнсөһөн - ҡалҡыулыҡтың иң бейек нөктәһендә ишеттерергә һүҙ биргән. Кеше риза булған һәм тәүге кәңәшен һораған.**

**- Әгәр ҙә һин хатта ғүмереңдәй ҡәҙерләгән нимәнелер юғалтһаң, уның хаҡында үкенмә.**

**Кеше ҡошсоҡто ебәргән, ә ҡошсоҡ, ботаҡҡа ҡунып, икенсе кәңәшен биргән:**

**- Бер ҡасан да ысынбарлыҡҡа тура килмәгән, уйлап сығарылған хәбәрҙәргә ышанма.**

**Был һүҙҙәрҙән һуң ул ҡалҡыулыҡҡа осоп килеп:**

**- Эй, бәхетһеҙ! Мин ике ҙур бриллиант йоттом. Әгәр мине үлтерһәң, улар һинеке булыр ине, - тигән.**

**Кеше, асыуланып, башына тотонған. Аҙаҡ бер аҙ тынысланып:**

**- Өсөнсө кәңәшеңде булһа ла бир, - тигән.**

**- Ахмаҡ һин! - тип ҡысҡырған ҡошсоҡ. - Тәүге ике кәңәш тураһында уйлап та тормай, өсөнсөһөн һорайһың! Мин һиңә нимә тинем? Юғалтыуҙар хаҡында үкенмә, уйлап сығарылған хәбәрҙәргә ышанма, тинем. Ә һин тап киреһенсә эшләнең. Уйлап ҡара, минең кеүек кескәй ҡошсоҡ эсенә нисек ике ҙур бриллиант һыйһын? Һин алйот, шуға ла ябай кешеләр өсөн тәғәйенләнгән сиктәрҙә ҡалырға тейешһең!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 6 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары — **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2039/10